ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

24-2 февраль - март (шаҡай - буранай) 2018

№8 (790)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Атың бар, дәртең бар,**

тик ниңә һөйгәнең юҡ?



3

**Атай ғорурлығы - ир балала...**

Йәки малайҙарҙы нисек тәрбиәләргә?



8-9

**Һалдат йыры,**

йәки Ил һаҡлаусыларыбыҙға мөнәсәбәтебеҙ хаҡында һүҙ



10

**Ғаилә бәхете...**

бер уйлы булыуҙа ул



11

**ТВ-программа** 14

***Ҡайһы бер балалар шулай була. Атаһының малына ышанып, һис кәсеп һәм эш юлына кермәй. Ялҡаулыҡҡа ғәҙәтләнә. Ахырҙа, бер көн килер, аҡсалары ла бөтөр, йәшәр өсөн ҡулда һөнәрҙәре лә булмаç. Шуның өсөн, ата малына ышанып тормай, ни ҡәҙәр бай балаһы булһағыҙ ҙа, фәҡир кешенең балаһы кеүек, һөнәр өйрәнеү өсөн тырышығыҙ.***

***Ризаитдин нәсихәттәренән.***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Ни өсөн туған тел мәсьәләһе шул тиклем ҡатмарлы проблемаға әйләнде әле?

***Вәкил ХАЖИН, педагогика фәндәре кандидаты:*** Минеңсә, проблема туған тел уҡытыу мәсьәләһенә ике төрлө ҡараштан сығып эш итеүҙән килеп сыҡты: әсә телен туған тел булараҡ һәм икенсеһе - дәүләт теле булараҡ уҡытыу мәсьәләһенән. Ә бит шундай бүленешкә тиклем әсә телебеҙҙе туған тел булараҡ уҡытыуҙа бер ниндәй проблема булманы. Әлбиттә, проблема килеп тыуыуҙа объектив сәбәптәр ҙә үҙ ролен уйнаны. Башҡорт теле әсә теле булып торған, шул телдә аралашҡан, аңлаша алған балалар менән икенсе милләттән булған һәм башҡорт телен аңламаған балаларҙы уҡытыу методикаларының тейешле кимәлдә айырып ҡаралмауы һәм камил булмауы, дәреслектәрҙең сифаты, тел уҡытыусыларының квалификацияһы... Шуның өҫтәүенә, мәсьәләнең айышына төшөнөргә тырышып аңлау менән, ижади ҡараштан сығып эш итә алмаған мәктәп директорҙарының да "тырышлығы" ҙур булды. "Башҡорт теле" тигән төшөнсәгә ике мәғәнә һалып ҡарау буталыуға килтерҙе һәм булған ғына эште лә хәүеф алдына ҡуйҙы. Ә бит башҡорт телен предмет булараҡ уҡытыу хаҡында бер ниндәй һүҙ булырға тейеш түгел, бары тик уны дәүләт теле булараҡ уҡытыу эшен ойоштороуҙа ине бурыс. Дөрөҫөн әйткәндә, проблема тап бына ошо өлкәлә тейешле методика булмауҙан килеп сыҡты ла. Башҡорт телен аралаша алыу кимәлендә өйрәтеү урынына тәфсирләп грамматиканы өйрәтергә маташыу башҡорт булмаған балаларҙа ғына түгел, хатта уларҙың ата-әсәләрендә лә кире мөнәсәбәт тыуҙырып, уны өйрәнеүҙән баш тартыуға килтерҙе.

Бала иғтибарын предметҡа йәлеп итеүҙә уҡытыусы оҫталығын да инҡар итеп булмай әлеге осраҡта. Икенсе яҡтан, улар үҙҙәре өсөн үтәлеүе мотлаҡ тип еткерелгән уҡыу программаһынан да баш тарта алмай. Әлбиттә, бар ул күп йыллыҡ тәжрибәләре нигеҙендә үҙҙәре төҙөгән методиканы файҙаланыусы ҡайһы бер педагогтар ҙа, ләкин улар ғына "көн торошон" үҙгәртә аламы? Дәүләт теле булараҡ, башҡорт телен теләк буйынса уҡыһындар ҙа, ти, әйҙә, унан ғына беҙгә бер ниндәй ҙә юғалтыу булмаç, ләкин был күрһәтмә телде ошоға тиклем туған тел булараҡ предмет итеп өйрәнгән уҡыусыларға ҡағылырға тейеш түгел, юғиһә, булғаны ла юғалтыуға дусар ителәсәк. Урыҫтың тапҡыр һүҙендәгесә, тастағы бала йыуындырған һыуҙы сабыйҙың үҙе менән ҡуша түгеп ҡуймайыҡ, тиеүем.

**(Дауамы 2-се биттә).**

АФАРИН!

# УҠЫТЫУСЫ ЛА...

## бәйгеләрҙә көс һынаша

**Кеше өс ай дауамында бер үк эште башҡарһа, был уның ғәҙәтенә инә, тиҙәр. Ә бына ике тиҫтә йыл дауамында бер эште эшләү матур йолаға әүерелә, тип иҫәпләй алабыҙ. Сөнки быға асыҡ миҫалдар бар: бынан егерме бер йыл элек тәүге тапҡыр үткәрелгән "Башҡортостандың баш ҡалаһы йыл уҡытыусыһы" һәм ун дүрт йыл элек башланған "Башҡортостандың баш ҡалаһы башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы" конкурстары күптән бөтәһе лә күтәреп алған күркәм байрамға әйләнгән. Быйыл был конкурстарҙың һөҙөмтәһе "Башҡортостан" дәүләт концерт залында күркәм тамаша менән тамамланды. Унда ҡатнашыусыларҙы Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов, уның урынбаҫары Сынтимер Баязитов, БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаты Эльвира Айытҡолова һәм саҡырылған башҡа ҡунаҡтар тәбрикләне.**

Конкурстарҙа алтмыштан ашыу педагог бер нисә этапта һөнәри оҫталыҡ кимәлен күрһәтте. Һәр кем эшләү дәүерендә туплаған тәжрибәһен сағылдырырға, эшен лайыҡлы кимәлдә башҡарыусы һөнәр эйәһе булыуын иҫбатларға тырышты. Әйткәндәй, балаларға белем биреүҙән тыш, ғилми эшмәкәрлек алып барырға, үҙ методикаһын булдырыуға иғтибар бүлгән 30 педагог "Педагог-тикшеренеүсе" номинацияһында билдәләнде. "Педагог-мастер" номинацияһында билдәләнеүгә 17 уҡытыусы лайыҡ булды. Хеҙмәт юлын күптән түгел башлап торған һәм "Башҡортостандың баш ҡалаһы йыл уҡытыусыһы - 2018" конкурсында тәүге тапҡыр ҡатнашҡан йәш уҡытыусыларға "Педагогик дебют" номинацияһында грамоталар тапшырылды, еңеүсе тип 141-се мәктәптең информатика уҡытыусыһы Марат Юламанов танылды.

**(Дауамы 5-се биттә).**



*Баш ҡаланың Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы - Нурзилә Нәзерғолова.*

12+

***✓ Улар хатта донъя кимәлендә билдәле беҙҙең атаҡлы шәхестәребеҙ исемдәренә лә төкөрә. Белмәү оят түгел, тиһәләр ҙә, һуң бит улар белергә лә теләмәй! Ә ер-һыу атамаларыбыҙҙы нисек боҙа, үҙҙәренсә борорға ғына тора улар.***



ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!

# КҮКТӘН ТӨШМӘЙ...



**Магазиндағы хаҡтарға күҙ ҙә эйәрмәй. Торлаҡ-коммуналь өлкәһендә лә ошо уҡ хәл. Машинаға яғыулыҡты ла, заправкалау станцияһына барған һайын, яңы хаҡ менән һатып алабыҙ. Өйҙәргә килгән зәңгәр яғыулыҡҡа, электр утына түләгән һандар ҙа тиҙ үҙгәрә. Ҡалала йәшәүселәр иһә эшкә барыу өсөн автобус-трамвайға айына әллә күпме аҡса сығара. Эш хаҡы, пенсия, балалар пособиеһы ошондай уҡ тиҙлектә артһа, аптырап та бирмәҫ инек, ләкин уларҙың гөбөргәйел һымаҡ ҡына шыуышыуы хаҡтарҙы ҡыуып етергә мөмкинлек бирмәй. Ләкин бар донъяға үпкәләп, хөкүмәткә асыуланып, барыһына ла зарланып ятыуҙан хәлдәр яҡшырмай. Нисек тә аҡса эшләү йүнен күрергә, эш хаҡына ғына ышанып ятмаҫҡа, ә өҫтәмә килем килтергән шөғөл табырға кәрәк.**

Аҡса эшләргә һәр саҡ оҫҡор булдым. Бәләкәй саҡта тимер-томор, быяла шешәләр тапшырып, аҡса эшләй инем. Урамда туҙып, шулай уҡ ауыл тирәләй таралып ятҡан тимер һәм шешәләрҙе өйгә ташып өйә инем. Күпмелер йыйылғас, атайым ҡалаға алып барып тапшырыр ине. Йомарлап аҡса тотоп йөрөмәһәм дә, үҙемә һәм һеңлемә тәм-том алырға етә торғайны. Ҙурая төшкәс, башҡа төрлө ысулдар менән аҡса "һуҡтым": elәк-бәшмәк һаттым, кешегә яллanып, утын ярҙым, картуф утаным, бесән саптым, хатта күршеләр район үҙәгенә сыҡһа, балаларын да алып ҡалдым. Студент саҡта ла буш ятманым, атай-әсәйҙән аҡса һорағаным булманы.

Ғаилә ҡорғас, аҡса бөтөнләй етмәй башланы. Оҙаҡ баш ватҡандан һуң, үҙем бөтә нескәлектәрен белгән өлкәлә - ағас ярҙамында аҡса эшләп ҡарарға булдым. Ләкин ағас менән булышыуҙың да үҙенсәлектәре бар. Мин, мәҫәлән, бура эшләү кеүек ҙур эшкә тотона алмайым, сөнки ҡалала йәшәйем. Ә ситтән тороп ҡына бындай ҡатмарлы эшмәкәрлекте күҙәтеү аҫтында тотоп булмай. Ағастан мебель эшләп һатыу ҙа килемле шөғөл, ләкин минең оҫталыҡ яғы самалы. Ағасты таҡта итеп бысып тәҡдим итергә мөмкин, тик мәшәҡәте күп. Шуға күрә, төрлө яҡлап уйлағандан һуң, утын һатып ҡарарға булдым. Оҙаҡҡа һуҙмай, эште башлап та ебәрҙем. Бының өсөн үҙемдең һәм күрше-тирә ауылдағы ағас бысыу пилорамаһы хужалары менән һөйләшеп, шунда ятҡан кәрәкмәгән түмәрҙәрҙе алып, ярып өйҙөм. Улар кипкәнсе, реклама менән шөғөлләндем: таныштарҙың ҡолағына төшөрҙөм, интернет селтәрендә махсус төркөм булдырып, шунда кешеләр йыйҙым, бушлай таратылған гәзиттәргә иғлан бирҙем, хатта бағаналарға йәбештереп сыҡтым. Беренсе тапҡырға тип хаҡты ла күп ҡуйманым. Заказдар оҙаҡ көттөрмәне, оҙаҡламай ауылдағы тау булып өйөлөп ятҡан утынды һатып та бөттөм. Беренсе партияла тик ҡайын утынын һатһам, аҙаҡ имән һәм уҫаҡты ла тәҡдим итә башланым. Был эшкә тотоноуыма 2 йыл. Клиенттарҙы табыуы еңелдән түгел, әммә мөмкин, ә бына уларҙы тотоп ҡалыуы икеләтә ҡыйын. Шуға күрә, эште сифатлы башҡарырға тырышам. Ниндәй генә хәл килеп тыумаһын, клиент менән килешелгән ваҡытҡа утындарҙы килтерәм. Даими заказ эшләүселәргә ташлама яһайым. Һәр бер клиентҡа ҡайын туҙы бүләк итәм. Утындарҙы машинаға тәртип менән генә һалам. Нисә кубометрға заказ эшләнгән, шул тиклем килтерәм, үҙемдең файҙамды уйлап, утынды әҙәйтмәйем, ә киреһенсә, бер нисә бөртөк булһа ла артыҡ һалам. Бөгөнгө көндә ҡайын утынының бер кубометрын 1700, имәндекен - 1800 һәм уҫаҡты 1600 һумдан һатам. Ваҡытында тәүәккәлләп ошо эшкә тотоноуыма ҡыуанам. Был шөғөлөм ғаиләмә мохтажлыҡ кисермәйенсә йәшәргә мөмкинлек бирә. Егеттәргә "Ҡыйыуыраҡ булығыҙ, төрлө эштәргә тотоноп ҡарағыҙ, ниндәй тормошта йәшәүегеҙ һеҙҙең үҙегеҙҙең ҡулығыҙҙа", тип өндәшкем килә.

**Сәлих ЯЛМЫРҘИН.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Ни өсөн туған тел мәсьәләһе шул тиклем ҡатмарлы проблемаға әйләнде әле?



(Башы 1-се биттә).

***Римма ЙӘРМӨХӘМӘТОВА, Сибай сәнғәт колледжы уҡытыусыһы:*** Туған телебеҙҙән проблема яһау-яһамау күп йәһәттән үҙебеҙҙән тора. Шуның өсөн мин үҙем, мәҫәлән, башҡорт теленә янаған иң ҙур хәүефте әсә телебеҙгә ҡарата үҙебеҙҙең мөнәсәбәттә күрәм. Әлбиттә, бар объектив, "тышҡы" сәбәптәр ҙә, ләкин улары ла ана шул әлеге тәүге сәбәптең эҙемтәһе тип әйтергә кәрәк. Хәүеф тигәнем - үҙ телебеҙгә үҙебеҙҙең һаҡһыҙлыҡ һәм битарафлыҡта. Маңҡорттар быуыны үҫтермәйек, тиһәк, үҙ мөхитебеҙҙе хәстәрләйек иң тәүҙә. Бында иһә бер ниндәй проблема булыуы мөмкин түгел: үҙ телеңде онотма, исмаһам, ғаиләңдә үҙ телеңдә һөйләш, балаларыңдан, ейән-ейәнсәрҙәреңдән дә шуны талап ит, башҡортса китаптар, гәзит-журналдар уҡы! Ошомо проблема? Был проблема түгел, ә һәр беребеҙҙең асылы, тормош рәүеше, иманы. Иман, тигәндән, күптәребеҙҙең иманға ҡайтыуы һөйөнөс, ләкин әсә теле кеүек хазинанан үҙҙәрен мәхрүм иткәндәр өсөн хаҡ юлға, тимәк, юлдар ябыҡ. Аллаһы Тәғәлә ер йөҙөндәге халыҡтарҙы төрлө-төрлө ҡәүем, милләттәр итеп яратҡан, һәр беренә тәғәйен туған телен бүләк иткән икән, беҙ ана шул аманатҡа тоғро булырға бурыслыбыҙ. Бөйөк мәғрифәтселәребеҙ, дин әһелдәребеҙ, шағирҙарыбыҙҙан Ризаитдин Фәхретдинов, Зәйнулла Рәсүлев, Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев, Аҡмулла, Бабич, Рәми Ғариповтарҙың рухи мираҫын күңелгә һеңдереү өсөн дә бит иң тәү шарт - туған телде белеү кәрәк! Үҙемдең ошо юҫыҡта ниндәй ҙә булһа өлөш индерә алыуым менән бәхетлемен, шөкөр: балаларға сәнғәт теле серҙәренә төшөнөргә ярҙам итәм. Ә телебеҙ беҙҙең - төпһөҙ хазина, "көслө лә ул, бай ҙа, яғымлы ла", яратҡан шағирыбыҙ әйтмешләй. Колледжда шулай уҡ уҡыу программаһына башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәре лә ингән. Һәр саҡ шыма, һәүетемсә генә лә булып тормай донъябыҙ, ләкин килеп тыуған мәсьәләне ҙур проблемаға әйләндермәй, ҡабартмай ғына хәл итергә ынтылыу ҙа үҙебеҙҙең зиһенгә бәйле, тип уйлайым. Һәр хәлдә, үҙебеҙгә ҡағылғанға үҙебеҙ әмәл итеп, үҙебеҙ ғәмәл ҡылып өйрәнәйек, ситтән килеп беҙҙең өсөн бер кем ҡыл да ҡыбырҙатмаҫ.

***Мостафа ЙОМАҒУЖИН, хеҙмәт ветераны:*** Юҡ ерҙән бар булды, тип әйтеү ҙә дөрөҫ булмаҫтыр туған тел проблемаһын. Тәүҙәрәк күҙгә күренмәҫ проблема әкренләп, аҙа барған сир һымаҡ, йылдар буйына көсәйә, һиҙгер күңелдәрҙе һыҙландыра барып, ниһайәт, килеп баҫты бит бына бөгөнгө көндәре. Башҡортостан Республикаһына үҙаллылыҡ яулаған рух күтәренкелеге осоронда әсә телебеҙ ҙә яңырыу кисерҙе: башҡорт мәктәптәре асылды, телебеҙ дәүләт статусы алды, юғары уҡыу йорттары күпләп башҡорт теле уҡытыусылары әҙерләп сығара башланы, башҡортса гәзит-журналдарыбыҙ тираждары артты, үҙ телебеҙҙә китаптар, уҡыу әсбаптары нәшер ителде, ләкин... Һәр яҡшы нәмәнең дә сиге була, тиҙәр шул, үкенескә. Ил сәйәсәте, юғары хакимиәттәрҙең тын алышына ҡарап, милләт-ара мәсьәләләр ҙә һыуҙан алып, утҡа һалынып, үҙҙәренә кәрәгенсә сүкеп кенә торола замана һандалында. Туған телебеҙ яҙмышындағы төп проблема беҙҙең үҙебеҙҙә булһа ла, дәүләт ҡурсыуына ла мохтаж булып тора шул ул, сөнки йәмғиәттә йәшәп, уның закондары буйынса ғәмәл ҡылып, беҙ сәйәсәттән ситтә ҡала алмайбыҙ. Кәрәк саҡта ҙур һәм дөйөм ил мәнфәғәтендә, шунса милләт халҡы бергә һәм дуҫ йәшәй, тип лаф орһалар ҙа, ана шул милләттәрҙең айырым алынған һәр береһе өсөн мохтажлыҡ килеп тыуғанда, уның проблемаларын күрмәмешкә һалышыу, ситкә тибәреү ғәжәп түгел, таяҡ тығып ҡына тормаһалар, ҙур рәхмәт тә бит... Тик шул таяҡтың бер осо - дәүләт структуралары тарафынан туған тел мәсьәләләрен ҡыҫымға алып, ҡамсылап, сикләп тороуҙарҙы йыш татырға тура килә беҙгә. Башҡа милләттәр тарафынан башҡорт теле дәүләт теле булараҡ тәрәндән үк өйрәнелмәһә лә, икмәк-тоҙлоҡ, тигәндәй генә һәм шул уҡ ваҡытта тарихыбыҙ, мәҙәниәтебеҙ менән таныштырыу йүнәлешендә популяр форматта һәр уҡыу йортонда индерелергә тейештер, тип уйлайым. Һәм бына ни өсөн: ҡасандыр килеп урынлашып, Башҡортостан икмәген ашап, яманмы-яҡшымы улар өсөн - ошо ерҙә йәшәп ятҡан бик күп милләттәрҙең вәкилдәре үҙҙәренең ниндәй илдә һәм ниндәй халыҡтың ерендә йәшәүе хаҡында ла белмәй, нисәмә йыл йәнәш йәшәп, беҙҙең исемдәрҙе лә хатта дөрөҫ итеп әйтә алмай. Бынныһы ярай ҙа, ти, ә бит улар хатта донъя кимәлендә билдәле беҙҙең атаҡлы шәхестәребеҙ исемдәренә лә төкөрә. "А кто это?" тип һорарға ла оялмай хатта берәүҙәре. Белмәү оят түгел, тиһәләр ҙә, һуң бит улар белергә лә теләмәй! Ә ер-һыу атамаларыбыҙҙы нисек боҙа, үҙҙәренсә борорға ғына тора улар. Беҙҙең менталитетҡа төрлөсә мыҫҡыллап, кәмһетеп ҡарауҙары ана шул наҙанлыҡтандыр ҙа, тип уйлайым мин, аптырағас. Ә был беҙгә оҡшаймы? Проблемаларҙың күбеһе шундай мөнәсәбәттәрҙән килеп сыға ла инде.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов "Альфа-Групп" консорциумы Күҙәтеү советы ағзаһы, "Альфа-Банк" акционерҙар йәмғиәтенең Директорҙар советы рәйесенең беренсе урынбаҫары Олег Сысуев менән осрашты. Сарала Альфа-Банк, X5 Retail Group, "Росводоканал" һәм башҡа компаниялар ингән "Альфа-Групп" консорциумы менән төбәктең хеҙмәттәшлек мәсьәләләре, уртаҡ проекттарҙы тормошҡа ашырыу перспективалары тикшерелде. Урындағы тауар етештереүселәргә булышлыҡ итеү әңгәмә темаларының береһе булды.

✓Башҡортостан Хөкүмәте Lasselsberger GmbH "Әбйәлил районында ҡоро төҙөлөш ҡатышмаларын етештереү буйынса завод төҙөлөшөнөң беренсе этабы" өҫтөнлөклө инвестиция проектын ғәмәлгә ашырыу тураһында килешеүгә ҡул ҡуйҙы. Ошо инвестиция проектын бойомға ашырыу Башҡортостандың Әбйәлил районында кәм тигәндә 220 эш урыны булдырырға мөмкинлек бирә. Пландаштырылған инвестициялар күләме 2,2 миллиард һумдан ашып китә. Артабан инвестициялар күләмен 14 миллиард һумға тиклем арттырыу һәм 500-гә яҡын эш урыны булдырыу күҙаллана.

✓Рәсәй Президенты Владимир Путин коммерцияға ҡарамаған ойошмаларға булышлыҡ итеү тураһындағы бойороҡҡа ҡул ҡуйҙы. Документҡа ярашлы, Президент гранттары фондына 2018 йылда ике конкурс уҙғарырға ҡушылған. Уларҙа коммерцияға ҡарамаған ойошмалар араһында 8 миллиард һум бүленәсәк. Ойошмаларға был сараларҙы социаль мөһим проекттарҙы һәм кеше хоҡуҡтарын һәм азатлығын яҡлау өлкәһендәге программаларҙы тормошҡа ашырыуға йүнәлтергә кәрәк буласаҡ. 20 февралдә беренсе конкурста ҡатнашыуға ғаризалар ҡабул ителә башлай.

✓Һуңғы йылда Башҡортостанда бәләкәй предприятиелар һаны 3,4 меңгә артҡан. Башстат мәғлүмәттәре буйынса, 2018 йылдың 1 ғинуарына республикала уларҙың һаны 139 447 тәшкил иткән. Шуларҙың 87 476-һы - шәхси эшҡыуар, 46 901-е - микропредприятие, 4 733-ө - бәләкәй, 337-һе урта предприятие. Республика бәләкәй һәм урта предприятиелар һаны буйынса Рәсәйҙә - 11-се, Волга буйы федераль округында 3-сө урынды биләй.

✓ *Ҡалымға йөрөп, аҡса эшләп алам да, шул бөткәнсе өйҙә булам, нимә теләйем - шуны эшләйем, ҡайҙа теләйем - шунда барам. Бер кем мине тотмай. Ә ғаиләле кеше тик ғаиләһенең мәнфәғәтен ҡайғыртып ҡына йәшәй.*



*СЕТЕРЕКЛЕ ҺОРАУ*

# АТЫҢ БАР, ДӘРТЕҢ БАР, ТИК НИҢӘ ҺӨЙГӘНЕҢ ЮҠ?



***Айрат ИҘРИСОВ, Өфө ҡалаһы:*** Үҙем дә көн һайын ошо һорауға яуап эҙләйем, ләкин таба алмайым. Ҡырҡҡа етеп барам, әле булһа өйләнмәгәнмен. Һәм минең кеүек яңғыҙ "ҡарғалар" бик күп. Шул иҫәптән, минең таныштар - дуҫтар араһында ла үҙ яртыһын таба алмай ғүмер үткәргән егеттәр бихисап. Үҙем 10 йылдан ашыу Себер тарафтарында эшләйем, вахтанан ял иткән саҡта Нуғай ҡасабаһында ҙур йорт төҙөйөм, сит ил машинаһында йөрөйөм. Йөҙгә лә ҡурҡыныс түгелмен, буй-һын да оялырлыҡ түгел, һәр ваҡыт үҙемде ҡарап йөрөйөм. Спорт менән шөғөлләнәм, эсеү-тартыу кеүек насар ғәҙәттәрем юҡ. Тик ни өсөн һаман кәләш алып, балалар үҫтереп, гөрләтеп донъя көтә алмайым - аптырайым. Ҡыҙҙар менән танышам, аралашам, тик йә мин уларға оҡшамайым, йә уларҙың ниндәйҙер ҡылығы, тәртибе минең күңелемде ҡалдыра ла, аралашыуҙы дауам итә алмайым да ҡуям. Ишеткәнем бар ине "Алйот саҡта кәләш алып ҡал" тигәндәрен, дөрөҫ кәңәш биргәндәр икән, тип уйлайым хәҙер. Йәш барған һайын, бактиһең, кешенең йәҙәнә генә түгел, ә һәр бер әйткән һүҙенә, үҙ-үҙен тотошона, хатта туғандарына һәм дуҫтарына ныҡ иғтибар бирә башлайһың икән. Һәм, тәбиғи, эҙләгән - таба, тигәндәй, ниндәйҙер етешһеҙлеге күҙгә салынып та ҡуя. Был һүҙҙәрҙән һуң мин ваҡсыл, мыжыҡ, шиксел ир-ат булып күренәм икәнлеген аңлайым, ләкин күңел тигән нәмә бар, уның талаптарын ситкә ҡуйып булмай.

Кәләш алыуын алһам, уны ғүмерлек юлдашым итеп күргем килә. Минең өсөн никахтың Ислам ҡанундарына ярашлы үткәрелеүе лә, ЗАГС-та "мисәтләнгән" булыуы ла мотлаҡ, шуға күрә, күп йәштәштәрем кеүек бергә тороуҙы ғына никахҡа тиңләмәйем. Шулай уҡ кәләшемдең үҙемдән бик уҡ оло ла, уҡ ла ваҡытта үтә йәш тә булмауын теләүем дә ғаиләҡ короуға кәртә ҡуялыр, тим, сөнки минең йәштәге ҡыҙҙарҙың күбеһе кейәүҙә йәки айырылған, ә һеңлем рәттәш ҡыҙҙы кәләшем урынында күрмәйем.

Үҙемдең дә потенциаль кәләштәргә оҡшамаған яҡтарым барҙыр, унһыҙ булмай. Күптәр уйлағанса, ҡыҙҙарҙың бөтәһе лә матди яҡҡа ғына иғтибар итмәй, уларға ла күңел берлеге, мөхәббәт мөһим. Шуға күрә, машина, өй менән генә алдырып булмай хәҙер. Йөрөйбөҙ инде яңғыҙҙар, төрлөбөҙ төрлө яҡта бер-беребеҙҙе эҙләп. Үҙем кеүек яңғыҙҙарға ғаилә ҡороп, бала һөйөү бәхетенә өлгәшеүҙәрен теләйем.

***Илдус ХӘКИМОВ, Стәрлебаш районы, 25 йәш:*** Ысынлап та атым бар, ләкин кәләш алырлыҡ дәртем бөтөнләй юҡ. Кәләш алаһың, унан балалар китә бер-бер артлы. Уларҙы ҡарарға, ашатырға, кейендерергә, уҡытырға кәрәк. Ундай яуаплылыҡты әлегә үҙ өҫтөмә алғым килмәй бер ҙә. Яңғыҙ башым - тыныс ҡолағым. Әле атай-әсәй янында йәшәйем. Ғаиләлә кесе бала булараҡ, донъя миңә ҡаласаҡ, шуға күрә өй төҙөүҙең дә әһәмиәтен күрмәйем. Ҡалымға йөрөп, аҡса эшләп алам да, шул бөткәнсе өйҙә булам, нимә теләйем - шуны эшләйем, ҡайҙа теләйем - шунда барам. Бер кем мине тотмай. Ә ғаиләле кеше үҙенең шәхси иркен юғалта, ул тик ғаиләһенең мәнфәғәтен ҡайғыртып ҡына йәшәй. Миңә бындай тормош бик оҡшап етмәй.

Ә никахҡа инеү менән айырылышыу статистикаһын күргәнегеҙ бармы? Өйләнешкән 1000 парҙың 700-гә яҡыны айырылыша! Иҫ киткес күрһәткес бит ул. Был ҡоро һан түгел, уның артында күпме ҡыйралған яҙмыштар, етем ҡалған балалар тора. Мин уларҙың рәтендә булғым килмәй. Был эгоизм, әлбиттә, ләкин башҡалар кеүек башымды ҡомға йәшермәйем, ә тураһын әйтәм.

Миңә кәләш алып бирә алмай эй йонсойҙар дуҫтар ҙа, туғандар ҙа, уларға ни яманлығым тейгәндер. Хәҙер ҡунаҡҡа саҡырһалар, барырға ла ҡурҡып торам, мотлаҡ берәй ҡыҙҙың менән таныштыра башлайҙар. "Илдус, һиңә кәләш кәрәкмә?" тип һораған юҡ, минең өсөн яҙмышымды хәл итергә маташалар, йәнемде көйҙөрөп. Бәлки, берәй ваҡыт, 30-ҙы үткәс, йәки йөрәгемде бер күреүҙән ялмап алырҙай ҡыҙҙы осратһам, өйләнеп тә ҡуйырмын, барыһы ла Алла ҡулында. Ә әлегә ҡабаланмайым да, эҙләмәйем дә, күҙләмәйем дә. Өйләнмәй йөрөгән ҡайһы бер егеттәр хәҙерге ҡыҙҙарҙы яманлаған булып, үҙҙәренең кәләш алмауын "аҡларға" тырыша. Ундай ҡыҙҙар ҙа бар, әлбиттә, ләкин күпселеге тәртипле, уңған, эшлекле һылыуҙар. Һәр хәлдә, буйҙаҡ егеттәрҙең күп булыуын "алама" ҡыҙҙарға ғына ҡайтарып ҡалыу дөрөҫ түгел. Мәсьәләнең төбө егеттәрҙең үҙҙәрендә: берәүгә минең кеүек әлегә кәләш кәрәкмәй, икенсеһе үҙен-үҙе саҡ ҡарай, ғаилә башлығы булырҙай рәте юҡ, өсөнсөһө бик өйләнер ине лә, ҡыҙҙар үҙҙәре уға ҡарамай. Һәм бындай сәбәптәрҙе бик күп һанарға була.

*УЙЛЫҒА -УЙ*

# ЯНСЫҠ ТУРАҺЫНДА РИУӘЙӘТ



**Ҡасандыр бик борон башҡорт яугирҙары, уларҙың ерҙәрен талап, кешеләрен ҡоллоҡҡа алып, гел генә бәлә-ҡаза килтереп йәшәгән көслө һәм бай бер илде, ниһайәт, яулап алыуға ирешкән, ти. Диңгеҙ буйында пальмалар аҫтында ултырған был ҡалала ғәжәйеп емеш-еләк ағастары үҫә, ап-аҡ зиннәтле һарайҙары ла үҙҙәренә саҡырып тора, ти. Яугирҙар бындағы байлыҡ һәм гүзәллектән һуштары алынып, илдәренә әйләнеп ҡайтырға уйламайҙар ҙа икән: һәр береһенә байлыҡ, һылыу ҡатындарҙы бүлешеп алып, еңеүҙәрен байрам итәләр, ти.**

Шулай уй-хәсрәтһеҙ генә күңел асып йәшәй торғас, бер нисә йыл үтеп тә киткән. Яугирҙарҙың Башҡорт илендә тороп ҡалған балалары, аталарын һағынып, ҡайтыуҙарын һорап, хаттар яҙа башлаған. Ләкин балаларға бер кем дә яуап яҙмағас, яугирҙарҙың ҡатындары үҙҙәре хаттар яҙырға тотонған. Көньяҡ сибәрҙәре ҡосағында донъяларын оноткан ирҙәре ҡош телендәй ҙә яуап хаты яҙмағас, "Ҡайтығыҙ, беҙгә йәшәргә лә күп ҡалмаһы бит, бәхилләшеп ҡалайыҡ", - тип, хаттарҙы ҡартайышҡан ата-әсәләре яҙа башлаған. Тик улдары бер ҡайғыһыҙ күңел асыуҙы дауам иткән.

Башҡорт мәҡәле: "Әсә күңеле - балала, бала күңеле - далала" тип юҡҡа ғына әйтмәгән, күрәһең. Аптырағас, өйҙәгеләр йыйылышып өлкән генә бер аҡһаҡалға кәңәшкә килгәндәр: "Ир-егеттәребеҙҙе нисек итеп өйгә ҡайтарайыҡ?"- тип һорайҙар, ти. Аҡһаҡал ҡарт яугир булған. Тәне тулы яра эҙҙәре, оҙаҡ йылдар тотҡонда булған сағында буйһонмаҫ холҡо өсөн күҙҙәре соҡоп алынған. Башҡа бер ваҡытта ла ҡорал тота алмаһын өсөн дошман уның ҡул бармаҡтарын да өҙә сапҡан. Тик башҡорт дошманы алдында башын эймәгән, бирешмәгән. Әле лә теремеклеге, зирәклеге менән тирә-йүндә дан алған аҡһаҡал икән. Ҡарт яугир уйға ҡалған. Тотҡонлоҡта таш зинданда ултырғанында ҡом ҡайнарлығы биттәрен өткәндә, үҙәккәйе өҙөлөп тыуған илен һағыныуын иҫенә төшөргән. Өңөрәйгән күҙ соҡорҙарынан бәреп сыҡҡан йәштәре сирыш сикәләрен яндырған. Ниһайәт, бер ҡарарға килгән ул һәм тупыс бармаҡтары менән тирә-йүнгә төртөп күрһәтә-күрһәтә, былай тигән: "Йүрүҙән үҙәндәренән, Дим далаларынан, Ирәмәл, Ирәндек битләүҙәренән үләндәр йыйып килтерегеҙ!" Аптырашҡа ҡалған сапҡынсылар ул күрһәткән тарафтарҙан тоҡҡа тултырылған хуш еҫле сәскәле үләндәр алып ҡайта һалған да, ҡарттың ҡушыуы буйынса, уны теге ҡалаға илтеп, полководецҡа тапшырған. Ғәскәр башлығы тоҡ ауыҙын асып ебәреүгә, тирә-яҡҡа тындарҙы иркенәйтерлек хуш еҫ таралған. Полководец башын эйгән килеш, өнһеҙ ҡатып ҡалған. Янына яуҙаштары йыйылышып киткән. Күҙ алдарына ысыҡ ҡунған йәшел сирәм, томанлы иртәләр пәйҙә булған. Йәйләүҙә үткәргән йондоҙло төндәре иҫкә төшкән. Ҡолаҡтарына утлап йөрөгән аттар муйынындағы ҡыңғырау сыңы сағылғандай, тыуған яҡтың илерткес хуш еҫен тойғандай булғандар. Ауыр яуҙарҙы үтеп, күпте күргән, ҡеүәтле дошман ғәскәрҙәрен ҡыйрата алған был еңеүсе ир-егеттәргә ниҙер була шул саҡ. Алҡымдарына килеп тығылған ҡуҙ йәштәрен саҡҡа тыйып, бер-береһенә күтәрелеп ҡарарға ла ҡыймайынса, сығыуға табан ыңғайлайҙар һәм шым ғына аттарын эйәрләй башлайҙар. Таң һарыһынан улар зиннәтле һарайҙарҙы ла, уның хазина-байлыҡтарын да, сибәр ҡатындарҙы ла ҡалдырып, ҡаланан сығып та киткәндәр, ти.

Ул замандарҙан бирле бик күп йылдар үткән, бик күп яуҙар булған, ләкин башҡорт ҡатындары ирҙәрен хәрби походтарға кипкән үлән һалынған сигеүле кисет - янсыҡ бүләк итеп оҙатыр булып киткән. Ул һәр ваҡыт ғәзиз тыуған илде иҫтәренә төшөрөп торһон өсөн. Башҡаса башҡорттар баҫып алыу яуҙарын алып бармаҫ булған, ә Тыуған иле азатлығы өсөн йәнен аямай алышҡан. Һуң, тыуған-үҫкән илкәйебеҙ - Башҡортостанға етерҙәй башҡа тағы берәй ер бармы һуң!

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостанда кесе эшҡыуарлыҡ өлкәһендә эшләүселәр һаны һуңғы бер йылда 28 мең кешегә артҡан. Һөҙөмтәлә кесе, урта, микропредприятиелар һәм шәхси эшҡыуарҙар иҫәбе (2017 йылдың туғыҙ айы мәғлүмәттәре буйынса) 480 мең тәшкил итә. Был республика халҡының 25,6 проценты. 2016 йылда 452 мең кесе предприятие хеҙмәткәре иҫәпләнгән.

✓Башҡортостанда киҫкен респиратор вирус инфекцияһы менән ауырыусылар күбәйә. Республика Роспотребнадзор идаралығының матбуғат хеҙмәте мәғлүмәттәре буйынса, 12 февралдән 18-нә тиклем, ошо көҙгә-ҡышҡы миҙгелдә тәүге тапҡыр ауырыу кимәле эпидемик сиктән 20 процентҡа артҡан. Шулай уҡ грипп осраҡтары ла теркәлә. Алты кешелә лаборатор юл менән киҙеүҙең А1 штамдары раҫланған (суска киҙеүе).

✓28 февралдә көндөҙгө сәғәт 4-тән кискә 6-ға тиклем Башҡортостан прокуратураһында халыҡты дарыуҙар менән тәьмин итеү мәсьәләләре буйынса "ҡыҙыу элемтә" ойошторола. Ведомствоның матбуғат хеҙмәтендә белдереүҙәренсә, телефон аша төрлө ялыуҙар ҡалдырырға, консультация алырға мөмкин. (347) 272-61-72 номеры буйынса шылтыратыуҙарҙы халыҡтың азатлығын һәм хоҡуғын үтәүҙе күҙәтеү бүлегенең өлкән прокуроры Рәзиф Вәлишин ҡабул итә.

✓Башҡортостанда Рәсәй Президентын һайлауҙа тауыш биреү өсөн һайлау бюллетендәрен әҙерләү башланды. Рәсәй Үҙәк һайлау комиссияһы ҡарарына ярашлы, төбәк өсөн 3 миллион 68 мең 66 дана бюллетень баҫыла. КОИБ-тар өсөн махсус рәүештә 348 900 дана әҙерләү күҙаллана. Ғәҙәттәгесә, бюллетендәр өс телдә баҫыла. Һәр бюллетендә рус телендә лә текст булырға тейеш, тип асыҡлыҡ индерҙеләр республика Үҙәк һайлау комиссияһында.

✓Башҡортостанда мәҙәни мираҫ объекттарын һаҡлауға хәйриә аҡса йыйыу иғлан ителгән. Акция инициаторы - Башҡортостан Республикаһының Мәҙәни мираҫ объекттарын дәүләт һаҡлауы идаралығы ҡарамағындағы Республика биләмәһендә мәҙәни мираҫ объекттарын һаҡлау буйынса йәмәғәт советы. Ведомствола билдәләүҙәренсә, хәйриә аҡсалары ғилми-проект документтары әҙерләүгә, дәүләт тарихи-мәҙәни экспертиза үҙғарыуға, проект-смета документтары эшләүгә, йүнәтеүгә, реставрацияға, консервациялауға һәм заманса ҡулланыу өсөн ҡулайлаштырыуға тотоналасаҡ.

**"Башинформ"дан.**

*✓ Предприятиела эшләгән кешеләргә ҡарата ҡайҙан шундай рәхимһеҙлек һәм битарафлыҡ? "Эш хаҡы түләйбеҙ - башты ҡатырмағыҙ". Был алым дөрөҫ түгел. Предприятиелар үҙ коллективына ярҙам итеү менән ҡыҙыҡһыныырға тейеш.*



ҠЫҪҠАСА

# ҠАЛА КӨНӨНӘ АСЫЛАСАҠ!

✓ **Сираттағы оператив кәңәшмәлә Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов Ағиҙел күперен 12 июнгә - Ҡала көнөнә асырға, тигән бурыс ҡуйҙы.** Иҫке күперҙе реконструкциялау муниципалитеттың даими контролендә. Төҙөлөш-монтаж эштәре Социаль маҡсатлы программалар фонды иҫәбенә башҡарыласаҡ. Әлеге ваҡытта төҙөлөш майҙанын энергия менән тәьмин итеү (күперҙең һәр ягынан 100 кВт ҡеүәт кәрәк), материалдар алыу мәсьәләләре хәл ителә. Кәрәк булған материалдарҙы әҙерләү өсөн ике ай талап ителә, тимәк, барыһы ла ал да гөл булғанда, улар май байрамдарынан һуң килеп етеүе ихтимал. Ошоларҙы күҙаллап, ҡала хакимиәте башлығы шундай оптимистик бурыс ҡуя ла инде. Ә ниндәйҙер тотҡарлыҡтар килеп тыуғанда, был ваҡыт һуңғараҡ күсерелеүе лә бик ихтимал. Ремонт эштәренән һуң иҫке күперҙе ҡулланыу мөҙҙәте ике ҡышҡа оҙаясаҡ.

✓ **Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов Дим районында халыҡты ҡабул итте.** "Яркий" биҫтәһендә йәшәүсе Артем Шухтуев мәктәп төҙөүҙе һорап мөрәжәғәт итте. Яуап итеп Ирек Ишмөхәмәт улы 1000 балаға иҫәпләнгән бер сменалы мәктәп мотлаҡ буласағын белдерҙе. Төҙөлөш быйылғы һәм пландағы 2019, 2020 йылдарға республика адреслы инвестиция программаһына индерелгән. 132-се мәктәп уҡытыусыһы Ирина Любина 44-се һөнәрселек лицейын тимер юлы йүнәлешендәге профиль кластары булған дөйөм белем биреү мәктәбенә әйләндереү мәсьәләһенән күтәрҙе. Ирек Ялалов тәҡдимде хупланы һәм бинаны муниципаль милеккә күсереү өсөн Мәғариф министрлығына мөрәжәғәт әҙерләргә ҡушты. Ғөмүмән, был көндә ҡабул итеүгә килеүселәрҙең һәр мөрәжәғәте теркәлеп, айырым контролгә алынды.

✓ **2014 йылдың апрелендә Башҡортостанда төбәк торлаҡ өсөн аҡса туплау системаһы эшләй башланы.** Республика программаһының партнерҙары булып "Һаҡлыҡ банкы" һәм "Уралсиб" (2015 йылдың мартынан) банктары сығыш яһаны. Программаның шарттары буйынса, граждандар өс-алты йыл дауамында программа банктары-партнерҙарында торлаҡ төҙөлөшөнөң бер өлөшөн ҡаплау өсөн аҡса йыя. Программала ҡатнашыусының ай һайын индергән аҡсаһына республика ҡаҙнаһынан шул сумманан 30 процент күләмендә (айына өс мең һумдан күберәк түгел) премия өҫтәлә. Аҡса туплау осоро тамамланғандан һуң йылына 6-7 процент ставкаһы буйынса ташламалы кредит алырға мөмкин. Биш йыл буйына аҡса туплағандарға бер йылдан йылына 6 процент ставкаһы буйынса ипотека бирелә. Тағы ла бер күҙ ҡыҙҙырғыс мәл - торлаҡ өсөн аҡса туплау программаһында ҡатнашыусылар үҙенең йыйған аҡсаһына республика тарафынан өҫтәмә субсидия ала.

✓ **"Башҡортостан" милли паркы һәм "Шүлгәнташ" ҡурсаулығы биләмәһендә урынлашҡан ауылдарҙа йәшәүселәрҙе экологик һәм аграр туризм өлкәһендәге эшкә йәлеп итергә ҡыҙыҡлайҙар.** Дирекцияла хәбәр итеүҙәренсә, милли парк Рәсәй президенты грантына тормошҡа ашырылған "Киләсәкте бергәләп һаҡлайыҡ" программаһы партнеры булған. "Ойоштороусылар беҙҙе Европаның ҡурсаулыҡ биләмәләрен үҫтереүгә урындағы халыҡты йәлеп итеү тәжрибәһе менән таныштырҙы, - тип һөйләне Мәскәүҙә үткән беренсе семинарҙан һуң "Башҡортостан" милли паркы директоры Владимир Кузнецов. - Беҙгә уны үҙебеҙҙең паркта тормошҡа ашырыу эше тора. Парк хеҙмәткәрҙәрен һәм тораҡ пункттары вәкилдәрен уҡытасаҡбыҙ. Хәҙер төп бурыс - экотуризмды үҫтереүҙә ярҙам итергә әҙер һәм һәләтле кешеләрҙе һайлау".

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ЯҢЫ ЯРҘАМ ТӨРӨМӨ?



**Республикала күп балалы ғаиләләргә яңы ярҙам сараһы - төбәк әсәлек капиталы барлыҡҡа килеүе ихтимал. Ошо хаҡта Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов төбәктең Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы коллегияһында белдерҙе.**

Төбәк әсәлек капиталын формалаштырыу өсөн предприятиелар аҡсаһы файҙаланыласаҡ, тип күҙаллана. "Бай, уңышлы предприятиелар ни өсөн ғаилә сәйәсәте, булышлыҡ итеү мәсьәләләрен хәл итеүҙә күп ваҡыт ярҙам күрһәтмәй? - тине Рөстәм Хәмитов. - Предприятиела эшләгән кешеләргә ҡарата ҡайҙан шундай рәхимһеҙлек һәм битарафлыҡ? "Һалым, эш хаҡы түләйбеҙ - башты ҡатырмағыҙ". Был алым дөрөҫ түгел. Был бөтөнләй яңылыш фекерләү. Предприятиелар үҙ коллективына ысынлап та ярҙам итеү менән ҡыҙыҡһыныырға тейеш". Республика Башлығы Санкт-Петербургта, Тамбов, Тула өлкәләрендә ошондай схема буйынса сәнәғәт предприятиелары менән эшләгәндәрен хәбәр итте һәм уларҙың тәжрибәһен өйрәнергә йөкләмә бирҙе. "Беҙ матди яҡтан ярҙам итербеҙ, ярҙам кимәлен үҫтереү йәһәтенән эште дауам итербеҙ. Быйылдан ил Президенты указына ярашлы, балалы ғаиләләргә өҫтәмә ярҙам күрһәтелә. Был маҡсатҡа республикабыҙ өсөн федераль ҡаҙнанан байтаҡ ресурстар бүленә, - тип билдәләне Рөстәм Хәмитов. - Әсәлек капиталы программаһы оҙайтылды. Беҙгә йәш ярымдан өс йәшкәсә бала ҡарау буйынса пособие мәсьәләһен тикшерергә, финанс мөмкинлектәребеҙҙе өйрәнергә кәрәк..."

# МЕДИКТАР, ҠАЙТЫҒЫҘ!



**Башҡортостан Хөкүмәте сит илдәрҙән юғары квалификациялы ватандаш табиптарҙы йәлеп итәсәк. Был маҡсатҡа республика ҡаҙнаһынан йыл һайын - 2,5 миллион һум, федераль бюджеттан тағы ярты миллион һум күләмендә финанслау ҡаралған.**

Башҡортостанға ҡайтырға теләгәндәргә кәрәкле социаль ярҙам саралары, медицина һәм социаль хеҙмәттәр күрһәтеләсәк, эшкә урынлашыуҙа булышлыҡ ителәсәк. Ошо көндәрҙә республика Хөкүмәте Президиумы ултырышында "Башҡортостан Республикаһында хеҙмәт һәм халыҡ мәшғүллегенә булышлыҡ итеү баҙары көйләү" дәүләт программаһының "Сит илдә йәшәүсе ватандаштарыбыҙға Башҡортостан Республикаһына үҙ теләге менән күсергә булышлыҡ итеү" ярҙамсы программаһы раҫланды. Был ярҙамсы программа республикала медицина хеҙмәткәрҙәрен һәм медицина һөнәрҙәренә уҡыусы студенттарҙы даими йәшәү урынына йәлеп итеү иҫәбенә һаулыҡ һаҡлау өлкәһендә хеҙмәт ресурстары ҡытлығын кәметеүгә йүнәлтелгән саралар һәм социаль сифатлы составты яҡшыртыуға йүнәлтелгән. "Ярҙамсы программа сараларын тормошҡа ашырыу йыл һайын Башҡортостан биләмәһенә программала ҡатнашҡан 60 кешене һәм уларҙың 120 ғаилә ағзаһын күсерергә мөмкинлек бирәсәк, - тип билдәләне республиканың ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры урынбаҫары Юрий Мельников. - Йыл һайын ярҙамсы программаны финанслау күләме Башҡортостан ҡаҙнаһы иҫәбенә - 2,5 миллион һум, федераль бюджеттан тағы ярты миллион һум тәшкил итәсәк. Программаны ғәмәлгә ашырыу ваҡыты 4 йылға иҫәпләнгән".

# БАРЫҺЫ ЛА ОТАСАҠ



**Киләһе йылдан Стәрлетамаҡта һөт фабрикаһы - балалар туҡланыуы кухняһы эшләй башлай. Башҡортостандың Сауҙа һәм ҡулланыусыларҙың хоҡуҡтарын яҡлау буйынса дәүләт комитетының тейешле проект башланғысы Башҡортостан Хөкүмәте Президиумы ултырышында хуплау тапты.**

Проект һөт ризыҡтарына: һөт, эремсек, ҡатыҡ һәм башҡа әсетелгән аҙыҡ-түлеккә өс йәшкәсә ике мең самаһы баланың ихтыяжын ҡәнәғәтләндерергә тейеш, тип хәбәр иттеләр төбәк Хөкүмәтенең матбуғат хеҙмәтенән. Дәүләт комитеты рәйесенең беренсе урынбаҫары Нина Фазылова һыҙҙаренсә, Стәрлетамаҡтан тыш, һөт кухняһы Салауат, Күмертау ҡалаларын, Ишембай һәм Мәләүез районадарын хеҙмәтләндерәсәк. Урындағы тауар етештереүселәрҙән сеймал алыу күҙаллана, ул аҙыҡ-түлек һатыу баҙарының тотороҡлоғон тәьмин итергә мөмкинлек бирәсәк. Өс йәшкәсә бала тәрбиәләгән аҙ тәьмин ителгән ғаиләләргә электрон аҙыҡ-түлек картаһы аша адреслы аҙыҡ-түлек ярҙамы системаһы буйынса һатыу күҙаллана. Проектты ғәмәлгә ашырыу өсөн республика ҡаҙнаһынан 19,3 миллион һум бүлеү ҡаралған. Кәмендә 15 эш урыны булдырыласаҡ. Киләсәктә сығарыласаҡ тәбиғи сифатлы һөт продукцияһы менән дөйөм һәм мәктәпкәсә белем биреү ойошмалары, ваҡлап һатыу предприятиелары тәьмин ителәсәк.

# МӘҘӘНИ УСАҠ ЙӘНЛӘНЕРМЕ?



**Башҡортостанда Мәҙәни ғаилә үҙәктәре асыла. Республиканың Мәҙәниәт министрлығы Ғаилә йылын уҙғарыу менән бәйле ғаилә мәҙәни үҙәктәрен булдырыу буйынса яңы проект әҙерләгән.**

Уның маҡсаты - ауылда мәҙәни-ял, мәғариф, мәғрифәтселек, спорт-сәләмәтләндереү, күңел асыу, IT-технологиялар һәм мәғлүмәти эшмәкәрлек йүнәлештәре буйынса мәҙәниәт учреждениеларының һәм ғаиләләрҙең хеҙмәттәшлеге өсөн шарттар булдырыу. Ғаилә йолаларын, халыҡтың социаль әүҙемлеген һәм ижади потенциалын үҫтереү, ял программаларын әҙерләү һәм төрлө-төрлө ғаилә ялы формаларын ойоштороу, балаларға һәм ата-әсәләргә үҙ-үҙен үҫтереү өсөн шарттар булдырыу мәҙәни үҙәктәрҙең төп бурысы булып тора. "Республикала бындай тәжрибә бар. 2014 йылдан ауыл клубтары нигеҙендә "Йомғаҡ" күп функциялы мәҙәни үҙәктәр асыу проектын ғәмәлгә ашырабыҙ. Был төрлө йәштәге һәм ҡыҙыҡһыныулы кешеләрҙе генә түгел, төрлө физик мөмкинлектәре булғандарҙы ла берләштергән заманса ауыл мәҙәниәт усағы. Ваҡыт күрһәтте, халыҡ яңыртылған мәҙәниәт учреждениеларына мохтажлыҡ кисерә. Шуға был учреждениеларҙың эшен бөтә ғаилә ағзалары өсөн ял ойоштороуға ла йүнәлтергә кәрәк", - тип билдәләне Әминә Шафиҡова. Министр коллегияға йыйылған район һәм ҡала вәкилдәренән ғаилә ялын ойоштороуға, ғаилә ҡиммәттәрен пропагандалауға, ғаиләлә мөнәсәбәттәр мәҙәниәтен күтәреүгә йүнәлтелгән сара үҙәктәре эшмәкәрлеген көсәйтеүҙе һораны.

## Б А Ш   Ҡ А Л А   Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Төркиәнең Кастамону ҡалаһында Мәғжән Йомабаев йылын асыу һәм киң мәғлүмәт саралары өлкәһендә ТӨРКСОЙ премияһын тапшырыу тантанаһы уҙҙы. Ошо абруйлы наградаға "Башҡортостан" гәзите хәбәрсеһе, журналист һәм шағирә Лариса Абдуллина лайыҡ булды.

✓1-3 мартта Өфөлә "Башҡортостандың йәш киноһы" өсөнсө республика фестивале үтә. Фестиваль сиктәрендә Өфөнөң йәш кинематографистарының яңы картиналары күрһәтеләсәк, шулай уҡ "SKEY-FILM" кинокомпанияһы президенты, Рәсәй Кинопродюсерҙар гильдияһы ағзаһы Саркис Шакарян продюсерлыҡ буйынса оҫталыҡ дәресе уҙғарасаҡ. Сараның ойоштороусылары: Башҡортостан Кинематографистар союзы һәм республиканың Кинематографистар союзының Йәштәр үҙәге.

✓11 мартта "Башҡортостан" милли паркында балыҡ тотоу фестивале ойошторола, унда теләге булған һәр кем ҡатнаша ала. Ғәҙәти булмаған ярыштар Мәләүез районы Иштуған ауылындағы Ҡыҙыл күлдә уҙа. Ярыш ике этапта уҙғарыла. Тәүгеһе 2 сәғәт ярым дауам итә, унда 20 финалсы билдәләнә. Киләһе этапта ир-егеттәр, ҡатын-ҡыҙҙар һәм үҫмерҙәр араһында иң күп балыҡ тотҡан еңеүселәрҙе асыҡлау ҡаралған. Иң ҙур балыҡ тотҡан кешегә махсус приз булдырылған.

✓1 мартта Өфөнөң "Башҡортостан" концерт залында республиканың иң матур, өлгөлө ғаиләләре ҡатнашлығында "Ғаилә - туған тел һаҡсыһы" тигән оло байрам үтәсәк. Ойоштороусылары: Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты, БР "Ағинәй" төбәк йәмәғәт ойошмаһы, Мәҙәниәт, Мәғариф, Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлыҡтары. Тамаша 19 сәғәттә башлана, 17 сәғәттән ғаиләләрҙең күргәҙмәләре менән танышырға, башҡорт милли кейемдәре, биҙәүестәре, оҫталарҙың көнкүреш әйберҙәрен һатып алырға мөмкин.

✓Башҡортостанда БР Мәҙәниәт министрлығы ярҙамында БР Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары йәмғиәте ойошторған "Ҡатын-ҡыҙ - милләт әсәһе" II Республика конкурсы үтә. Конкурсҡа йомғаҡ һәм еңеүселәрҙе тәбрикләү 5 мартта Өфөлә уҙасаҡ. Әлеге ваҡытта ойоштороу комитетына 100-ҙән ашыу ғариза килгән, документтарҙы (ғариза, портфолио) 26 февралгә тиклем bashkirka2017@mail.ru, kulsarina.g@mail.ru адрестарына ебәрергә кәрәк.

✔ 51-се мәктәп уҡытыусыһы Тимур Рәхмәтуллин мөғәллимлек итә башлауына икенсе йыл китеүе һәм был конкурсҡа оҙайлы хеҙмәт стажы туплаған коллегаларының тәжрибәһен күреүҙе маҡсат итеп килеүе тураһында һөйләнә.



АФАРИН!



# УҠЫТЫУСЫ ЛА...

## бәйгеләрҙә көс һынаша

(Башы 1-се биттә).

Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары араһында бер йылдан алып, өс йылға тиклем эш стажы булған конкурсанттар "Педагогик өмөт" номинацияһында билдәләнде. Тәүге йыл ғына уҡытып, һындай мәртәбәле конкурста ҡатнашырға йөрьәт иткән өсөн генә лә был йәштәрҙе бүләкләргә булыр ине. "Педагогик өмөт" номинацияһын алыусыларҙың береһе, 51-се мәктәп уҡытыусыһы Тимур Рәхмәтуллин мөғәллимлек итә башлауына икенсе йыл китеүе һәм был конкурсҡа оҙайлы хеҙмәт стажы туплаған коллегаларының тәжрибәһен күреүҙе маҡсат итеп килеүе, киләсәктә һөнәри йәһәттән нисек үҫешергә, ниндәй проекттар эшләргә юл күрһәтеүе тураһында һөйләнә. Конкурсты ойоштороусыларҙың йәш педагогтарға уҡытыусылыҡ эшенең айышына төшөнөргә, өлкән коллегаларынан күреп өйрәнергә һәм тырышлыҡтары өсөн бүләкләнергә мөмкинлек биреүе, һис шикһеҙ, хуплауға лайыҡ. Сөнки йәштәр һәр ваҡыт остаздарының үксәһенә баҫа килергә теләй. Шулай булмаһа, быуындарбыуынға тапшырыла килгән анбелем, яңы асыштар үҫеш булыр инеме?

5-се лицей уҡытыусыһы Нурзилә Нәҙерғолованың "Башҡортостандың баш ҡалаһы башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы - 2018" конкурсы еңеүсеһе тип табылыуы ла шуны дәлилләүсе күренеш булып тойолдо. Ни өсөн тигәндә, Нурзилә Дәүләтгәрәй ҡыҙы алты йыл хеҙмәт стажы туплаған йәш педагог һәм ул быға тиклем дә ҡала, республика кимәлендәге төрлө һөнәри конкурстарҙа әүҙем ҡатнашҡан уҡытыусы. Шуға ул был конкурсҡа ла тулы әҙерлек менән килгән. "Былдай мәртәбәле конкурста еңеүемә шатмын, үҙемде бер баҫҡысҡа юғары күтәрелгәндәй хис иттем. Был еңеүем минә киләсәктә дәртләнеп эшләргә, яңы үрҙәр яуларға этәргес көс булыр", - ти Нурзилә Нәҙерғолова.

"Башҡортостандың баш ҡалаһы йыл уҡытыусыһы - 2018" конкурсының абсолют еңеүсеһе тип танылыусы 51-се мәктәптең рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Елена Исакова һөнәри үҫештән тыш, был ярыш йәмғиәт алдында уҡытыусының абруйын күтәрергә ярҙам иткән бер сара, тип иҫәпләй. "Тормош бер урында тормай, бөтә тармаҡтар ҙа үҫешә, үҙгәрә. Шуға уҡытыу процесы ла үҙгәрергә, заман менән бергә барырға тейеш. Бының өсөн тейешле кимәлдә бөтә шарттарҙы булдырыу зарур, әлбиттә", - тине Елена Михайловна әңгәмәләшкәндә. Әйткәндәй, уҡытыусыларҙың һөнәри конкурсында рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары араһында 127-се мәктәптән Екатерина Селюкова, татар теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары араһында 98-се мәктәптән Ирина Сәмиғуллина иң юғары һөнәри оҫталыҡ күрһәткән.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Педагогтарҙың һөнәри конкурсын уҙғарыуҙы йолаға әйләндергән кеүек, Өфө ҡалаһының белем усаҡтарында эшләгән уҡытыусылары алдынғы ҡарашлы, юғары профессионалдар тип ҡабул итергә күнеккәнбеҙ. Сираттағы конкурс еңеүселәре лә ошо ышанысты аҡлар, алда көтөлгән республика кимәлендәге һөнәри ярыштарҙа баш ҡаланың абруйын күтәрер, тип ышанайыҡ.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# БЕР АҘ АРТА...

● **Февраль башынан айлыҡ аҡсалата түләүҙәр күләме 2,5 процентҡа артты рылды.** Пенсия фондының Башҡортостан буйынса бүлексәһендәге матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, Башҡортостанда 325 мең кеше ошондай түләүҙәр ала. Улар араһында - Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусылар, фашизмдың балиғ булмаған әсирҙәре, "чернобылселәр", Семипалатинск полигонында радиация тәьсиренә дусар булғандар, инвалидтар һәм башҡа федераль льготалылар. Бер үк ваҡытта айлыҡ аҡсалата түләүҙәр составында социаль хеҙмәттәр йыйымын биреүгә йүнәлтелгән аҡса суммаһы ла арта. 1 февралдән ул 1075,19 һум тәшкил итә. Шуның 828,14 һумы - бушлай таратылған дарыуҙарҙы алыуға, 128,11 һумы - шифахана-курорт дауаланыуына, 118,94 һумы ҡала яны тимер юл транспортында бушлай юл йөрөүгә, шулай уҡ ҡала-ара транспортында дауаланыу еренә барып ҡайтыуға бүленә.

● **Февралдән Башҡортостанда әсәлек һәм балалыҡ менән бәйле пособиеларҙың күләме артты. Был турала Рәсәй Федерацияһы Социаль страховка фондының төбәк бүлексәһе хәбәр итә.** Балалы ғаиләләргә, шул иҫәптән бала тыуғас бер тапҡыр бирелә торған, сабыйҙы йәш ярымға тиклем тәрбиәләгән өсөн айлыҡ (пособиеның минималь күләме) һәм йөклөлөктөң иртә срогында медицина ойошмаларына иҫәпкә баҫҡан өсөн пособиелар индексацияланды. Рәсәй Хөкүмәтенең 2018 йылдың 26 ғинуарындағы ҡарарына ярашлы, уларҙың күләме 2,5 процентҡа арттырылды. Шулай итеп, район коэффициентын иҫәпкә алып, баланы йәш ярымға тиклем тәрбиәләгән өсөн айлыҡ пособиеның минималь күләме тәүге бала өсөн - 3 613, 68 мең һум; икенсе һәм артабанғы сабыйҙар өсөн 7 227,35 мең һумға етте. Бала тыуғас, ата-әсәгә бер тапҡыр 19 272, 95 һум түләнә.

МИНЕҢ ИР-ЕГЕТЕМ



# ҮҘ ЯЙҘАРЫНА ҠУЯМ

**Төрлө халыҡтарҙа ғаиләлә ир бала тәрбиәләүгә ҡараштар айырыла. Башҡорттар, ир бала ата-инәгә таяу, йортҡа терәк, ти. Тик унда был сифаттарҙы үҫтерергә кәрәк. Бала үҙаллы, яуаплы, булдыҡлы булһын тиһәгеҙ, уға бер аҙ ғына мөмкинлек бирегеҙ. Быға мин ике ир бала тәрбиәләй башлағас ҡына төшөндөм.**

Бөгөнгө атай-әсәйҙәр баланы ныҡ ҡурсалай. Бала ҙурайып бөткәнсе үҙе ашай ҙа, кейенә лә, уйнай ҙа алмай. Ашағыһы килмәй икән, илатып булһа ла ашаталар. Ашағым килмәй, тип әйтергә лә ярамай уларға. Йәше тулғас та, ҡалаҡ тотторогоҙ ҙа, эргәһендә ҡарап тик ултырығыҙ. Әлбиттә, күпмелер ваҡыт ашаған һайын өҫтәлде, иҙәнде йыуырға тура киләсәк. Асыҡһа, бала ашай ул, шуға көсләп ауыҙына тыҡмағыҙ, һайлау мөмкинлеге бирегеҙ. Телевизорҙы үҙе тоҡандырһын, йәнһүрәттәрен үҙе ҡуйһын, мәктәпкә порфелен үҙе әҙерләһен. Юғиһә, артыҡ ҡурсалап, бөтәһен дә контролдә тоторға тырышып, үҙебеҙ уларға үҫергә юл ҡуймайбыҙ. Нисек үҙаллылыҡҡа өйрәнһен дә, киләсәктә үҙе ҡатын ире, балалар атаһы булғас, уларҙы нисек яҡлаһын ул? Өләсәйҙәребеҙҙе уйлайым да, хөкүмәт эше араһында ғаиләләге 6-7 баланы әпәүләп ултырырға ла ваҡыттары булмаған, шуға ла улар лайыҡлы ир-егет булып үҫкәндер. Үҙенең ҡылығы өсөн үҙе яуап бирерлек булып. Ә бөгөн бала эш боҙа, әсәй төҙәтә. Өлкәнәйгәс тә әсәһенең итәгенә йәшенеп йөрөүселәр әҙ түгел бит. Йәмғиәттә, ысын ир-егеттәр юҡ ул, тигән фекер шунан килеп сыҡҡандыр ҙа.

Ҡурсалау, тигәндән, ир балаларҙа эргә-тирәһендәгеләргә ярҙам итеү, уларҙы яҡлау, йәлләү инстинкты һалынған булалыр ул. Шулай бер ҡыш көнө өлкән улым менән боҙ майҙансығында шыуабыҙ. Уға 4 йәш тирәһе. Өшөп күгәрҙем, тик бының берҙә генә ҡайтҡыһы килмәй. Ҡайтайыҡ, тип әйтеүҙе ҡолағына ла элмәй. "Өшөнөм", тием ахырҙа. "Ныҡмы?" - тип һорай. "Эйе", - тием. "Әтеү, әйҙә", - ти ҙә был, алдан төшөп атлай. Бойороҡ ҡатыш етди тонын ишетеп, шым ғына артынан атлағанымды һиҙмәй ҙә ҡалдым. Шунан алып балаларымдың алдынан алып, үҙем, тип торғаным юҡ. Атай менән улдарҙың мөнәсәбәте, атай тәрбиәһе - айырым тема, әммә әсәй менән улдарҙың үҙ-ара аралашыуын дөрөҫ ҡорамдыр, тип ышанам. Улар минең яратыуымды белә, ниндәй генә хәлдә лә - "икеле" алһалар ҙа, уйнап курткаһын йыртһалар ҙа, телефонын юғалтып ҡайтһалар ҙа аңларға тырышасағымды беләләр. Уларҙы яратҡан өсөн мин уларға үҙаллы булырға мөмкинлек бирәм. Бөгөн улдарым - минең терәгем. Киләсәктә илебеҙгә лә терәк булырҙар, тип ышанам.

**Рәзилә БАЙЕГЕТОВА.**

Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Диабет

❖ Диабеттан һаҡланыу өсөн 1-әр стакан бәпембә, көртмәле, кесерткән япрағын ваҡлап, 2-3 ҡалаҡ ҡатнашмаға 0,5 литр ҡайнар һыу ҡойорға, 2-3 сәғәттән һөҙөргә һәм көнөнә 4-5 тапҡыр яртышар стакан эсергә. Үлән ҡатнашмаһын ҡулланып бөткәнсе дауаланырға.

### Йөрәк ауыртҡанда

❖ 1 ус яңы ғына йыйылған гөлйемеш сәскәһенә ярты литр ҡайнар һыу ҡойорға, 1 сәғәт тонәтергә, һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда яртышар стакан эсергә. Дауаланыу курсы - 1 ай.

### Тире сирҙәренән

❖ Диатез менән дерматитты дауалау өсөн 3-4 әстерхан сәтләүеген мейестә көрән төҫкә ингәнсе бешерергә. Һыуынғас, ярырға һәм сәтләүектәрҙе иҙергә, балыҡ майы ҡушып, компресс итеп һалырға. Кипһә, тағын алыштырырға. Оҙаҡ та үтмәй, тире таҙара.

### Ҡояшҡа аллергия

❖ 7 йәш әрем ботағын һауытҡа һалып, яртыһына тиклем спирт ҡойорға, ҡараңғы урында 3 көн төнәтергә. Мамыҡ менән проблемалы урындарға һөртөргә. Сөйәл үләне төнәтмәһе менән ванна инергә.

### Баш ауыртыуынан...

❖ Дегәнәк япрағын эҫе һыу менән бешекләп, башҡа һалып, яулыҡ ябынһағыҙ, 15-20 минуттан баш ауыртыуы бөтәр. Дегәнәк япрағы өҫтөнән целлофан ябырға ла була.

### Йоҡлай алмаһағыҙ...

❖ 3 өлөш ҡомалаҡ тубырсыҡтары, 2 өлөш ҡаҙаяҡ (папоротник), 1 өлөш лавр япрағын марлянан тегелгән мендәргә тултырығыҙ һәм йоҡлаған урынығыҙҙа баш осона элеп ҡуйығыҙ.

❖ Тигеҙ өлөштә ҡара сәй менән аҡ сәскә үләнен болғатығыҙ. Йоҡлар алдынан 1 ҡалаҡ аҡ сәскәле сөйгә 1 стакан ҡайнар һыу өҫтәп, 5 минуттан эсергә.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

*ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...*



# МӨХӘММӘТ БӘЙҒӘМБӘР

## Мосолмандарҙың Мәккәгә барғаны

628 йылдың февраль айында Мөхәммәт бәйғәмбәр үҙ өммәттәштәре менән бергә тыныс ҡына, бер ниндәй ҡаршылыҡтарға осрамайынса, Ҡәғбәгә инеүен төшөндә күрә. Иртә менән ул мосолмандарға ураҙа айы тамамланыу менән үҙенең Мәккәгә ғибәҙәт ҡылырға барырға йыйыныуы тураһында әйтә. Барырға теләүселәрҙә үҙе менән саҡыра. Төрлө мәғлүмәттәргә ҡарағанда, Мөхәммәт бәйғәмбәр менән ете йөҙ мең тирәһе кеше юлға сыға. Улар барыһы ла бик ныҡ ҡоралланмаған, ҡорбан салыу өсөн һикһән дөйә алалар.

Бер аҙ барғас, Мөхәммәт бәйғәмбәр хәрби кейемен сисеп, тәһәрәт ала ла, аҡ төҫтәге хаж кейемен кейә. Уға башҡалар ҙа эйәрә. Ҡоралдарын йыйып ҡуйып, үҙҙәре менән ҡылыстарын ғына ҡалдыралар. Артабан Мәккәгә табан юлланалар. Юлда ҡөрәйштәрҙең уларҙы Мәккәгә индермәйәсәге, ә Хәлит ибн Вәлит ике йөҙләгән һыбайлы менән мосолмандарҙы тау юлдарынын береһендә көтөп тороуы тураһында хәбәр итәләр. Мөһәжирҙәр был юлдарҙы һәйбәт белгән була. Шуға ла юлдан тау һуҡмаҡтарына боролоп, Хәлит ибн Вәлит көтөп торған урынды урап үтеп китәләр.

Мосолмандар Мәккәгә яҡынайғас, ҡала эсендә ҡыҙыу бәхәс ҡуба. Әбү Суфиян уларға хажды рөхсәт итеү яғында була. Тик күпселек уға ҡаршы сыға.

Мөхәммәт бәйғәмбәр Мәккәгә илсе итеп үҙенең кейәүе Ғосманды ебәрә. Өсөнсө көн үтеүгә Мәккәнән килгән берәү ҡөрәйштәрҙең Ғосманды үлтереүе тураһында хәбәр итә. Мөхәммәт бәйғәмбәр өммәттәштәре алдында Ғосмандың үлеме өсөн үс алмайынса, ҡөрәйштәр менән һуғыш яланында осрашмайынса, бер ҡайҙа ла китмәйәсәге тураһында ант бирә һәм мосолмандарҙы ла антына ҡушылырға саҡыра. Барыһы ла ант бирә лә, хәрби кейемдәрен кейә башлай. Ләкин ошо ваҡыт ҡаланан тағы бер хәбәр килә: Ғосман үлтерелмәгән, уны тотҡарлағандар ғына.

Оҙаҡламай Ғосман үҙе лә килеп етә. Унын менән бергә Мәккәнең иң абруйлы кешеләренең береһе - Сөхәйли ибн Әмре килә. Ул Мөхәммәт бәйғәмбәр менән осраша ла, Мәккә аҡһаҡалдары исеменән ун йыллаға түбәндәге килешеү шарттарын белдерә.

1. Ун йыллаға мосолмандар менән ҡөрәйштәр араһындағы һуғышты туҡтатырға.

2. Был килешеүҙе төҙөгәндән һуң, мосолмандар яғына күскән ҡөрәйштәрҙе кире ҡайтарырға, ҡөрәйштәрҙә иһә үҙҙәре яғына күскән мосолмандарҙы ҡайтарырға мәжбүр итмәҫкә.

3. Быйыл мосолмандар хаж ҡылмайынса ҡайтып китергә тейеш, ә киләһе йыл, мосолмандар килеүгә, ҡөрәйштәр өс көнгә Мәккәнән сығып китәсәк. Мосолмандар иһә Мәккәлә шул өс көндән дә артыҡ булырға тейеш түгел.

4. Мөхәммәт менән дә, ҡөрәйштәр менән дә хәрби берҙәмлек төҙөргә теләүсе ырыуҙарға бер яҡтан да баҫым яһалырға тейеш түгел.

Мөхәммәт бәйғәмбәр был шарттарҙың барыһына ла риза була һәм Ғәлигә килешеү шарттарын ике дана яҙып бирергә ҡуша.

Килешеүгә ҡул ҡуйылғандан һуң, Мәккә яғынан бер йәш егет йүгереп килгәнен күрәләр. Сөхәйли ибн Әмренең улы - Әбү Жандал була ул. Мөхәммәт бәйғәмбәр янына килеп етә лә, үҙенең мосолман динен ҡабул итергә теләүе, был теләге өсөн атаһы уны биклап тотоуы тураһында әйтә. Ләкин Мөхәммәт бәйғәмбәр үҙ һүҙенә тоғро ҡала.

- Мин халыҡ менән килешеү төҙөнөм, - ти ул Әбү Жандалға. - Беҙ үҙ-ара йөкләмәләр алдыҡ һәм уларҙы боҙмаясаҡбыҙ. Ныҡ бул, түҙ. Аллаһы Тәғәлә һиңә һәм һинең кеүектәргә ҡотолоу юлын Үҙе күрһәтер...

(Дауамы бар).

*МИНЕҢ ИР-ЕГЕТЕМ*



# УСТАРЫМДЫ ҺӘМ...

## йөрәгемде асыҡ тотам

**Беҙ, ҡатын-ҡыҙҙар, ир-егеттәрҙән һәр саҡ нимәләр көтөп өйрәнгәнбеҙ. Иғтибар, яҡлау, терәк, һөйөү, кәңәш, беренсе аҙым, ярҙам, ҡатылыҡ һ.б. Ә үҙебеҙ, быларға яуап итеп, уларға ҡатын-ҡыҙы наҙы, ҡатын-ҡыҙ йылылығы бирәбеҙме? Кемегеҙ ғаиләгеҙҙәге ир-егеттәргә һуңғы тапҡыр яғымлы, йылы һүҙҙәр әйтте? Уның яҡшы яҡтарын, матур сифаттарын аңғарҙы, маҡтаны, арҡаһынан ҡаҡты? Был рубрикабыҙ ир-егеттәргә әйтеләһе иң изге һүҙҙәргә бағышлана. Байрам айҡанлы ғына түгел, башҡа ваҡытта ла был рубрикаға хаттар ебәрә алаһығыҙ. Шулай итеп... Иғтибарығыҙға - Сибай ҡалаһынан яҙылған хат.**

- Был тормоштағы минең иң ҙур терәгем - ирем - Дамир Сәйғәфәр улы Ҡаһарманов. Беҙ унын менән бер юғары уҡыу йортонда уҡығыҡ, шунда танышттыҡ. Унын бик аҡыллы, тәрбиәле, интеллигент булыуы әсир итте мине. 25 йыл бергә йәшәгән ғүмер эсендә тормош иптәше итеп тап уны һайлауыма бер тапҡыр ҙа үкенмәнем. Ул сабыр, яуаплы, тоғро һәм оло йөрәкле кеше булыуын был йылдар эсендә әллә нисә тапҡыр иҫбатланы инде.

Ирем нимәгә тотонһа ла, оҫта итеп башҡара белә: шәп балта оҫтаһы, электрик, сантехник. Бер эшкә лә ситтән оҫта ялламайбыҙ, барыһы ла үҙенең ҡулынан килә. Юғары уҡыу йортонда физика, математика информатика һәм философия фәндәре буйынса нигеҙле белем алыуҙан тыш, күп кенә махсус дисциплиналарҙы ла үҙләштерҙе, бөгөн дә студенттарға сифатлы белем бирә. Һәм ҡайҙа ла - эшләгән коллективында ла, өйҙә лә, туғандары, дуҫтары араһында ла намыҫлы, әҙәпле ир-егет булып ҡала белә.

Ошондай ирҙең ҡатыны булараҡ, мин, әлбиттә, уға ул бүләк итергә хыялландым. Аллаға шөкөр, өс малай таптым. Оло улыбыҙ Ильяс Мәскәү ҡалаһында Бөйөк Петр исемендәге хәрби академияла, икенсе улыбыҙ Шамил шул уҡ ҡала электрон техника институтында белем алалар. Кинйәбеҙ Арыҫлан Сибайҙағы гимназияла тик яҡшы билдәләренә генә өлгәшә, теүәл фәндәр буйынса республика бәйгеләренең еңеүсеһе булып килә. Әлегә малайҙарҙың яҙмыштарын билдәләү иртәрәктер, әммә улдарыбыҙ беҙҙең өсөн оло ғорурлыҡ, уларға өмөтөбөҙ ҙур.

Беҙҙән йыш ҡына "Малайҙарҙы нисек тәрбиәләргә?" тип һорайҙар. Ирем ундай осраҡта: "Һүҙ менән бер нәмәгә лә өлгәшеп булмай, уларға үрнәк күрһәтергә һәм төрлө яҡлап үҫтерергә кәрәк", - тип яуаплай. Беҙҙең малайҙар, мәҫәлән, бейеүгә лә, музыкаға ла, шахматҡа ла, ағас һырлауға ла, йөҙөүгә лә, саңғыға ла, еңел атлетикаға ла, сәнғәт мәктәбенә лә йөрөнө. Уларҙың буш ваҡыттары булманы. Шулар араһында баҡсаға алып барып, ер ҙә ҡаҙҙырҙыҡ, үлән дә утаттыҡ, ауылда бесән эшләттек, һыу ҙа ташыттыҡ, иҙән дә йыуҙырҙыҡ, ашарға ла бешерттек. Һөҙөмтәлә егәрле, түҙемле, ныҡ, ныҡыш егеттәр үҫеп етте.

Тағы ла бер мөһим нәмә: ирем улдары менән бик яҡын аралаша. Улар кистәрен оҙайлы итеп һөйләшеп ултыралар, бергә шахмат уйнайҙар, хоккей ҡарайҙар, һунарға сығалар. Шундай бер хәлде лә телгә алып үткем килә. Бер ваҡыт, ниндәйҙер көнкүреш сәбәбенә көйһеҙләнеп, иремә тупаҫыраҡ өндәштем. Ул сығып киткәс, уртансы улым яныма килде лә: "Әсәй, ни эшләп һин атайға улай итеп әйттең?"- тип бик рәнйеп һораны. Оялып киттем. Ысынлап та, артыҡраҡ ебәргәнемде, ә унан да бигерәк, атайҙарының улдары өсөн үтә лә ҡәҙерле һәм хөрмәтле икәнен төшөндөм. Шулай уҡ малайҙарҙың үҙҙәренә килгәндә лә, ир балаларҙы тыңлатыу өсөн уларҙы баҫыу йәки ҡурҡытырға тырышыу бик ҙур хата икәнен беләм. Ниндәйҙер йәштә улар һинән ҡурҡмай башлай. Шунлыҡтан, киреһенсә, ғорурлыҡтарын һындырмай, ирлек сифаттарын тапамай үҫтерергә кәрәктер. Хатта ҡайһы ваҡыт улар тупаҫыраҡ, ҡороораҡ булып киткәндә лә, баш бирмәҫкә саяланғандарында ла аяулы булыу зарур. Улар барыбер йәйға килә, йомшаҡлыҡҡа, иркәгә оҙаҡ ҡаршылаша алмайҙар.

Ошондай ир-егеттәрҙең хужабикәһе булараҡ, уларҙы тәмле-татлы менән һыйларға, күңелдәрен күрергә яратам. Ҡәйнәм мәрхүмәнең, ете ул үҫтергән ҡатындың, "Ирҙәр улар йылы ашҡа һәм йылы ҡарашҡа мохтаж халыҡ бит ул" тигәндәрен онотмайым. Улдарыма ҡатын-ҡыҙ нисек булырға һәм уларға, ир-егеттәргә ҡарата ниндәй мөнәсәбәт күрһәтергә тейеш икәнлекте һеңдерергә тырышам. Ҡатын-ҡыҙ хеҙмәтенә, уның фиғеленә иғтибарлы һәм мәрхәмәтле булыуҙарын да алға ҡуям.

Ир-егет менән идара итеү, мин быны "идара итеү" тимен, сөнки ғаиләлә ир кеше һәм ир балалар улар барыбер ҙә әсәйгә ҡарап тора, бик яуаплы миссия. Бына ошо тәңгәлдә әсәйҙең үҙен дөрөҫ тота һәм ир-егеттәрен дөрөҫ йүнәлештә үҫтерә белеүе мөһим роль уйнай. Күп осраҡта минең һүҙем ир-егеттәрем һүҙе аҫтында баҫылып ҡалһа ла, башҡорт менталитетына ярашлы "ҡатын-ҡыҙ" баҫҡысына төшөрөлөп ҡуйһам да, йыш ҡына улар өсөн борсолоп һәм хәүефләнеп балаыҙ һыҙырға тура килһә лә, өҫтәлдәге ашым һыуынып, йоҡоһоҙ төндәрем баһаланмай, теләктәрем ҡолаҡҡа эленмәй ҡалғанда ла, мин уларҙың иң ауыр һәм зарлы саҡтарында баштарын минең устарыма һалырға теләгәндәрен беләм. Шуға ла устарымды һәм йөрәгемде асыҡ тотам.

Бала саҡта сая, ҡаты холоҡло атай ҡулында үҫкәндә лә, әлеге тормошта ирем, улдарым миңә үҙемдең ошо ирҙәр яҡлауына һәм яратыуына мохтаж булған нескә ҡатын-ҡыҙ икәнемде онотоорға бирмәне һәм бирмәй. Мин улар өсөн яғымлы, матур, изге булырға тырышам. Һәм шуға өлгәшәм дә.

**Венера ҠАҺАРМАНОВА.**
**Сибай ҡалаһы.**

*ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*



# ЫШАНЫСЛЫ БУЛҺЫН УЛАР

**Ир-егеттең күңелендә эйәрле-йүгәнле ат ятыр, тиҙәр. Шуғалыр ҙа беҙ, бигерәк тә башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары, буласаҡ тормош юлдашыбыҙҙа ғына түгел, үҙебеҙҙә уратып алған ир-егеттәрҙә лә шундай сифаттарҙы эҙләйбеҙ, йәғни ул - аяғында ышаныслы баҫып торған, заман елдәренә бирешмәгән, ҡәтғи ғәҙел һүҙе булған, ғаиләһен яҡлай алған, туғандарға терәк булырҙай, маҡсатлы көслө зат. Талаптар артыҡ күпме? Бәлки, шулайҙыр ҙа, әммә был тәбиғи: ғәҙәттә, ҡатын-ҡыҙ ышыкта, яҡлаулы булғыһы килә.**

Мин шундай сифаттарҙы бала саҡтан атайымда күреп үҫтем. Ғаиләбеҙ заманына күрә артыҡ ҙур ҙа түгел кеүек: биш бала һәм ҡартәсәйем. Ҙурая төшкәс кенә белдек, ҡартәсәй тигәнебеҙ атайымдың мин әле тыумаҫ элек вафат булған әсәһенең бер туған апаһы булған икән. Бөртөк кенә улы һуғышта ятып ҡалғас, яңғыҙ олоғайған әбейҙе атай-әсәйем бағыуға алған. Атайымдың инәһенә булған мөнәсәбәте, әсәйемә ҡарата мөғәмәләһе, балаларын йәндәй күреүе беҙҙә, ғаилә башлығы шундай булырға тейеш, тигән фекер уятҡандыр.

Әйткәндәй, буласаҡ тормош юлдашымда ла тап атайыма хас сифаттарҙы күреп ғашиҡ булғайным. Таһир Баймаҡ районының Ниғмәт ауылында Мырҙағәлиндарҙың биш балалы ғаиләһендә баш бала булып үҫә. Атаһының колхозда яуаплы урында эшләүе, әсәһенең уҡытыусы булыуы, һеңле-ҡустыларына ағайлыҡ яуаплылыҡ һалғандырмы, әллә һәр саҡ ҡурсалап торған ҡартәсәһе тәрбиәһемелер, әллә афған яуын үтеүемелер - ул тормошто ҡәҙер итә белә. Миңә уның ололарҙы ололай белеүе, үҙенән кеселәргә иғтибарлы булыуы, ярҙамсыллығы, ниндәй генә осраҡта ла үҙе булып ҡалыуы оҡшай. Күп белә. Ниндәй генә һорауға ла яуабы янында, ғаилә беҙ уны "аяҡлы энциклопедия" тип йөрөтәбеҙ. Донъяла идеаль кешеләр юҡ, шулай ҙа атайым янында арҡалы булған кеүек, ирем янында үҙемде яҡлаулы тойоу үҙе бер бәхет, тип һанайым.

Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары ир-егеттәргә артыҡ күп талап ҡуя, тигәнде һуңғы ваҡытта йыш ишетергә тура килә. Артығы түгел, ә иң мөһиме - көслө заттың ышанысы булыуы ғына кәрәк беҙгә. Тормоштағы насар ғәҙәттәрҙән, ваҡлыҡтан, нәфсенән өҫтөнөрәк, көслөрәк булһын улар.

**Гөлсәриә ӘБИЛЕВА.**
**Сибай ҡалаһы.**

*ҺҮНМӘҪ ДАНЛЫЛАР*

# ГЕНЕРАЛ ШАЙМОРАТОВ ҺӘМ...

## башҡорт атлылары тураһында хәҡиҡәти һүҙ

Генерал Шайморатовтың атлыларҙы рейдтан сығарыу һәм фронт һыҙығын үтеү тураһындағы был данлы юлы хаҡында бер генә яҙма ла табылманы. Шундай яуаплы көндәрҙә лә эскелектән арынмаған генерал Борисов рейд тамамланғандың һуңында үҙенең яуапҡа тарттырыласағын күҙаллаған һәм ниндәйҙер мәкерле ҡылыҡтар ҡылған, күрәһең.

Үкенескә ҡаршы, бөгөнгө тарихсылар ҙа, журналистар ҙа Шайморатовты ат өҫтөндә ҡылыс болғаған килеш кенә күрһәтә. Ә уның ниндәй зирәк, аҡыллы, алдан күрә белеүсе етәксе, хәрби хәрәкәттәр оҫтаһы икәнен күҙҙән ысҡындыралар. Башта телгә алған Шайморатов тураһында яҙған коллегаларыбыҙ ҙа украин тарихсыһы А.А. Масловтың "асышына" таяна. Улар фекеренсә, ҡаты яраланған Шайморатовты дошманға һатылған Дон казактары язалай. Хатта видеофильмда ла ошо версия төшөрөлә. Голливуд киносылары күҙлегенән был күренеш, әлбиттә, отошло, геройҙың яҙмышы драмалыраҡ килеп сыға. Әммә тарихи хәҡиҡәткә хыянат итеү был. Шайморатовтың яу яланында табылған мәйете урындағы халыҡ тарафынан "билдәһеҙ юғары дәрәжәле командир" булараҡ хөрмәтләп ерләнә. Күпмелер ваҡыт үткәс, экспертиза үткәрелә. Был эштә Шайморатовтың ҡатыны Ольга Павловна ла ҡатнаша. Ентекле тикшереүҙәр кәүҙәнең Шайморатовтыҡы икәнен иҫбатлай. Был документтар Мәскәүҙә юғары инстанцияларҙа һаҡлана, шулай уҡ Өфөнөң дәүләт үҙәк архив фондына ла тапшырыла. Журналистарҙың нимәләрҙер ижад итер алдынан ошо документтарҙы өйрәнеп алыуҙы бурыс итеп ҡуймауы аптырата мине...

Башҡорт атлылары Бөйөк Ватан һуғышында тиңһеҙ батырлыҡтар күрһәтеп, данлы юл үтә. Әйтеүе генә анһат, ул юл бөгөнгө Липецк, Воронеж өлкәләре ерҙәрендә башланып, Сталинград тарафтарында дауам итә. Украинала дошман тылына 70 километрға үтеп инеп, гитлерсыларҙы ваҡытлыса оялап алған төбәктәрҙә дөмбәҫләй улар. Артабан башҡорт яугирҙарының һуғышсан юлы Украина, Белоруссия, Польша аша Берлинға юллана. Был юл Берлин ҡалаһының көнбайыш өлөшөндәге Моабит төрмәһенән тотҡондарҙы азат итеү менән тамамлана. Һуғыш тамамланған көндәрҙә беҙҙең батырҙар Эльба йылғаһында ат һуғара, американдарға йылға аша дуҫлыҡ ҡулдары һуҙа. Шуныһы үкенесле, уларға Еңеү байрағын елберләтеп Башҡортостанға ҡайтыу бәхете генә тәтемәй. Данлыҡлы гвардияны Ҡаф тау артындағы пехотаға ҡушалар. Был хәлгә хатта аттар ҙа ризалашмай ыҙалата. Баҡһаң, был хәлдең дә үҙ сәбәптәре булған икән...



1941 йылдың көҙөндә, Сталиндың фарманы буйынса, 112-се Башҡорт атлылар дивизияһы менән бер рәттән, Кавказ һәм Урта Азия халыҡтарынан торған тағы ла 19 милли атлылар дивизиялары ойошторолған була. Ләкин уларҙың күптәре беҙҙекеләр кеүек ныҡлыҡ күрһәтә алмай, ҡайһылары фронтҡа барып еткәнсе үк тарҡала. Дөрөҫөрәге, бары тик Башҡорт кавдивизияһы ғына һуғыштың аҙағынаса һаҡланып, ҙур көс булып ҡала ала. Байрағыбыҙҙа дүрт хәрби орден, сафтарыбыҙҙа 78 Советтар Союзы Геройы һәм биш Дан орденының тулы кавалеры була! Тарихсылар раҫлауынса, был күрһәткестәр буйынса СССР ҡоро ер ғәскәрҙәрендә уларға тиңдәш дивизия табылмай. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, дан менән күтәреү урынына, беҙҙекеләрҙе Карабахҡа ебәреп, пехотаға әүерелдерәләр.

Сталин һуғыштан һуң милли дивизияларҙы телгә алыуҙан тыйылып торорға ҡуша. Сөнки төркмән, үзбәк, ҡалмыҡ, чечен һәм башҡа төбәктәрҙә формалашҡан дивизиялар хаҡында әйтер һүҙ ҙә булмай. Ә бер Башҡорт дивизияһына ғына дан йырлау һис килешкән эш түгел, йәнәһе. Бына шундай бик буталсыҡ хәлдәр ҡылына тарихта. Шайморатовтың үлеме лә серле ваҡиғаға әйләндерелә, оҙаҡ йылдар исеме лә телгә алынмай. Күренекле тарихсыбыҙ Тамимдар Әхмәҙиев "Башкирская гвардейская кавалерия" исемле тулы йөкмәткеле китабында ла Шайморатов хаҡында урыҡ-һурыҡ ҡына телгә ала. 1948 йылда Сталиндың юғарыла аталған тыйыуы алып ташланһа ла, Шайморатов һәләкәте идентификацияланһа ла, уның һәм башҡорт атлыларының һуғышсан батырлығына дан йырлау һаман баҫылып килде. Бары тик "Шайморатов генерал" йыры ғына халыҡ теленән төшмәй йырлана килде...

Башҡортостан етәкселеге Миңлеғәле Минһажетдин улы Шайморатовҡа Советтар Союзы Геройы исемен биреүҙе 1948 йылда уҡ юллап сыға. Ул ваҡыттағы республика етәксеһе Сабир Ваһаповтың уңышҡа өлгәшәсәгенә шик булмай. Ләкин юллау ҡағыҙына ҡултамғаһын һорап, С.М. Буденныйға барғанда, С. Ваһапов көтөлмәгән ҡаршылыҡҡа осрап, баҙап ҡала. "Я что-то такого генерала не знаю и не помню", - тип хәбәр һала Семен Михайлович. Уның был ҡылығының сәбәбе һуңынан асыҡлана. Семен Михайлович Дон казактары өсөн төрлө наградалар юллауға күп көс һалған була, ләкин уның тырышлығы менән Герой исеме алғандар араһында боҙоҡ ҡылыҡлылар ҙа булыуы асыҡлана. Шуға ла Сталин уға ҡаты иҫкәртеү яһай һәм башҡаса наградалар юллап мөрәжәғәт итмәҫкә бойора. Әммә ошо хәлдән һуң ун йыл үткәс, С.М.Буденный КПСС Үҙәк Комитетына үҙ фекерен яҙа һәм Шайморатовтың был юғары исемгә лайыҡлылығын иҫбатлай: *"Мне стало известно, что Башкирский обком и правительство БАССР обратились с просьбой о присвоении посмертно звание Героя Советского Союза генерал-майору Шаймуратову Минигали Мингазовичу, бывшему командиру 112-й Башкирской кавалерийской дивизии. Я знал М.М. Шаймуратова как человека большой силы воли, способным военачальником и горячим советским патриотом. В те дни тяжелой борьбы с немецко-фашистскими захватчиками он проявил себя умелым организатором и командиром кавалерийского соединения, неоднократно показывал пример личного мужества, доблести и геройства.*

*Присвоение Шаймуратову посмертно звания Героя Советского Союза будет достойной оценкой его заслуг в борьбе против черных сил фашизма и послужит благодарному делу воспитания советских людей в духе беззаветной преданности нашей великой Родине.*

*Поддерживаю ходатайство Башкирского обкома и Совета Министров БАССР о присвоении посмертно звания Героя Советского Союза генерал-майору Минигали Мингазевичу Шаймуратову.*

*М.С. Буденный".*

Әммә Шайморатовҡа ошо юғары награданы юллауға ҡамасаулаусы тағы бер ваҡиға ҡалҡып килеп сыға. Үрҙә телгә алынған генерал Борисов фашист тотҡонлоғонан ҡотолғас, совет суды алдына баҫа һәм язаһын еңеләйтеү өсөн күп кенә бәләләрҙе Шайморатовҡа япһара. Ул, Шайморатов минең бойороҡто үтәмәне, шул арҡала дивизиялар һәм корпус дошман һөжүменә дусар булды, тип яҙа. Һәләк булған батырға ҡара яғып, Борисов үҙ йәнен аяп ҡалмаҡсы була. Судта бәйән ителгәнгә тиклем уның был бысраҡ ялыуы Мәскәүгә һәм Өфөгә ебәрелә. Билдәле инде: нахаҡ хәбәр иң үтемле көс, уның дөрөҫлөгөн тикшереүсе табылғанға тиклем бер ғәйепһеҙ кешене лә бысратыу сараһы була ала...

Шулай итеп, Шайморатов шәхесенә юҡ ғәйеп ташлап, үҙ язаһын йомшартыуға өлгәшә генерал Борисов. Һуңынан, үҙен намыҫлы кеше итеп күрһәтеү маҡсатынан, Өфөгә - Башҡортостан етәкселегенә, унан Мәскәүгә - оборона министры Р.Я. Малиновскийға хаттар ебә-рә. Йәнәһе, хаталары булһа ла, яуҙашын ул Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ тип иҫәпләй. Әммә был ваҡытта уның баштағы дәлилдәре көсөнә инеп өлгөргән була. Ул Башҡорт атлы кавалерия дивизияһы яугирҙарына ла хәбәр ебәреп ҡарай, тик уларҙан яуап ала алмай. Сөнки тарих та, халыҡ та хыянатты онотмай шул...

**Фәрит ВӘХИТОВ.**

**(Аҙағы. Башы 7-се һанда).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



Йәдкәр БӘШИРОВ

# БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

## Башҡорт-мадьяр концепцияһы

Өйрәнелгән дәүерҙә башҡорттар Урал-Волга буйы төбәгендә хәҙергегә оҡшаш төрки телдә һөйләшеүсе берҙән-бер халыҡ һаналған. Был теорияға Д.А. Хвальсондың хеҙмәтендә нөктә ҡуйыла. "Боронғо венгрҙар һәм башҡорттар килеп сығышы һәм этник берләшмәһе буйынса икеһе ике төрлө халыҡ, тимәк, тарихи-этнографик документтарҙа "башҡорт-мадьяр туғанлығы" теорияһы иҫбат ителмәй...", тип яҙа Р.Р. Кузеев. Артабан "... боронғо венгрҙарҙың jeno, дъярмат ырыуҙары менән башҡорттарҙың йәнәй, юрматы ырыуҙары бар икән, бында шуны хәл итергә кәрәк - улар сығышы буйынса кемдәр булған: венгрҙарға ҡушылған төркиҙәрме, әллә башҡорттар составына ҡушылған уғырҙармы?" - тип яҙа.

Башҡорт телендә венгр теленән алынған һүҙҙәрҙең булмауы венгрҙарҙың башҡортто формалаштырыуҙа ҡатнашмағанлығына тос бер дәлилдер. Төбәктә венгр топонимдарының бөтөнләй осрамауы урта Волгала һәм Урал алдында уларҙың йәшәмәүе, унда "Ҙур Венгрия" дәүләте урынлашмауы менән аңлатыла. Татар тарихсыһы академик М.З. Зәкиев түбәндәгесә яҙа: "Беренсенән, маджариттарҙың йәшәгән ерҙәрен билдәләү шик тыуҙыра. Икенсенән, ғәрәп сәйәхәтселәре бер тауыштан маджариттарҙы төркиҙәр, улар төркисә һөйләшә, тип белдерә. Өсөнсөнән, әгәр ҙә мишәрҙәр менән башҡорттар иң башта уҡ венгр телле мадьярҙар булһа, уларҙың телендә венгр субстраты йәғни венгр һүҙҙәре осрар ине, әммә улар был телдәрҙә юҡ...", - тип ғалим башҡорт-мадьяр концепцияһының ысынбарлыҡҡа тап килмәүен иҫбатлай. Б. А. Серебренников үҙенең "Башҡорт теле менән венгр теле бәйләнештәре мәсьәләһенә" тигән хеҙмәтендә лә "Башҡорт телендә венгр һүҙҙәре бөтөнләй юҡ", тип яҙа. Тимәк, венгрҙар башҡорттарҙың барлыҡҡа килеүенә бер ниндәй ҙә йоғонто яһамаған. Мадъяр-фин телдәрен өйрәнеүҙә ҡиммәтле хеҙмәттәре менән билдәле булған венгр ғалимы Бернат Мункачи: "...мадьяр теленең төрки элементтары был телдең "боронғо сыуаш" теленә яҡынлығы хаҡында һөйләй, венгр теле шул телдән барлыҡҡа килгән һәм бер нисә һөйләшкә бүленә", - тип раҫлай һәм бер нисә иҫбатлама килтерә (Н.И. Ашмарин, Чебоксары, 2012).

Р.Ғ. Буканованың "Дәүләтселек проблемалары: тарихи аспект" тигән китабында алты йыл буйына башҡорттар араһында йәшәүсе христиан дине миссионеры венгр Иоганканың отчет-документы килтерелә. Иоганканың 1320 йылда яҙған отчеты унда башҡорттар менән венгрҙарҙың мөнәсәбәте сағылыуы менән ҡыҙыҡлы. Ул башҡорттар араһында оҙайлы ваҡыт йәшәп, уларҙы католик диненә ауҙарырға тырышҡан. Плано Карпиниҙың, Юлиандың яҙыуҙарынан айырмалы рәүештә, был яҙмалар Иоганканың башҡорттар тормошон эске яҡтан яҡшы белеүе менән айырыла. Иоганка шулай яҙа: "Беҙ ике ағайым менән Баскардияға, күп һанлы халыҡ йәшәгән илгә барып еткәс, ағайҙарым минән айырылып китте. Ә мин Вилгельм атлы инглиз менән унда алты йыл буйына торҙоҡ... Беҙ уның менән үҙебеҙ белгән ысулдар, билдәләр, миҫалдар һәм иҫбатламалар ярҙамында уларға католик дине хаҡында аңлатырға тырыштыҡ... әммә улар ҡыҙып китеп, беҙҙе бының өсөн үлтерергә теләне..."

Бында башҡорттарҙың венгрҙарға ҡарата киҫкен мөнәсәбәтенә аптырарға түгел, христиан миссионерҙары уларҙың эске рухи донъяһына ҡағылған. Был миҫал башҡорттар менән венгрҙар араһында туғанлыҡтың булмауын тағы ла бер тапҡыр иҫбатлай.

**(Дауамы бар).**

✓ *Малайҙарҙың әүҙемлеген бишектән сикләй барып, тыйыу юлы менән ысын ир-егетлекте тәрбиәләп буламы ни ул! Шунан аптыраған булабыҙ, башҡорт ирҙәре араһында лидерҙар аҙ, әүҙемлек етешмәй тип.*



МИНЕҢ ИР-ЕГЕТЕМ



# АТАЙЫМ БУЛЫУЫ - БӘХЕТ

**Атай… Атай мөхәббәте… Атай йорто… Ябай ғына һүҙ, ә үҙенә шундай көслө образ һыйҙыра. Ир-атты беҙ, тәү сиратта, физик көскә эйә итеп күреп өйрәнгәнбеҙ һәм күпселек осраҡта ошо йәһәттән генә баһалайбыҙ. Ә уларҙың рухи байлығын, әхлаҡи көсөн асып һалыусы сифаттарына күҙ йомабыҙ.**

Кешенең йәмғиәттәге үҙен тотошо, яуланған үрҙәренең нигеҙе атай-әсәй тәрбиәһенә барып тоташа. Тыуған йортта ниндәй мөхиттә үҫә, ниндәй тәрбиә моделе күрә бала, оло тормошҡа аяҡ баҫҡас, ошоно уҡ ҡабатлай. Атай-әсәй ҡанаты аҫтынан сығып киткәс, үҙен шәхес булараҡ үҫтереүе, ҡатмарлы йәшәйештә үҙ урынын табыуы, ваҡлыҡты мөһимдән айыра белеүе, төрлө һынауҙарға ҡаршы торорға өйрәнеүе - барыһы ла ғаиләнән килә. Хәҙер тәрбиә күберәк әсәй иңендә тип билдәләнһә лә, бала өсөн, иң беренсе, атай һәм уның тәрбиәүи алымдары мөһим. Ғөмүмән, атайлы бала - ул арҡалы, бәхетле бала. Һәр бәләкәс ошондай бәхеткә эйә булырға тейеш, сөнки атай әсәй урынында була алмаған кеүек, әсәй ҙә балаға атайҙы алыштыра алмай. Шәхсән үҙем тулы, мөхәббәтле ғаиләлә үҫтем. Атайым, Барлыбаев Әғләм Әғзәм улы, Баймаҡ районы Йомаш ауылында йәшәй. Бөтә ғүмерен ятраҡан һөнәренә бағышлаған уҡытыусы эшендә оло ихтирамға лайыҡ кеше булһа, өйҙә балаларын яратыусы, ябай, алсаҡ атай. Оло йөрәкле, намыҫлы, ғәҙел, өлгөр кеше ул. Уның тағы ла бер яҡшы сифаты бар - ул бер ҡасан да кеше айырмай, барыһын да тигеҙ күреп, бөтәһе менән дә яҡшы мөнәсәбәт ҡора белә. Ғәҙеллек яратыуына, һәр саҡ һүҙендә тороуына, эшлекле булыуына һоҡланам һәм уға оҡшарға тырышам.

Әсәйем Ғәлиә Миңлеғәле ҡыҙы менән улар 30 йылдан ашыу татыу ғүмер итә. Ауылыбыҙҙың өлгөлө, матур ғаиләһе булып йәшәүҙәре менән дә үрнәк улар беҙгә. "Атай" һүҙен әйтә алғаныма рәхмәтлемен яҙмышыма. Янымда ошондай терәк булыуы менән бәхетлемен. Ул һәр ваҡыт беҙҙе тыңларға, дөрөҫ кәңәштәрен биреп юл күрһәтергә әҙер. Уның аҡыллы һүҙҙәре миңә йәшәү көсө бирә, иңдәремә ҡанат ҡуя. Беҙҙең өсөн яныып-көйөүен, бәләкәй генә еңеүебеҙгә лә ихлас күңелдән шатланыуын күреү, ҡаҙаныштарыбыҙға ғорурланыуын ишетеү үҙе бер бүләк беҙгә. Уның бөтә булмышынан балалары өсөн йәшәүе, беҙ тип өҙөлөүе асыҡ сағылып тора.

Ауылдарҙа баҡса тотмаған кеше юҡ. Атайым да бик уңған баҡсасы. Уның хатта үҙе сығарған ҡыяр һәм помидор сорттары ла бар. Емерелеп уңған тәмлекәстәрҙән эшләнгән төрлө салат һәм турамаларҙы асып, ҡыштың сатлама һыуығында атай йортоноң йылыһын тойғандай булабыҙ. Ә кәртә тулып торған мал-тыуар һуң! "Мал йәнле кеше", тиҙәр ҡайһы берәүҙәрҙе. Был хас та минең атайға ҡарата әйтелгән кеүек. Ул шундай ҙур ихласлыҡ менән кәртәләге малдарҙы тәрбиәләй, йәйгеһен уларға бесән әҙерләй. Ул бөтә эштәрен дә бар күңелен биреп башҡара һәм беҙҙе лә шулай өйрәтте. Илке-һалҡылыҡ юҡ уның булмышында. Бөтә теләктәренең дә тормошҡа ашыуының сере нәҡ ошо ихласлыҡта һәм тырышлыҡта, тип уйлайым.

Юморға бай, кешелекле, иғтибарлы, сыҙамлы минең атайым. Иремдә лә нәҡ уның һыҙаттарын күрәм һәм янымда атайыма оҡшаш кеше булыуы мине тағы ла бәхетлерәк итә. Ҡәҙерле атайымды һәм әсәйемде Хоҙай һаулыҡтан айырмаһын. Мин уларҙы яратам.

**Әлиә ХӘМӘҘИЕВА.**
**Өфө ҡалаһы.**

# АТАЙ ҒОРУРЛЫҒЫ -

## Йәки малайҙарҙы

**Көтөп алынған сабыйҙың донъяға килеүе һәр бер ғаилә өсөн иң иҫтәлекле һәм дә шатлыҡлы ваҡиғаларҙың береһелер ул. Малаймы, ҡыҙмы - берҙәй ҡыуанысла. Ә беҙҙең башҡорт ирҙәре малайлы булһа, уғата ҡыуана, шатлығы эсенә һыймай, дуҫ-иштәре алдында маҡтанып та ебәрә. Ул үҫтерәсәк атай булып киткәс, ир-ат үҙен мәртәбәлерәк итеп тоя шул. Малайҙар ысын ир булып үҫһен өсөн уларҙың тәбиғәтенә ярашлы тәрбиә биреү ҙә мотлаҡ. Ошо юҫыҡта, бигерәк тә йәш, тәжрибәһеҙ ғаиләләр ярҙамға мохтаж. Һөнәрем буйынса педагог-психолог булғас, ошо хаҡта байтаҡ ҡына ғилми хеҙмәттәр менән танышып, коллегаларым менән фекер алышып, малайҙар тәрбиәләүҙә йыш ҡабатланып торған төрлө ғәмәли ситуацияларға анализ бирергә лә тура килә ине. Ошо нигеҙҙә минең үҙ-үҙемә биргән һорауҙарым тыуҙырған фекер-яуаптар һеҙҙе лә ҡыҙыҡһындырыр, тип ышанам.**

▸ **Ир-егетлек сифаттары кешегә тәбиғәттән биреләме, әллә улар тәрбиә һөҙөмтәһеме икән?**

Бер йәшкә тиклемге сабыйҙар үҫешендә күҙгә элерҙәй психологик айырымлыҡтар күҙәтелмәй. Улар, тәбиғи ихтыяждарына ярашлы, бер үк төрлө илай, бер төрлө шатлана, ата-әсәһенә, яҡын туғандарына һис бер айырмаһыҙ эйәләшә. Малайҙар тыуғанда кәүҙәгә ҙурыраҡ булһа ла, ҡыҙҙарҙың физик үҫеш темпы уларҙыҡынан һәр саҡ бер аҙ юғарыраҡ була. Тәбиғәттән һалынған генетик программаға ярашлы, малайҙарҙың балиғ булып, ир-егеткә әйләнеүе - оҙайлыраҡ процесс.

Малайҙар менән ҡыҙҙар араһында психологик айырымлыҡтар бер йәш тирәһендә беленә башлай. Күрәһең, тап ошо ваҡыттан башлап бала организмында енес үҙенсәлектәре менән бәйле сифаттарҙы тышҡы, социаль мөхиткә сығарыу мөмкинлеге биргән генетик программа әүҙемләшәлер. Фәһемле күренгән бер миҫал килтерәйек.

Психологтар яңы тәпәй баҫҡан балалар менән бик ҡыҙыҡлы эксперимент уҙғара. Ҙур ғына бүлмәнең бер яҡ стенаһы янына сепрәк-сапраҡ, ҡурсаҡтар, уйынсыҡ һауыт-һаба, ҡаршы яҡҡа - тимер-томор, уйынсыҡ машиналар, ҡылыс-мылтыҡ кеүек нәмәләр ҡуйыла. Балаларҙы берәмләп бүлмәгә индергәс, бына нимә күҙәтелә: ҡыҙҙарҙың бөтәһе лә тиерлек ҡурсаҡтарға табан йүнәлһә, малайҙарҙы башлыса машина-фәлән ҡыҙыҡһындырыуы асыҡлана. Был факт кешенең генетик хәтеренең енес менән бәйле булыуы тураһында фекер йөрөтөргә нигеҙ бирә.

Ә бына башҡорт малайҙары уҡбашаҡ, йәйә эшләү менән мауыға (әйтерһең дә, улар боронғо ата-бабалары шөғөлөн генетик хәтер аша алған), һунар итеү, һуғыш уйындарына ихлас ҡушыла. Малайҙарҙың атайға, ир-атҡа оҡшарға тырышыуы тәбиғи рәүештә бик иртә уяныып, бүтәндәрҙән өлгө алып ҡабатлау, ололар өйрәтеүе һөҙөмтәһендә нығына.

▸ **Малайҙар психологияһындағы, уларҙың холоҡ-фиғелендәге ниндәй үҙенсәлектәргә ҡарата үтә иғтибарлы булыу кәрәк?**

Бәләкәйҙән үк малайҙарҙың телмәре аҡрынырак үҫешә, шуның өсөн уларҙы ғаиләлә күберәк һөйләндереү юлдарын табырға кәрәк. Ә бына һан, күләм, арауыҡ кеүек математик төшөнсәләрҙе улар тиҙерәк үҙләштерә, тап шуға күрә талантлы физик-математиктар, инженер-конструкторҙар башлыса ир затынан була. Һәләте һиҙемләнгән баланы мөмкин тиклем иртәрәк өйрәтә башлау фарыз, быға мин үҙ тәжрибәмдә лә инандым. Информатика, математика өлкәһендә үҙ һөнәрен тапҡан улым алты йәшендә үк арифметик ғәмәлдәрҙе аңлы рәүештә ыңғай һәм тиҫкәре һандар менән башҡара ала ине.

Малайҙарҙың холоҡ-фиғеленә килгәндә, уларға физик әүҙемлек, тик тора алмаусанлыҡ (быны гиперхәрәкәтсәнлек тип тә атайҙар) хас. Улар, нисек тә булһа күңеле теләгәнде эшләргә ынтылып, ололар ҡуйған сиктәрҙән сығып китеп, "артыҡ" үҙаллы эш итергә әүәҫ. Үҫмерлек осоронда был сифат көсәйә барып, малайҙарҙың үҙһүҙлелеге, тыңлашмаусанлығы улар менән ололар араһында көсөргәнешлек барлыҡҡа килтерә. Өҫтә-үенә, малайҙар үҙҙәрен ҡыҙҙарға ҡарағанда күпкә "һуғышсаныраҡ", агрессивыраҡ тота. Быының сәбәбе - ирҙәрҙең йәмғиәттә меңәр йылдар буйы ҡабатлана килгән социаль роле талап иткән сифаттарҙың уларҙың тәбиғәтенә, генетик хәтеренә һеңеүе булһа, малайҙар мөхитенә хас бер-берең менән ярышыу, өҫтөнлөк алыу, беренсе булыу, лидерлыҡҡа өлгәшеү өсөн көрәш конфликтлы ситуацияларҙы йышыраҡ тыуҙыра. Тап шуның арҡаһында тәүҙә балалар баҡсаһында, ә аҙаҡ мәктәптә ошондай холоҡло малайҙарҙы тәрбиәсе-уҡытыусылар "проблемалы", тип атайҙар ҙа инде.

▸ **Ә беҙ бындай малайҙарҙы дөрөҫ тәрбиәләйбеҙме һуң?**

Бар осраҡта ла әүҙемлек күрһәтеп, мин-минлеген алдараҡ йөрөткән, шау-шыу сығыуҙан ҡурҡып бармағандар беҙҙең тәрбиә системаһында кире баһаланып, уларҙың бойондороҡһоҙлоғо мөмкин булған бөтә ысулдар менән ғаиләлә лә, мәктәптә лә аяуһыҙ баҫтырылып, юҡҡа сығарылып барыла. Дөрөҫөн әйткәндә, беҙҙә егетлекте һүҙ һөйләп кенә тәрбиәләргә тырышыу өҫтөнлөк алған. Шым ғына йөрөп, конфликтлы ситуацияларҙан ситтә ҡала килеп, хәүефле мәлдәрҙә гелән боҫоп ҡалырға өйрәнгән ир-атҡа еңеүсе психологияһын бер нисек тә һеңдереп булмаясаҡ. Исмаһам, халҡыбыҙҙың "Малай булһа - шуҡ булһын, ике күҙе ут булһын", тигәненә ҡолаҡ һалһаҡ ине лә бит. Малайҙарҙың әүҙемлеген бишектән тиерлек сикләй барып, тыйыу һәм яза биреү юлы менән ысын ир-егетлекте тәрбиәләп буламы ни ул! Шунан килеп, эй аптыраған булабыҙ, башҡорт ирҙәре араһында лидерҙар аҙ, әүҙемлек етешмәй, битарафлыҡ көслө, тип. Бала саҡтан башҡалар менән көс һынашмай, аҙмы-күпме яғалашмай, еңеү-еңелеү тойғоһон татымай, ауыртыу-ҡурҡыуын йүгәнләй алырға күнекмәгән малайҙан, үҫеп, буй еткәс, үҙен генә түгел, көсһөҙөрәк заттарҙы ла ҡурсалай алырлыҡ ир-егет сығырмы һуң? Айһай, юҡтыр.

▸ **Ғаиләлә ысын ир-егетлек тәрбиәһен ҡасаныраҡ башлау ҡулай булыр?**

Билдәле педагог А.С. Макаренконың тәрбиә асылы тураһындағы мәҡәләләренең береһендә шундай диалог бирелгән:

- Баланы ҡасан тәрбиәләй башларға кәрәк?
- Балағыҙға нисә йәш һуң?
- Әле өс йәше генә тулды.
- Һеҙ балағыҙҙы тәрбиәләүҙә теүәл 3 йылға һуңға ҡалғанһығыҙ!

Малайҙарҙа буласаҡ ир-егеткә хас сифаттарҙы мөмкин тиклем иртәрәк тәрбиәләй башлау мөһим. Балалар үҙҙәренең малай йәиһә ҡыҙ затынан булыуын өс йәшкә тиклем үк айыра башлап, кешеләр араһында үҙ енесенә тәғәйен ролде ете-һигеҙ йәшкә тиклем аңлы рәүештә үҙләштерә ала. Тап ошо осорҙа "ысын малай", "ысын ҡыҙ" тәрбиәһенә ныҡлы нигеҙ һалына. Малайҙар аңына көслө, етеҙ, үҙаллы, ныҡышмалы һәм ихтыярлы булыу, ауыртыуға түҙеү, сыҙамлылыҡ күрһәтеү, берниҙән дә ҡурҡмау, биргән һүҙеңде ныҡ тотоу һымаҡ төшөнсәләрҙе һеңдереп, ошо юҫыҡта уларҙың ғәмәлдә күҙәтелгән ҡылыҡтарын, тойғо-кисерештәрен баһалап, билдәле йүнәлеш биреп тороу фарыз. Иң ярамағаны - малайҙарҙың инициативаһын һәр осраҡта ла һүндерә килеп, рөхсәт



# ИР БАЛАЛА...

## нисек тәрбиәләргә?

итмәү, тыйыу алымдарын йыш ҡулланыуҙыр.

Үҫмерлек осоро еткәс, бигерәк тә малайҙарҙың организмы енси өлгөрөү стадияһына күсеү менән, уларҙың ир-егеттәргә оҡшарға тырышыуы яңы психологик сифатҡа әйләнә. Тап ошо осорҙа физкультура һәм спорт, техник һәм хеҙмәт тәрбиәһе аша үҫмерҙәрҙә ир-егеттәргә хас булған сифаттарҙы үҫтереү өсөн ыңғай шарттар барлыҡҡа килә. Шул уҡ ваҡытта үҫмерҙәрҙе ялған кумирҙар өлгәһөнән, ялған мәҙәниәт һәм тышҡы яҡтан ылыҡтырғыс стереотиптарҙан (тәмәке тартыу, һүгенеү, тупаҫ булып ҡыланыу һ.б.) ҡурсалау маҡсатында улар менән дуҫтарса, ололарса аңлашыу, уларҙы тиң күреп аралашыу ысулдарын табыу мөһим. Һәр малай ир-егетлек мәктәбе һабаҡтарын ваҡытында алған хәлдә генә башҡорт араһында лидерлыҡҡа ҡытлыҡ булмаҫ.

**Ир-егетлек тәрбиәһендә атайҙарҙың роле нисек икән?**

Психологтар күҙәтеүенә ярашлы, әгәр атай кеше ғаиләһен улы биш йәш тулғансы ташлап китһә, улы егет ҡорона инеүгә уның үҙ мөмкинлектәренә ышаныу кимәле тулы ғаиләлә үҫкәндәрҙекенән күпкә түбәнерәк булып, йәштәштәренә бәйлелеге, буйһоноусанлығы ныҡ һиҙелә. Ғөмүмән, балаларҙың енескә ярашлы ролдәрҙе үҙләштереүендә атай йоғонтоһо көслөрәк. Психологтар, атай кешенең ҡыҙ балаға ҡарата икенсерәк мөнәсәбәте ҡыҙҙарға ғына хас булған холоҡ-фиғелдең формалашыуына булышлыҡ итә, тип раҫлай. Ә бына малайҙарҙың аңында ир кеше образы башлыса аталарына оҡшаш булып, киләсәктә уның ғаиләһендәге ролен билдәләйәсәк. Халҡыбыҙҙың "Атанан күргән - уҡ юнған", тиеүе лә ошо фекерҙе ҡеүәтләүсе бер дәлилдер. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, һуңғы йылдарҙа яңғыҙы ғына бала тәрбиәләүсе әсәләр арта барғанлыктан, байтаҡ малайҙар атай тәрбиәһенән мәхрүм. Ошоға өҫтәп, тулы ғаиләләрҙә лә атайҙарҙың бала тәрбиәләүҙә башлыса ҡатындарына йөкмәтеүен, ә мәғарифта шул уҡ ҡатын-ҡыҙҙың өҫтөнлөк итеүен иҫәпкә алһаҡ, ир тәрбиәһенең юғала барыуын инҡар итеп булмай.

**Йәмғиәттә ирҙәр шәхесендә ҡатын-ҡыҙға хас сифаттар арта барыуы, (уларҙың холоҡ йомшаҡлығы, үтә наҙлыға әйләнә башлауы, бәҙәүлығы, ихтыярһыҙлығы, лидерлыҡтан ваз кисеүе һ.б.) күҙәтелә. Ирҙәргә "ҡатынлашыу" ҡурҡынысы янамаймы һуң?**

Ир-егеттең "феминизация" тип аталған заман йоғонтоһона бирелә барыуы бер кемгә лә сер түгел. Тәрбиә өлкәһенең тулыһынса тиерлек ҡатын-ҡыҙ ҡулында булыуын алдараҡ билдәләп киткәйнек. Ғаиләлә, балалар баҡсаһында, мәктәптә ҡатын-ҡыҙ өҫтөнлөк иткәс, тәрбиә, ғәмәлдә, ҡатын-ҡыҙҙарса башҡарыла. Улар малайҙарға ла, ҡыҙҙарға ла бер үк талап ҡуя, бер төрлө өлгөгә ярашлы тәртип урынлаштыра, тәрбиәләнеүселәрҙең үҙҙәрен башлыса ҡатын-ҡыҙ хуп күргәнсә тотоуын теләй, тәьҫир итеү ысулдары ла берҙәй ҡала бирә. Коллективта тыңлаусанлыҡ, баҫалҡылыҡ, буйһоноусанлыҡ өлгәнө булған ҡыҙҙар лидер ролендә йөрөй. Күп йылдар буйына ҡабатлана килгән талаптар малайҙар аңына үҙҙәрен тап ҡыҙҙарса тотоу ҡалыбын һеңдерә. Тап ошо сәбәптәр арҡаһында малайҙар тәбиғәтенә хас булмаған сифаттар уларҙың формалаша барыусы шәхесендә урын ала ла инде. Бында ҡатын-ҡыҙҙың тәрбиәүи потенциалы һис тә инҡар ителмәй, ләкин, һәр хәлдә лә, ир менталитетында булғанды ҡатын-ҡыҙ ҡабатлай ҙа, махсус рәүештә тәрбиәләй ҙа алмаясаҡ. Һығымтабыҙ шул: малайҙарҙы, һис юғында, ирҙәр күберәк булған техника, хәрби эш, спорт, туризм кеүек өлкәләргә мөмкин тиклем иртәрәк йәлеп итеү отошло. Мәктәптәрҙә сыҙамлылыҡ, ҡыйыулыҡ, физик әҙерлек, ихтыяр көсөн, ойоштороу һәләтен, лидерлыҡ сифаттарын талап иткән тәрбиәүи сараларҙы бермә-бер арттырыу зарур.

**Хәҙерге заманда ҡайһы бер ирҙәрҙең енси ориентацияһы үҙгәреүе ғәҙәти күренешкә әйләнә бара. Быны кешенең тәбиғи хоҡуғына тиңләп, ирҙәр ирһөйәрлеген (гомосексуализмды) законлаштырған илдәр ҙә байтаҡ хәҙер. Малайҙар тәрбиәһендә ошо күренеште иғтибарға алыу урынлымы икән?**

Ирһөйәрлек тәбиғәт ҡанундарына, кешеләрҙең ғөрөф-ғәҙәттәренә, йолаларына, ғөмүмән, йәшәйеш ҡағиҙәләренә бер нисек тә тура килмәй. Ер йөҙөндәге барса диндәр был күренеште оло гонаһ, тип иҫәпләп, кешелек тарихы дауамында тыйыу әмәлен хуп күргән. Ысынлап та, гомосексуализм фән тарафынан да аномаль, бөтөнләйе менән нормаға һыймаған мөнәсәбәт, тип нарыҡлана. Психология, психопатология күҙлегенән быны үҙенә күрә бер биопсихик ауырыу, тип ҡарау дөрөҫ булыр ине. Ә сир бар икән, ул дауалауҙы, профилактика сараларын табыуҙы талап итә. Әлбиттә, бында мотлаҡ көс ҡулланыу тураһында һүҙ бармай. Ирҙең - ир, ҡатындың ҡатын булып ҡалыуы кешелек өсөн уның тәбиғи ҡанундарын боҙмай, үҙен-үҙе һаҡлау сараһы икәнен иҫтә тоторға кәрәк. Ирһөйәрлеккә, ҡатын-ҡыҙҙың лесбий мөхәббәтенә ҡаршы сығыу дөйөм кешелектең дә, айырым халыҡтарҙың да социаль экологияһын таҙа тотоуға тиң. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, беҙҙең йәмғиәт менталитетына, Ислам диненә тура килмәгән ошо күренешкә беҙ күҙ йомоп ҡарарға өйрәнеп киттек. Әле һуң булмаҫ борон үҫеп килеүсе йәштәр араһында тейешле аңлатыу сараларын әүҙемләштереп, уларҙың шәхесендә гомосексуализмға ҡаршы иммунитетты ваҡытында булдырыу фарыз.

Бәҙри ӘХМӘТОВ.

МИНЕҢ ИР-ЕГЕТЕМ



# ЕҘНӘЛӘРҘЕ ЛӘ ҠОТЛАЙЫҠ!

**Ир-егеттәр тураһында берәй һүҙ әйт әле, тиһәң, бөтәһе лә атаһы, хәләл ефете, улы, ағаһы, ҡустыһы тураһында телгә ала. Ә бит уларҙан башҡа тағы ла кейәү, бажа, еҙнәй ҙә бар. Шул хаҡта иҫкә төшөп, хатымда еҙнәләрем тураһында яҙырға булдым.**

Ғаилә эсендәге мөнәсәбәттәр үҙгәреүсән инде ул. Әммә ҡатыны менән ярашып йәшәгәндә лә, көйөшкән саҡта ла балдыҙҙарына яҡшы мөнәсәббәтле, шаян-шуҡ еҙнәй булып ҡала белгән ир-егеттәр бар. Минең шундай дүрт еҙнәм бар ине, ҡыҙғанысҡа күрә, хәҙер ғаиләһе менән тормош һурпаһын эсергә теләгән икәүһе генә ҡалды. Ләкин береһе тураһында ла бер ауыр һүҙ әйтә алмайым, сөнки балдыҙҙарына улар һәр саҡ алсаҡ йөҙлө, мутлыҡтар уйлап табырға әҙер еҙнәләр. Хәйер, башҡаларҙың еҙнәләре нисектер, минекеләр алдында уйламайынса берәй һүҙ әйтергә, берәй хәрәкәт эшләргә шигәйеп торалһың. Сөнки улар шундуҡ һинең ҡылығыңды күҙгә элеп, берәй тос ҡына мәрәкәһен сәпәргә әҙер тора. Ә бер телгә эләнгәнде тиҙ генә онотторорлоҡ түгел, йылдар буйы хәтерҙәреңдә тотоп, кәрәкмәгән саҡта минең дә иҫкә төшөрөп алалар. Мәҫәлән, берәүһе миңә ике йәштәр булған саҡта өләсәйем кәзә тарағанда эргәһендә булып, ҡырын яткан кәзәнең имсәген уйнатып: "Кәзә, кәзә, кәзәкәй, "мәмәйҡаһы" бөләкәй", - тип һамаҡлап ултырыуымды һаманға тиклем онотмай. Ул кәзәләрҙе егерме йылдан ашыу аҫраған юҡ, ләкин мәрәкәһе ҡалды, хатта бөтәһе лә белеп бөттө инде хәҙер. Оялһаң да, еҙнәгә үсегеп булмай шул. Икенсе еҙнәм лаҡаптарҙы хәтергә төшөрөп тормаһа ла, арҡамдан һөйөп, исемемде үҙенсә генә боҙоп әйтеп, "Бажаға сәләм әйт", тиһә лә, йөрәк "жыу" итеп ҡала. Хәҙер берәй һүҙен табып, арттан йүгергән егеттәрҙе әсәй алдында телгә ала инде, тип, күҙҙе иҙәнгә төбәйһең дә, үҙең мәрәкә менән яуап ҡайтарырлыҡ уңайлы мәлде сабыр ғына көтәп, тынып ҡалаһың. "Балдыҙ" тип һирәк өндәшкән был еҙнәм атайҙарса яҡын, һәр эштә унан кәңәш һорарға, уйынлы-ысынлы һүҙҙәренән дә фәһем алырға була. Тағы ике еҙнәм ҡәйнәләренән алыҫта йәшәгәс, минең менән дә һирәк күрешәләр. Ләкин һирәк кенә ҡунаҡҡа барғанда ла, улар иртә таң менән башҡа һыуыҡ һыу ҡойоп уятырға, шәкәр урынына сәйгә тоҙ һалырға, сумкаға кирбес артмаҡлатып ҡайтарырға күп һорап тормай.

Бер уйлаһаң, ҡырҡ-иллегә еткән ирҙәрҙең ошо ҡылығы сабыйҙарса кеүек. Ләкин балдыҙ булғас, шундай еҙнәләрең булһын ул! Улар алдында балдыҙ ҡырын баҫмаһын, һүҙен үлсәп әйтһен, бит йыртыу менән шаян һүҙҙе айырырға өйрәнһен. Ата тәрбиәһе мөһим булған кеүек, еҙнә-еңгә тәрбиәһе лә кәрәкле. Еҙнә йә еңгә алдында, алҡауланып, әйткәнде тыңламай ултырып ҡара...

Хөрмәтле ҡатын-ҡыҙҙар, ошо байрам көндәрендә шундай шаян, мәрәкәсел еҙнәләрегеҙҙе тос ҡына берәй мәҙәк һүҙ әйтеп, ҡотларға онотмағыҙ.

Сәлимә БАТЫРОВА.
Өфө ҡалаһы.

✓ *Бала сағымды иҫләһәм, иң беренсе нәүбәттә кемдеңдер ағаһы әрменән ҡайтҡан мәлдәр күҙ алдына килә. "Әсәй, Шәфҡәт ағай армиянан ҡайтҡан!" тигән шатлыҡлы хәбәрҙе әйтә-әйтә күршелә йәшәгән дуҫтарыма йүгерәм.*



ӘРМЕ ЯҘМАЛАРЫ

***Иртән генә тороп тышҡа сыҡһам,***
***Күренеп тора Ирәндек үңере.***
***Егерме биш йыл хеҙмәт аҙ тимәгеҙ,***
***Егерме биш йыл - ирҙәр ғүмере...*** **- тип йырлана башҡорт халыҡ йыры "Әрме"лә. Һалдат йырҙары, уларҙың тик үҙҙәренә генә хас булған бәғзе нескәлектәре, үҙенсәлектәре хаҡында уйланған бер мин генә түгелмендер. Ҡайһыһын ғына алып ҡарама, тыуған иленә ҡарата булған эскерһеҙ һөйөү, туғандарын, дуҫтарын һәм, әлбиттә, һөйгән ҡыҙҙарын һағыныу хистәре менән һуғарылған ул йырҙар. Эйе, һалдат тыуған төйәгенә, унда ғүмер иткән ана шул яҡындарына ҡарата мөхәббәт тойғоһо менән яна, улар өсөн утҡа, һыуға инергә, хатта йәнен дә йәлләмәҫкә әҙер. Уйҙарҙы алыҫҡараҡ ебәреп, бына шул хаҡта фекерләп, "Ә беҙ үҙебеҙ ил һаҡсыларын яратабыҙмы?" тигән һорау хаҡында йыш ҡына уйланам. Хәрби хеҙмәттә сирек быуат үткән ғүмер дәүерендә халҡыбыҙҙың әрмебеҙгә булған ҡарашын, хөкүмәттең һәр әмерен һис һүҙһеҙ үтәргә бурыслы булған һалдат һәм офицерҙарға булған мөнәсәбәтен нәҡ барометр һымаҡ, үҙ булмышым менән тойоп йөрөгән кеше булараҡ тотондом ошо мәҡәләгә. Ошо көнгәсә әрмебеҙ ихатаһына яҡшы һүҙҙәр ташлаһалар, мин уны шәхсән үҙем хаҡында әйтелгән һымаҡ ҡабул итәм, ә инде хәрбиҙәрҙе әрләй башлаһалар, әйтерһең, минең үҙемде ҡыҙҙыралар... Егерме биш йылды, әлбиттә, әҙ тип әйтеп булмай. Шул ваҡыт эсендә илебеҙҙә булған күп кенә үҙгәрештәрҙең әрмебеҙҙә лә сағыла барыуы аныҡ ҡына күҙ алдымда. Мәҡәләмде "Һалдат йыры" тип атауыма ҡарамаҫтан, һүҙем, башлыса шул һоро шинелдәге егеттәребеҙгә, әрме мөхитенә ҡарашыбыҙ хаҡында барасаҡ, иншаллаһ.**

# ҺАЛДАТ ЙЫРЫ,

## йәки Ил һаҡлаусыларыбыҙға мөнәсәбәтебеҙ хаҡында һүҙ

### Бик йыш иҫкә алам...

Совет Армияһы һәм Хәрби диңгеҙ Флоты төҙөлгәнгә, ниһәйәт, йөҙ йыл да булып китте. 23 февралде элек тап ана шул Армиябыҙҙың көнө, тип атай инек. Хәҙер уны "Ватанды һаҡлаусылар көнө" тип исемләһәләр ҙә, миңә уның элекке атамаһы яҡыныраҡ һымаҡ. Башҡа һәр ойошмалар кеүек үк бихисап ыңғай һәм кире яҡтары булған, башлыса ир-ат затын тәшкил иткән шул мөхитте гел генә иҫкә алам, хатта ошоғаса төшөмә лә инә ул. Әрме хаҡында ниҙер иҫләй башлаһаң, бәғзе берәүҙәр "оноторға ла ваҡыттыр инде шул армияңды" тип әйткеләгәне лә бар. Әммә, ярты ғүмереңде тиерлек үткән хәрби тормош, ундағы һалдат һәм офицерҙар коллективы ҡапылда ғына онотола торған нәмә түгел икән шул.

Күңелем менән, иҫ белә башлағандан уҡ әрмеләмен, тиһәм дә хаталанмаҫмын. Хәйер, минең тиҫтерҙәрем барыһы ла бала саҡтан уҡ үҙҙәрен һалдат итеп тойоп үҫкән кешеләр инде. "Тыңламаһаң, ана, армияға алмайҙар, һалдат була алмайһың", тип, әсәләре шуҡ малайҙарын тыя торған мәл ине бит инде. Күп кенә хәҙерге йәштәргә әллә ни аңлайышлы ла булмауы мөмкин, әммә ул саҡта егет кеше өсөн армияға бара алмай ҡалыу ҙур ҡайғы булыуы оло кешеләрҙең һәммәһенең хәтерендәлер.

### Ауылға һалдат ҡайтты...

Бала сағымды иҫләһәм, иң беренсе нәүбәттә кемдеңдер ағаһы әрменән ҡайтҡан мәлдәр күҙ алдына килә. "Әсәй, Шәфҡәт ағай армиянан ҡайтҡан!" тигән шатлыҡлы хәбәрҙе әйтә-әйтә, мөмкин тиклем яңыраҡ кейемемде кейә һалып алып, күршелә йәшәгән Фәнил, Ишмөхәммәт дуҫтарыма йүгерәм. Улар менән бергәләшеп, өс йыл ярым әрмелә йөрөп ҡайтҡан Шәфҡәт ағайҙарға инәбеҙ. Беҙҙең Ринат дуҫыбыҙ бөгөн тантана итә. Беҙҙән бер башҡа юғарыраҡ һымаҡ итеп тоя ул үҙен, сөнки, алтынланып янған пряжкалы һары ҡайыш менән билен быуып, түшендә әллә күпме значоктар тағылған йәшкелт һоро төҫтәге һалдат кителе кейгән киң яурынлы "ыҙдарауай" һалдат - уның ағаһы. Шығырҙап торған йылтыр итектәренә, яурындарындағы төп-төҙ погондарына, бүрегендәге күҙҙең яуын алып торған ҡыҙыл йондоҙона ҡарап ҡыҙығабыҙ. Шәфҡәт ағайҙың әсәһе Сәкинә инәй, Сәрүәр еңгәһе ҡаҙан тирәһендә бөтөрөнә. Атаһы - Солтанхәмит олатай төпкө бүлмәлә намаҙ уҡый (моғайын, улы имен-һау ҡайтыуы шатлығына Аллаһы Тәғәләгә шөкөрана ҡылалыр). Һалдат ағай өйгә ингән малайҙарҙы күптән һағынып көткән ҡунаҡтай яҡты йөҙ менән ҡаршы ала. "Һай, Хәлил, был һинме? Ҡалай ҙурайып киткәнһең!.." Башҡаларҙы ла танып, "Был - Хөснитдин ағайҙың малайы ла баһа, ә быныһы - Яҡуп ағайҙыҡы..." тип, һәммәбеҙгә лә ниҙер ниҙер әйтеп, күрешеп ала ағайыбыҙ. Һалдат формаһынан тәмле хушбуй еҫе бөркөлә. Һәүетемсә ҙур ғына сумаҙанын асып, Шәфҡәт ағай беҙгә икешәр-өсәр бөртөк кәнфит өләшеп сыға. Һөйләшеүендә "конечно", "потому что", "значит", тигән һымағыраҡ урыҫса һүҙҙәр ишеткеләү ҙә беҙҙең өсөн ҡыҙыҡ. Урыҫ араһында оҙаҡ йөрөп, шулай үҙгәрә икән кеше әрмелә, тигән уй башта йөрөй. Ил һаҡсыһын шундай ҙурлап, башҡа ауылдаштар ҙа һалдат күрергә ингеләй...

Бөгөн был өйҙә генә түгел, гүйә бөтә ауылда оло байрам. Әсәйем, Шәфҡәт ағай хаҡында һөйөнсөләүемде ишеткәс тә, тиҙ генә самауыр ҡуя һалып, табала ниҙер шыжлатып, үҙенсә әҙерләнә башлай. Сөнки был ауылдың ғөрөф-ғәҙәте буйынса, тиҙҙән һалдат күрше-тирәләргә инеп, үҙе хәл белешергә тотонасағын белә ул. Әллә ни оҙаҡ та көттөрмәй, өйөбөҙҙөң ишеген шаҡып, өҫтөнә һоро шинель, башындағы һалдат бүреген бер аҙ маңлайына төшөрә биреп, бер яҡҡа ҡырынайтыбыраҡ кейгән, мыҡты кәүҙәле, шат сырайлы һалдат ағай килеп инә. Атайым, әсәйем уны ҡаршы ала, сәй эсергә ултырта. Бер аҙ ғына хәл-әхүәл белешкәс, ағайыбыҙ башҡа күршеләрҙе лә күрергә тип хушлашып сығып китә... Һалдат ағайҙарға һәр төрлө һорауҙар биргеләп йөҙәтәбеҙ. Үҙебеҙ "ҡасан ғына үҫеп етеп, "настаяшный" һалдат булырбыҙ икән", тип хыялланабыҙ.



Шәфҡәт ағай ярты йыл элек үк, йәғни, өс йылы тулғас, демобилизацияланып ҡайтырға тейеш булған. Бына шул ваҡыт аралығында (алты ай буйына!) хат-хәбәр килмәгәс, Сәкинә инәй ныҡ ҡайғыра ине. "Шәфҡәтем нишләп һаман ҡайтмай икән, ул ҡайтҡансы үлеп кенә ҡуймаһам ярар ине", тип илаулап һөйләнгәне хәтеремдә. Демократик Германияла урынлашҡан Варшава Договоры ғәскәре частарында хеҙмәт итеп йөрөгән һалдат һәм офицерҙарҙы Чехословакия ваҡиғалары башланып китеп, шундағы низағты баҫтырыу өсөн ҡулланғандары хаҡында һуңынан ғына белдек. Шул арҡала, ауылыбыҙҙағы Шәфҡәт, Исрафил ағайҙар, шулай уҡ Йылайыр районы, Ишҡужа ауылында йәшәгән Һөйөндөков Ҡәһәрмән ағайым һәм башҡа бик күптәр ярты йылға һуңлап демобилизацияланғандар икән. Был хаҡта атаәсәһенә үҙ ваҡытында хат яҙырға ла рөхсәт булмағандыр, күрәһең...Бына ошо бер ағайҙың миҫалында ауылға һалдат ҡайтҡан мәлде бәйән итергә тырыштым. Әйткәндәй, Шәфҡәт ағайыбыҙ, үткән йәй, етмеш берен тултырып, мәрхүм булып ҡалды. Ил алдындағы бурысын үтәп, әрменән ҡайтҡан бар егеттәрҙе лә ана шулай хөрмәт итеп ҡаршы ала ине халыҡ.

### Совет һалдаты образы

Һәр кемдең аңында Совет һалдаты образы идеаль кеше булып килеп баҫа. Һалдат кейемендәге кешенең һис бер кире сифаты юҡтыр, тигән инаныуҙа ине күпселек. Бер мәл кемдер әрменән ҡайтҡас, үҙенең хеҙмәт иткән часында булған бер һалдатты ауыр енәйәт өсөн яуапҡа тарттырғандары хаҡында һөйләгәйне. Әсәйем шул саҡ "Китсе, һалдат кеше улай булмайҙыр ул..." тип аптыраны. "Хәрби форма кейеү менән, уның эсендәге кешеһе үҙгәреп китмәй инде", тигәйне шул саҡ был хаҡта һөйләүсе ағай. Әммә минең барыбер быға ышанғым килмәне. Ә инде ниндәйҙер сәбәп менән әрмелә һәләк булып ҡалһа, һалдатты башҡа кешеләргә ҡарағанда ла нығыраҡ йәлләй инек. Әрмебеҙгә ҡарата булған бала саҡтағы бындай тойғолар барлыҡ оло быуын кешеләренә хастыр. Бөйөк Ватан һуғышы тамамланыуға ике-өс тиҫтә йылдар үтеүгә ҡарамаҫтан, немец фашистарын еңгән Совет һалдаты образы һәммә кешенең күңелендә хөрмәт һәм ихтирам тойғоһо уята ине.

Илле йылдарҙан ашыу элек булған ваҡыттарҙы иҫләй-иҫләй, бала сағыма "сәйәхәт"емде артабан дауам итәм... "Һалдаттар - хөкүмәтебеҙҙең ҡәҙерле ҡолдары ул", ти әсәйем хәрби кеше хаҡында. Әммә шул уҡ ваҡытта, ҡайһылыр республикаларҙа (айырыуса Балтика буйы илдәрендә) "оккупанттар" тип атап, урындағы халыҡтың совет һалдатына ҡарата насар мөғәмәләлә булыуы хаҡында ишетеп, ифрат та йәнебеҙ көйә. Ни баҙнатың етеп, һалдат кешегә ҡарата алама мөнәсәбәт күрһәтеү мөмкин!..

### Ололар хөрмәтен татыныҡ

Оло йәштәге ағайҙар һәм апайҙар хәрбиҙәргә элек ниндәй мөнәсәбәттә булыуы хаҡында ла әйтмәй китә алмайым. Үҙем оҙайлы хәрби хеҙмәтемде башлағас, был айырыуса ныҡ тойола ине. Тыуған яғыбыҙға ялға мотлаҡ хәрби формала ҡайта торғайным. Сираттағы отпуск мәлендә ҡала-ауыл аралығындағы автобустарҙа аяғөҫтө баҫып, тәҙрә аша тирә-йүнде, тәбиғәтте күҙәтеп барыуҙы ла әллә ни күреүем хәтеремдә. Шул саҡтағы бәғзе әбейҙәрҙең "Улым, ултыр, арып килә ятаһыңдыр", тип йәп-йәш хәрбигә урын бирергә маташыуҙарын иҫләп, күңелдәрем тулып китә. Кемеһелер үҙенең әрмеләге улын, йә иһә башҡа туғанын минең урында итеп күҙ алдына килтереп, йәлләй торған булғандыр инде. "Юҡ, инәй, рәхмәт, мин арыманым", тип яуап биргәндән һуң, оло кеше үҙенең һуғышта һәләк булып ҡалған берәй туғанын, йә иһә хәҙерге мәлдә хеҙмәт итеп йөрөгән ейәнен иҫкә ала... Бәғзеләре хатта "Минең әрмәйәләге улымды - Сәйфулламды күрмәнеңме", тигән һымаҡ һорау ҙа биреп ҡуйғылай. Вокзалдарҙа автобусҡа билет алырға касса янына сиратҡа килеп торһаң, ололар (хатта йәштәр ҙә!) "Военный кеше нишләп уширитта баҫып тора ул?" тип һөйләшә-һөйләшә, йә "Мин үҙем дә заманында хеҙмәт иткән кеше, әйҙә, һалдат, үт", тип сиратһыҙ үткәреп тә ебәрә. Автобус-фәләнде көтмәй, ҡайҙалыр барыр өсөн, йыш ҡына юлға сығып торған мәлдәр ҙә булғылай. Бындай осраҡтарҙа ла оҙаҡ көтөргә тура килмәй, ниндәй ҙә булһа берәй "попутка" машина килеп тә туҡтай. Кәрәк урынға еткереп төшөрөп ҡалдырған өсөн хатта аҡса ла алмауҙары хаҡында ул саҡтағы хәрби хеҙмәттә булған кешеләр барыһы ла иҫләйҙер, моғайын.

Күпмелер ваҡыт Дағстанда Буйнакск тигән ҡалала булырға тура килгәйне. Баҙарға барһаң, һатып ултырыусы ирҙәр йә ҡатын-ҡыҙҙар ҡарбуҙ-маҙарҙы бушлай биреп тә ебәргеләгәненә ғәжәпләнәһең. Үҙеңә ҡарата шундай яҡшы мөнәсәбәтле булған халҡыңа хөрмәт һәм ихтирам тойғоһо тағы ла арта. Ул саҡтарҙа хатта урамдағы һәр төрлө хулиган-маҙар ҙа хәрби формалағы кешегә әллә ни бәйләнеп бармауын иҫләйем.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ,**
**отставкалағы подполковник.**

**(Дауамы бар).**

**✓ *Мин ир-егеттәрҙә юморҙы аңлай белеүен хуплайым. Азамат холҡо менән бик алсаҡ, шаяртырға әүәҫ. Спектаклдәрҙә лә ҡайһы саҡта шундай итеп уйнап ташлай, сәхнәлә үҙемдең көлкөм килеп китә. Ә тормошта ул бик етди кеше.***



*ҠЫҪҠА ӘҢГӘМӘ*

# ҒАИЛӘ БӘХЕТЕ...

## бер уйлы булыуҙа ул

**Башҡорт театрҙарында эшләгән актерҙар араһында ғаилә парҙары ла байтаҡ. Тормошта ла, ижадта ла - бергә, тиҙәр, ғәҙәттә, ундайҙар хаҡында. Стәрлетамаҡ башҡорт драма театры актерҙары Зөлфиә менән Азамат Хәлиловтар ҙа шундайҙар рәтенән. Төрлө спектаклдәрҙә, "Күңелле йәшәйбеҙ" телевизион проектында ирле-ҡатынлы булып уйнаған Хәлиловтар тормошта ниндәй, актерҙар өсөн бергә эшләүҙең ыңғай яҡтары бармы? Ошо һорауҙарға Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Зөлфиә ХӘЛИЛОВА яуап бирә.**



**➔ "Күңелле йәшәйбеҙ" проекты - Стәрлетамаҡ театры актерҙарын тамашасыларға тағы ла яҡынайта төшкән аҙым булды. Һеҙҙе республиканың төп театрында уйнаған ҡайһы бер артистарға ҡарағанда ла яҡшыраҡ танып-беләләр. Уйын менән тормошто бутап, Хәлиловтар ғаиләһен тап телевизорҙағы кеүек күҙ алдына килтереүселәр барлыҡҡа килер, тип хәүефләнмәйһегеҙме?**

- "Күңелле йәшәйбеҙ"ҙең сюжетында төрлө ҡыҙыҡ ваҡиғалар, көләмәстәр ята. Ошо ваҡиғаларҙа сағылған тема тәьҫирлерәк булһын өсөн ошондай образдар - усал, хәйләкәр ҡатын, үтә шаян ир һ.б. уйлап табылған. Ә тормошта беҙ бөтөнләй икенсе, холоҡтарыбыҙ ул образдарға оҡшамаған. Туғандар, дуҫтар, таныштар беҙҙе башҡа итеп белә. Мин ир-егеттәрҙә юморҙы аңлай белеүҙ, тормошҡа юмор аша ҡарай белеүҙ сифатын хуплайым былай. Азамат холҡо менән бик алсаҡ, шаяртырға әүәҫ. Спектаклдәрҙә лә ҡайһы сакта шундай итеп уйнап ташлай, ярамаһа ла, сәхнәлә үҙемдең көлкөм килеп китә. Ә тормошта ул бик етди кеше. Ғаиләләге мөнәсәбәттәр ҙә башҡа. Көнкүрештә бар нәмәне лә ҡатмарлаштырып ебәрә торған ғаилә түгелбеҙ, хатта тауыш күтәреп әрләшкәнебеҙ ҙә юҡ. Һәр хәлдә, мин уның машинаһын, ул минең аш-һыуымды тикшереп, нисә улай, нишләп былай түгел, тип ултырмайбыҙ.

Был проектта ғына түгел, сәхнәлә лә пар партнер булып, ирле-ҡатынлы булып уйнаған спектаклдәр байтаҡ булды. Яңы ғына "Ҡатын түгел - аждаһа" тигән комедияны сығарҙыҡ, халыҡ бик ыңғай ҡабул итте уны.

**➔ Ни өсөн спектакль "Ҡатын түгел - аждаһа" тип атала? Башҡорт халҡында, ғөмүмән, ҡатын кешене ундай һүҙҙәр менән атау күренеше юҡ бит?**

- Исеме менән баштан уҡ килешмәгәйнек тә, хәҙер шул көйө китте инде. Исмаһам, "Ҡатыным - алтыным" тип атайыҡ, тип тәҡдим иткәйнек, режиссер ҙа килешкәйне. Сюжеты буйынса ла исеме тура килмәй, унда "аждаһа" ҡатын-ҡыҙ тураһында һүҙ бармай, ә хәйлә менән ирен аҡылға ултыртҡан ҡатын тураһында спектакль. Әйткәндәй, Стәрлетамаҡ театры 26-28 февралдә Өфөгә гастролдәр менән бара. Яңы, матур спектаклдәр алып киләсәкбеҙ, "Ҡатын түгел - аждаһа!"ны ла күрә аласаҡһығыҙ.

**➔ Һеҙ бер нисә тапҡыр иң яҡшы ҡатын-ҡыҙ роле тигән номинацияларға лайыҡ булған актриса. Ҡатын-ҡыҙ характерҙарының иң үҙәлдәрен һынландырған кеше булараҡ, тормошта ҡатын-ҡыҙға иң кәрәкле төүге сифат, тип нимәне билдәләр инегеҙ?**

- Актриса булараҡ, ниндәйҙер ролде биргәндәр икән, һин уны тулыһынса өйрәнергә, асырға һәм, кәрәк сакта, аҡларға ла тейешһең. Һәр актер үҙ геройының адвокаты, тип юҡҡа әйтмәйҙәр, кире герой тиһәләр ҙә, уны ла бит ошо хәлгә ниндәй сәбәптәр, ваҡиғалар этәргән. Геройыңды аңлау өсөн кешенең психологияһын белергә кәрәк. Минең бөтөн ролдәрем дә тамашасының күңеленә юлын тапҡан, тип әйтә лә алмаҫмын, әммә төптән уйлап, орлоғона төшөп асһаң, уны тамашасы ла ярата. Өйҙә лә һөйләшәбеҙ роль тураһында, кешеләрҙең холҡон да өйрәнәм. Ир ҡатыны, әсәй булараҡ та кеше психологияһын белеү, аңларға тырышыу ярҙам итә.

**➔ Ғаилә парҙарының театрҙа бергә эшләүенең ыңғай яҡтары күпме?**

- Стәрлетамаҡта театр асылғас та, уҡытыусыбыҙ Илшат Йомағоловтоң саҡырыуы һәм фатиhаһы менән килгәйнек. Ижад итер, балалар үҫтерер өсөн бик уңайлы ҡала булып сыҡты Стәрлетамаҡ. Азамат Башҡорт дәүләт академия драма театрында эшләп йөрөгән еренән килде бында. Хәҙер 27 йыл сәхнәләбеҙ. Шуға инанғанмын - иң бәхетле актер ғаиләләре генә бергә эшләй. Мин үҙебеҙҙе шундайҙар рәтенә индерәм. Актер өсөн бергә эшләү ныҡ отошло. Илшат ағай Йомағолов та гел әйтә ине, яратыу яратыу менән, әммә ғаиләлә ир менән ҡатынды тормошҡа бер төрлө ҡараш бәйләй. Был һүҙҙәр менән дә килешәм. Рәхәтләнеп эшләп, бергәләп ҡайтып инәһең, өйҙә лә шул бер эште һөйләйһең. Әгәр ҙә ирем театрҙы яратмаһа, минең һөнәремде аңламаһа йәки мин актер иремдең ҡыҙыҡһыныуҙарын тоя алмаһам, йәшәүе ауыр булыр ине. Өлкән ҡыҙыбыҙ Зилиәнең актриса булып китеүендә лә беҙҙең бергә эшләүҙең әҙемтәһе барҙыр. Бер хәлде йыш ҡына иҫләп алам. Театр асылған ғына мәл, рус театры менән бер бинала, бергәләшеп эшләп йөрөгән ваҡыт. Спектакль артынан спектакль ҡуябыҙ. Зилиәгә 3 йәш, уны йышыраҡ күршеләргә ҡалдырып китәбеҙ. Бер көн һуңлап ҡына ҡайтып индек тә, балаға тейешле иғтибар ҙа бүлмәйенсә, кухняла ашарға бешерәбеҙ, хисләнеп һаман да эште һөйләшәбеҙҙер инде. Ҡараһаҡ, ишек төбөндә илап тора был. Ул заманда ҙа бөгөнгө кеүек пакеттар юҡ, целлофан ҡыптырға кейемдәрен һалып алған булған. "Эш һөйләйһегеҙ ҙә, эш һөйләйһегеҙ, китәм", - ти. Саҡ яҙып алдым балабыҙҙы. Әммә театрға йөрөргә яратты бәләкәй сағынан, әсәй, эшкә барабыҙмы, тип кенә тора ине. Шул тиклем баланы театр менән "ағыулағанбыҙ". Мәктәптә имтихандарын һәйбәт бирҙе, тик сәхнә тураһында хыялланғас, башҡа уҡыу йорттарына документтар тапшырып та торманы. Айһылыу башҡараҡ, әле 9-сы класта уҡый. Геолог булам, ти, шулай ҙа ҡайһы берҙә: "Әсәй, мин бит барыбер ижади кеше", - тип ҡайта мәктәптән. Һәләте бар, үҙенең теләге булмаһа, бармаҫ артислыҡҡа. Кейәүебеҙҙең дә актер булыуына, икеһенең бер театрҙа эшләүенә ҡыуанып бөтә алмайбыҙ. Өләсәй ҙә булдым, шөкөр. Скайптан һөйләшһәк, ейәнебеҙ ҡулын болғап беҙҙе саҡырып илай. Ундай мәлдәрҙә үҙебеҙ ҙә илай яҙып, Азамат менән ҡалтырап ултырабыҙ бер-беребеҙгә йәбешеп. Беҙҙе таный башлағас, бигерәк һағындыра ейәнебеҙ.

**Ләйсән НАФИҠОВА**
**әңгәмәләште.**

*МИНЕҢ ИР-ЕГЕТЕМ*



# БЕРЕҺЕ ИР БУЛҒАНСЫ...

## икенсеһе ер булһынмы?

**Минең ир-егетем минең хыялымда ғына йәшәй, сөнки ундай кеше донъяла юҡтыр, тип уйлайым. Ир-егет хаҡында хыялланыр йәш тә үткән, ир күрмәгән, уларҙы белмәгән ҡатын да түгелмен, ләкин улар йә минең туғандарым, йә дуҫтарым, йә әхирәттәремдең ирҙәре...**

Улым булманы инде. Аллаһы Тәғәлә бойороп, ҡыҙыма аҡыллы кейәү тап булһа, уны улым урынына күрер инем, тип хыял итәм, бирһен Хоҙай. Бая һанап кителгән ирҙәрҙең барыһы ла яҡшы кешеләр, тик береһе лә минең өсөн идеал түгел. Ә үҙемдең ир... Димсе һүҙенә бирелеп, ғүмер уртаһында донъя ҡорорға йөрьәт иткән ике яңғыҙаҡтың мөхәббәтһеҙ, шыҡһыҙ донъяларынан ҡасып, ышыҡ эҙләргә маташыуы булдымы был - әле лә аңламайым. Ирем малай көттө, сөнки тәүге ҡатынынан өс ҡыҙы бар ине инде. Ҡыҙ балабыҙ донъяға килде. Сараһыҙҙың көнөнән түгел, сарсағандан ятапты уны атаһы. Теге әсәү өлөшөнә лә тейешле, йөрәк боҙон иретерҙәй өслөтә наҙ менән. Әйтерһең дә, күңел төпкөлөндә йәшеренгән йөрәк йылыһының сығыр юлын ошо сабыйҙа күрҙе. Әйтерһең дә, һуңғы һөйөүен ошо сабыйына инсеәләне. Уның тап ошо сифаты иремә ҡарата күңелемдә ҡалған иң рәхмәтле, онотолмаҫ берҙәнбер тойғо. Башҡа тойғолар үҙенән-үҙе томан кеүек таралып юҡҡа сыҡтылар. Ирҙәрсә ҡатылыҡ, сабырлыҡ, нимәгә тотонһа, шуны булдыра алған үҙлеге ағыулы шыйыҡса шешәһе төбөндә көнләп түгел, сәғәтләп юҡҡа сыға барҙы. Ҡуйған инемде гәрселләнеп ситкә этәрҙе, "үҙем", тине - үҙлеге юҡ ине инде..

...Ҡыҙ бала аңында ир-егет темаһы донъяға тыуып, иҫ белә башлағандан яралалыр. Иң тәүҙә әсәһе кеүек үк яҡын һәм ҡәҙерле, көслө һәм ышанысы атай образында. Буй еткереп, тормош юлдашы һайлар ваҡыт етһә, ҡыҙ бала үҙе лә аңғармаҫтан, атаһына оҡшағанды эҙләр, тигән бер һынамыш бар. Кешелекле, балаһы хаҡына йәнен бирергә лә әҙер булған атайҙар күп булһа ла, идеаль ир-егет тип әйтерлектәре һирәк, үкенескә. Ә ни өсөн? Сөнки урта ҡул ғына бәрәүҙән дә камил ир "яһап" ала белгән ҡатын-ҡыҙ ҙа һирәк күренеш шул беҙҙә. Теләһә ниндәй ауырлыҡтарҙы күтәрер иңебеҙ ҙә бар, арҡырыны буй һалырға ла көсөбеҙҙән килә, иҫ китмәле сабыр, түҙем дә үҙебеҙ, тик ябай ғына бер ирҙән идеаль тормош юлдашы яһап алырға ғына белмәйбеҙ. Тап ана шул етешһеҙлек булған ғына ҡеүәттәребеҙҙе юҡҡа сығарып, тормошобоҙҙо селпәрәмә килтерә ала торған иң ҙур хәүефтер. "Ирҙе ир иткән дә, ер иткән дә - ҡатын" тигән мәҡәлде ишетһәм, шуға ла үҙемде гәйепле тойоп, йәнем әрнеп китә. Ошо юҫыкта күптәнге таныш ҡатын әйткән тағы бер мәҡәл иҫкә төшә. Ире боларып, эсеүенән туктай алмағас, көрәшә барып сиргә һабышҡан был ҡатын, ниһайәт, олоғая төшкән йәшенә лә ҡарамаҫтан, айырылып ҡуйҙы. "Ул ир булғансы, мин ер булаһым юҡ", тигәйне ул ҡырт киҫеп. Ул ҡатын да хаҡлы бит, уйлап ҡараһаң. Уның да бит нисек тә иҫән-һау ҡалырға, тормоштан ҡыуаныс табырға, балаларына терәк булып йәшәргә хаҡы бар!

**Рәсимә ТАҢАТАРОВА.**

✓ Ир-егет ниндәй булырға тейеш, тигән һорау бирһәләр, һис икеләнмәйенсә: "Минең атайым һымаҡ", - тип яуаплайым. Сөнки үҙ-үҙемде белә-белгәндән ул ир-егеттең идеаль образы булды һәм шулай булып ҡала ла.



ИНТЕРНЕТТАН



# СТРЕСС ЙОҒОШЛОМО?

■ Калгари университеты тикшеренеүселәре ҡыҙыҡлы асыш яһаған: стресс тойғоһо кисергән кеше менән аралашыусыларҙың үҙҙәрендә лә был тайпылыштың билгеләре күренә башлай икән. Баҡтиһәң, беҙҙе уратып алған кешеләрҙән килгән стресс сигналдары мейелә үҙгәрештәр булдыра һәм ул был стресты үҙе кисергән кеүек тоя башлай. Ғалимдар был күренеште сысҡандарҙа һынап ҡараған. Бер ситлектә йәшәгән ике сысҡандың береһен алып, стресс кисерергә мәжбүр итәләр һәм кире ситлегенә ҡайтаралар. Артабан эксперттарға уларҙың мейе күҙәнәктәрендә барған реакцияны тикшерергә генә ҡала. Ике сысҡандың да мейеһендәге үҙгәрештәр бер төрлө барыуы асыҡлана. Тимәк, стресс бер сысҡандан икенсеһенә күсә ала. Процесс былайыраҡ бара: тәүге сысҡандың мейеһендәге нейрондар хәүеф сигналдары тарата башлай. Был сигналды уның эргәһендәге сысҡандың мейеһе ҡабул итә, ул үҙ сиратында, башҡаларға тапшыра. Һаҡлаусы эволюция механизмы был. Был кешеләрҙә лә ошо рәүешле эшләй, тип белдерә ғалимдар. Шуныһы ла ҡыҙыҡ: стресс йоғонтоһо тәьҫирен кире ҡайтарырға була, бының өсөн стресс кисергән сысҡанға сәләмәт сысҡандар менән "аралашыу" ҙа еткән. Тик был инә сысҡандарҙа ғына күҙәтелгән.

■ Ҡаршы енес вәкилдәре менән осрашыуҙарға йөрөргә яратҡан кешеләр була. Британия ғалимдары әйтеүенсә, таныш булмаған кеше менән беренсе тапҡыр осрашыу кеше организмында адреналин бүленеп сығыуға этәрә, уның көсө парашют менән һикергәндә алған тойғоларға тиң икән. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусыларға йөрәк ритмы мониторы беркеткәндәр. Уларға парашют менән һикерергә, ҡорос арҡан буйлап төшөргә, осрашыуға барырға тәҡдим ителгән. Парашют менән һикергәндәр һәм осрашыуға барғандарҙың пульсы тигеҙ булып сыҡҡан. Өҫтәмә рәүештә ғалимдар 2 мең кешенән һорау алған. Уларҙың яртыһы тәүге осрашыуҙа борсолоу кисереүен әйткән. Һәр алтынсыһы осрашыу алдынан ныҡ тулҡынланған. Респонденттарҙың өстән бер өлөшө борсолоуын күтәрә алмай, хатта осрашыуға барыуҙан баш тартыуға барып еткән. Яуап биреүселҙең 45 проценты осрашыуҙа тотлоғоп йонсоған.

■ Менопаузанан һуң эстроген кимәле түбәнәйеү һөҙөмтәһендә ҡатын-ҡыҙҙарҙың ҡан баҫымы күтәрелә һәм аяҡ мускулдары һыҙлай. Спорт залында шөғөлләнеү был күңелһеҙлектәрҙән ҡотолорға ярҙам итеүе билдәле. Әммә бөтөн ҡатын-ҡыҙ ҙа күнекмәгә ваҡыт таба алмай. Ғалимдар спорт залға алмаш ябай төр тапҡан. Көн һайын баҫҡыстан йөрөргә кәңәш итә улар. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусылар аҙнаһына 4 тапҡыр булһа ла 192 баҫҡыс буйлап йәйәү менгән. Был 12 аҙна дауам иткән. Был ваҡыт эсендә гүзәл заттарҙың ҡан баҫымы нормаға килгән, бынан тыш, аяҡ мускулдары нығынған.

■ Ғалимдар билдәләүенсә, матди байлыҡҡа ынтылған кешеләр өсөн ғаилә бер ҡасан да беренсе урынға сыҡмаясаҡ. Бынан тыш, ундай кешеләр никахта үҙен бәхетле тоймай ҙа. Матди байлыҡ йәшәйештең башҡа мөһим өлкәләрен ҡыҫырыҡлап сығара икән. Аралашыу, конфликттарҙы хәл итеү, мөнәсәбәттәрҙең йылылығы икенсе планға күсә. Ир йәки ҡатын байлыҡҡа ынтыла икән, уларға кешеләргә ҡарағанда әйберҙәр күберәк күңел тыныслығы һәм ҡәнәғәтләнеү тойғолары килтерә. Шуға ла улар ғаиләне һаҡлап ҡалыу өсөн артыҡ көс түкмәй ҙә.

МИНЕҢ ИР-ЕГЕТЕМ

**"Билал ағай, Билал ағай, яҡында ғына айыу күрҙек!" Йәнтәслим сабышып килгән һыбайлыларҙы күргәс, йөрәк жыу итеп ҡалды. Иллә-мәгәр ҡобаралары осҡан быларҙың. "Йә, ҡайҙа күрҙегеҙ? Ҡабаланмай ғына һөйләп бирегеҙ", - тинем тегеләрҙең һәр береһен күҙҙән үткәреп. "Ана, йәйләүҙең кисеүен сыҡҡас, ҡарағай шырлығында! Емдеген ашап тора, әйҙә, мылтығыңды ал да беҙҙең менән, хәҙер күрһәтәбеҙ". Мин оҙаҡ уйлап торманым, яһауҙарҙы йыйнаным да, Туратымды менеп, елдерҙек шырлыҡҡа табан.**





# АЛТЫН АҠЫЛЛЫ АТАЙЫМ

Эх, Бөйрәкәйҙе йыҡҡан тайыштабандыр инде, өсөнсө көн инде таба алмай аҙапланғайныҡ, тип уйлай-уйлай, сабам тегеләрҙең артынан. Шулай уйланып елдерә торғас, ҡапыл айыу өҫтөнә барып сыҡҡанымды һиҙмәй ҙә ҡалғанмын. Емдеген ашап торған айыу тертләп китте һәм яман ҡаты итеп үкереп ебәрҙе лә, ажарланып миңә ташланды. Мин тиҙ генә атымды бороп, йән-фарман артҡа саптым. Дуҫтарымдың береһе лә күренмәй. Баҡһаң, теге шилмалар килгән саҡта уҡ ҡайһы юлдан ҡасырға икәнен самалағандар ҙа, мине ҡалдырып, төрлөһө төрлө яҡҡа сабышҡандар. Ә айыу ҡот осҡос ҙурлыҡта, ялбыр йөнлө, һоро төҫтә ине. Һоро айыуҙар хәтәр уҫал булалар шул. Шулай итеп, үсеккән айыу ажарланып үкерә-үкерә миней арттан төштө. Өрккән ат менән баш һуҡҡан яҡҡа саптым. Теүәтәй әллә ҡайҙа осоп ятып ҡалды, ҡуйы шырлыҡ битте генә түгел, кейемде лә теткеләне. Артҡа боролоп ҡараһам, айыу шәп йүгерә, ҡәһәрең, тештәрен ыржайтып етеп килә, аттың артҡы бәкәлен һоғона яҙа. Ундай мәлдә ҡайҙа инде ул, мылтыҡты ҡулға алып та, атып та булмай. Әлдә Туратым шәп булды, былай булһа, бөткәйнем..."- тип мут йылмайып тамамлай хикәйәһен атайым. Ошо минутта уның күҙҙәре янып, йөҙө йәнләнеп китә. Сөнки һәр һөйләгән мажараһын ул ҡабаттан кисереп, ваҡиғалар эсендә ҡайнап һөйләй, ҡайһы саҡ рәхәтләнеп көлөп ала ла, шунан хәбәрен дауам итә торғайны...

Бәхетле бала сағыбыҙҙың һәр кисе ошондай атай һөйләгән мажараларға үрелеп үтте. Ошо сәғәттәрҙе беҙ сабырһыҙланып көтөп ала инек, сөнки ул һөйләгән һунар мажаралары ла, енпәрейҙәргә, ғибрәтле хәлдәргә бәйле ҡурҡыныс хәлдәре лә, әкиәттәре лә, хикмәтле хәлдәре лә оло бер серле донъяға сәйәхәт ҡылдыра, ауыҙҙарыбыҙҙы асып тыңларлыҡ әсир итә ине. Ә әсәй йылы мейескә һөйәлеп, шым ғына шәл, ойоҡбаш, бейәләйҙәр бәйләй, ара-тирә "Ҡуй, балаларҙы ҡурҡытып ҡуйма", тип кенә һүҙгә ҡыҫыла ине. Хәҙер уйлайым да, ҡайһылай ғәжәйеп, бәхетле булған беҙҙең балаcаҡ!

Минең атайым, Фәйзуллин Билал Сәғит улы, 1932 йылдың көҙөндә Баймаҡ районы Үрге Яйыҡбай ауылында тәүге бала булып донъяға килә. Һуңынан уның ике ҡустыһы, бер һеңлеһе тыуа. Уның бала, үҫмер саҡтары бигерәк ауыр осорҙарға тура килә. Колхозлашыу осоронда тәүгеләрҙән булып колхозға инеп, үгеҙ менән колхоз баҫыуҙарын һөргән ата-әсәһе, һалҡын алдырып, үпкә сиренән бер-бер артлы ғына донъя ҡуялар. Ул саҡта атайыма 10 йәш, ә иң бәләкәй ҡустыһы Нөғмәнгә бары тик 3 ай ғына була. Береһенән-береһе бәләкәй балаларҙы ҡарап үҫтереү олоғайған өләсәләре һәм атайым иңенә төшә. Етмәһә, бөтә илде бөлгөнлөккә төшөргән һуғыш башлана. Аслыҡҡа, ялanғаслыҡҡа бирешмәҫкә тырышып, атайым шул йәшенән колхозға эшкә сыға, хәленән килгән барлыҡ эштәрҙе эшләй: күбә тарттыра, тырмала йөрөй, көтөү көтә, колхоз аттарын ҡарай. Бынан тыш, һеңле-ҡустыларына ашатыу өсөн балыҡҡа йөрөй, күрше ауылдарға утын, бесән ташып, он, картуфҡа алыштыра, кейек ауларға өйрәнә. Ауыл ҡарттары менән ситәүкәләр үрә, дуға бөгә, ағас ҡырҡа. Атайым бер ниндәй эштән дә ҡурҡмай торғайны, иң ауыр эшкә лә ихласлап тотонор ине. Уның егәрлегенә, сослоғона, тырышлығына иҫең китерлек. Шулай ул туғандарын ир еткерә, эйәле-башлы итеп туйҙар үткәрә, йорттар һалыша, хәленән килгәнсә ярҙамлаша. Ҡыҫҡаһы, ата-әсәһенең бар бурысын үҙе үтәй.

1956 йылда ошо ауыл ҡыҙы Ғәйетҡолова Нурикамал Сөләймән ҡыҙы менән тормош ҡороп, 50 йыл бергә татыу донъя көттөләр. Хәләл көстәре менән үҙ ғүмерҙәрендә өс йорт һалып инделәр. Беҙҙе, 6 балаларын, шулай уҡ уҡытып кеше итеүгә, эйәле-башлы, йортло итеп, бала-сағаларҙы ҡарашыуға бар көстәрен, тырышлығын һалдылар.

Атайым һунарсы булһа ла, ғүмере буйы тәбиғәткә, уның йән эйәләренә һаҡсыл ҡараштa булды, беҙҙе лә уларҙы яратырға өйрәтте. Уның юлын дауам итеп, һунарсылыҡ менән шөғөлләнгән ике ағайыма йыш ҡына: "Беҙҙең яҡҡа бала сығарыр өсөн генә килгән ҡоштарға бер ҡасан да атмағыҙ. Ҡош атҡығыҙ килһә, ана, беҙҙә ҡышлаусылары ла етерлек", - ти торғайны. Шулай уҡ бер ҡасан да илек, ҡоралай, ҡыр кәзәһе кеүек хайуандарға теймәне, киреһенсә, уларға ҡышҡылыҡҡа миндек бәйләй, бесән әҙерләп ҡалдыра, "Ит ашағығыҙ килһә, лутсы күп итеп мал көтөгөҙ", - тиер ине. Һәр саҡ беҙҙе үҙе менән бергә урманға алып йөрөнө. Бер арба итеп тейәп ала ла, мәленә ҡарап, бәкескә, йыуаға, ҡымыҙлыҡҡа, балтырған йыйырға, умырзая күрергә, еләккә, йә ҡарағат-муйылға алып сыға. Йә булмаһа, сыраҡҡа төшәбеҙ, мурҙаһындағы балыҡты, ҡапҡандарын ҡарарға барабыҙ. Ҡыш көнө кәбән кәртәләргә бергәләп йөрөйбөҙ. Ысынлап та "урман кешеһе" булды шул ул.

Ун йәшенән 60 йәше тулғансы бер көнөн дә ҡалдырмай колхозда эшләгән атайым бер ниндәй ҙә дан-шөһрәткә ҡыҙыҡманы. Әммә ауылдаштары, халҡы араһында исеме мәңгеләште уның. Әле булһа ла хөрмәтләп иҫкә алалар, уның эшләгән ҡайыштары, сана-арбалары, ат егеү ҡорамалдары, эйәр-дуғалары, эшкәрткән тиреләре халыҡҡа хеҙмәт итә. Уның ҡул эштәре, ул тотҡан йәнлек тиреләре республикабыҙҙың бик күп музейҙарын биҙәй. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, атайым күптән инде беҙҙең арала юҡ. Шулай булһа ла, беҙ уның тураһындағы яҡты хәтирәләр, уның аҡыллы кәңәштәре менән йәшәйбеҙ.

**Айгөл ФӘЙЗУЛЛИНА.**
**Сибай ҡалаһы.**

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...



# АБРУЙЫНА ЫШЫҠЛАНАМ...



**Ир-егет ниндәй булырға тейеш, тигән һорау бирһәләр, һәр ваҡыт күҙ алдымда атайым тора һәм һис икеләнмәйенсә: "Минең атайым һымаҡ", - тип яуаплайым. Сөнки үҙ-үҙемде белә-белгәндән ул ир-егеттең идеаль образы булды һәм шулай булып ҡала ла. Ҡыҙҙар инәйгә яҡын була, тиһәләр ҙә, мин барыбер ҙә атай ҡыҙы инем.**

Атайым, Наримйән Хәбир улы Ниғәмәтйәнов, беҙҙе артыҡ иркәләп ултырмаһа ла, уның ҡулының йылыһын бала сағымдан хәтерләйем. Һүҙгә лә, маҡтауға ла һаран булды, әммә күҙ ҡарашы уның барлыҡ кисерештәрен әйтеп бирә торғайны. Әгәр ниндәйҙер эш өсөн маҡтарға булһа, "минең ҡыҙым" йә "минең улым бит ул", тип кенә әйтеп, күңелдәрҙе иретерлек ҡарашы менән яратып бағыр ине, ә инде уға оҡшамаған ғәмәл ҡылынһа - ҡараштар ҡырыҫлана һәм етдигә әйләнә. Бәлки, шуғалыр ҙа, беҙҙең ғаиләлә бер ваҡытта ла тауыш-талаш булманы - бер-беребеҙҙең күңел торошон күҙҙәргә ҡарап аңларға, әйтер һүҙҙәрҙе күҙҙәргә ҡарап уҡырға өйрәндек.

Бәләкәйҙән шахмат-шашка серҙәренә төшөндөрөүсе лә атайым булды. Шуның менән түҙемлек, тыныслыҡ һаҡлай белеү, логик фекерләү һәләте һәм шул уҡ ваҡытта сәм дә тәрбиәләгән ул балаларында. Ә инде кискеһен утын ярһа,

МИНЕҢ ИР-ЕГЕТЕМ

# КЕМ БАЛАҺЫ, ТИЕП ҺОРАРҘАР...



**Атайым Иҙелбаев Миңнехәт Ғариф улы ауылыбыҙҙа ғына түгел, тирә-йүндә абруйлы, ихтирамлы кешеләрҙең береһе. Ауылда мәктәп булһа ла, күрше ҡыҙҙан күрмәксе, үҙем теләп 11 йәштән генә Баймаҡ интернат-мәктәбенә уҡырға киттем. Ялға, каникулға ҡайтырға, юлда йыш булырға тура килә ине шуға. Сит ауыл кешеләре осрап, ҡайҙан, кем ҡыҙы икәнемде һорайҙар. Шул саҡ мин: "Миңнехәт ағайҙың ҡыҙы", - тип яуаплайым икән. Юлдаштарым көлөп ебәрә лә: "Ә-ә, Ишбирҙеләге оҫтаның ҡыҙымы ни?"- тип, атайым хаҡында хәл-әхүәл белешеп, күп итеп сәләмдәрен күндереп ебәрерҙәр ине. Шунан мотлаҡ: "Йомош бар, бер барып сығам әле", - тип тә өҫтәйҙәр.**



Был ниәттәренең үҙ ғиләһе бар: атайым ғүмер-ғүмергә тирә-йүнгә билдәле данлыҡлы балта оҫтаһы булды. Кемдәр өсөн һәм ниҙәр генә эшләп һөйөндөрмәне ул халыҡты заманында! Баймаҡ леспромхозының столяр цехында эшләп, дәүләт заказдары пландарын һәр саҡ арттырып үтәүе өҫтөнә шәхси заказдар ҙа күп була ине. Улар ҙа леспромхоз аша еткерелә. Әле уйлайым да, бөгөнгө заман булһа, атайымдан байыраҡ кеше булмаҫ ине, тип ҡуям. Мәҫәлән, кемдер йорт һалырға булды, ти. Йүгереп атайыма килә. Иҙән, түбә таҡталары, ишек-тәҙрә яҡтары, тәҙрә рамдары һәм йөҙләктәре эшләп биреүен үтенәләр. Уның менән дә йомош-юл бөтмәй әле: йорт эсенә йыһаз да әллә ни булманы бит элек, төпкөл ауыл. Бар йыһаз ағас урындыҡ (һикенән ҙур), тимер карауат та өҫтәл. Ана шул өҫтәлдәрҙе (дүрткелен дә, түңәрәген дә) сыңъяһау итеп атайым яһай ине. Ә ултырғыстар? Ҡупшы ла, ғүмерлеккә лә эшләнә улар. Ул ғына ла түгел, һырлап, биҙәкләп тумбочкалар, кухня шкафтары, китап өсөн этажеркалар, ағас дивандар ҙа өй түрен йәмләп ултырыр ине. Былarҙан тыш, сана табандары, ат дуғаһы, саңғы, көйәнтә бөгөп ҡуя ла, кистәрен өйҙә лә шул эштәре менән мәшғүл булды, тик ултырманы.

Ишбирҙеләр хәҙер бесәнде башынан ахырына тиклем техника ярҙамында ғына эшләп ала. Ә бит бынан тиҫтә йыллап ҡына элек төп ҡорал ҡул салғыһы ла һәнәк-тырма булды. Атайымдың һәнәктәре! Кәбән ҡойор мәл етһә, тағы атайыма киләләр. Сөнки кәбән һалыр өсөн махсус һәнәктәр кәрәк: күкрәк һәнәк, ос һәнәк, ябайҙары инде көн дә кәрәк, тигәндәй. Тырмаһы ла, күбә тарттырырға оҙон арҡаны ла... Берәй эш эшләр булһа, бер ҡасан да кешегә йөрөмәне: бөтәһе лә үҙенеке бар ине. Ҡорал эшләр, оҫта маҡтаныр, ти бит халыҡ мәҡәле. Эш ҡоралы яһауға бик етди ҡараны атайым. Шуға ла ял көндәре йыш ҡына ат егеп, ҡустыларҙы ултыртып, үҙе менән урманға алып сығып китер ине. Эш күп: йә кәбән көртәләйҙәр, йә һәнәклек йәпле, йәтеш һәм төҙ йәш ҡайын һайлап ҡырҡып алып ҡайталар. Бер һыңғай һалабашҡа йүкә һыҙыралар. Уны Йылайыр йылғаһының аулаҡ ятыуына һалып, серетеп, йүкәнән арҡан ишәләр, септә үрәләр һ.б.

Атайым ғүмере буйы өй һалды: тәүҙә бер нисә тапҡыр яңыртып, балалар күбәйә башлағас, ҙурайтып - үҙебеҙгә, унан - ҡустыларына, унан - балаларына, унан башҡа туғандарға, ярҙам һорағаН ауылдаштарға... Әйткәндәй, ун бала үҫтек - өҫтәбеҙ бөтөн, тамаҡ тәрбиәле булды. Шөкөр, кеше балаһында булмағанды ла кейҙек: бесән бөткәс, атай менән әсәй йә Ҡанаға, йә Магнитҡа барып, беҙгә өр-яңы кейемдәр, мәктәп формалары алып ҡайталар. Мотоцикл менән дә сығып китерҙәр ине. Әйткәндәй, ауылда тәүгеләрҙән булып атайым мотоцикл һатып алды, бер аҙҙан уны өр-яңы көймәле "Урал"ға алыштырҙы, әле машиналы. Үҫмер генә йәшенән етем ҡалып, үҙенән бәләкәй дүрт ҡустыһына атай ҙа, әсәй ҙә булалар атайым менән әсәйем. Бер аҙҙан уларҙы башҡаландырып, өй һалышып, мал биреп сығаралар.

Уҡып сығыуым, яратҡан һөнәремә эйә булыуым менән мин атайыма бурыслы: 5 кластан алып - мине, шул уҡ ваҡытта 9 класҡа уҡырға килгән апайымды түләп уҡытты, сөнки Баймаҡ интернат-мәктәбендә ата-әсәле балалар өсөн байтаҡ ҡына түләргә кәрәк ине, етемдәр генә дәүләт тәьминәтендә уҡыны. Тыуған йортобоҙ йылыһын - әсәйебеҙ иҫтәлеген һаҡлап, усаҡтан ут өҙмәй, беҙгә - балаларына көнәштәрендә күндереп, фатихан менән ҡурсалап, ауырыу-һыҙлауһыҙ йөҙ йәшә, рәхмәт һиңә, атайым!

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

---

беҙ күмәкләшеп сығып өйәбеҙ. Ялҡып китһәк, гөр килеп туп тибеп, хоккей уйнап алабыҙ, эргәлә генә Әй йылғаһына төшкән тыҡырыҡта бергәләп сана шыуған ваҡыттарыбыҙ ҙа аҙ булманы.

Утын тигәндән, газ булмаған ваҡытта мейес яғылғас, уны өйгә индерергә, киптерергә, иртән мейескә яғырға кәрәк. Беҙҙең ғаиләлә был (шулай уҡ һыу ташыу) ир-ат вазифаһы ине. Атайым һәм малайҙары кисен өйгә ҡосаҡ-ҡосаҡ утын индерә, атайым уны матурлап мейес башына теҙә. Иртән тороп үҙе мейескә яға, ҡайнатырға сәйнук, йылытырға аш ултырта. Өй бер аҙ йылынып, сәй ҡайнағас ҡына инәйем тора, һунынан беҙ ҡыбырлаша башлайбыҙ. Әммә ғаиләлә ҡатын-ҡыҙҙың анйҡ вазифаһы бар - ир-ат ҡайтыуға (ҡасан, нисәлә ҡайтыуына ҡарамаҫтан) ашарға әҙер, өй ҙә, кейем-һалымдары ла таҙа, иң мөһиме - яҡты сырай һәм ял итергә тыныс мөхит булырға тейеш.

Һабантуй етһә, ғаиләбеҙ менән көрәшселәр майҙанынан һәм ат сабыштарынан ары китә алмайбыҙ, сөнки атайым ауылыбыҙҙа ғына түгел, күрше ауылдарҙа ла һәр саҡ көрәшеп, еңеүселәр рәтендә булды, тайҙар өйрәтеп, уларҙы сабыштарҙа ҡатнаштырҙы.

Атайым һүҙгә һаран ине, тиһәм дә, ҡатын-ҡыҙға иғтибарлы һәм ихтирамлы, ололарға оло-лоҡло, кеселәргә кеселекле булды. Берәй ергә барғанда матур итеп кейенеп, урам буйлап атайымды бер яҡтан инәйем, бер яҡтан мин ҡултыҡлап үткәндә, уның "бына, күрҙегеҙме, минең ҡыҙыҡайҙарым" тигән ғорур маһайыуын тоймау мөмкин түгел ине. Атайымдың инәйем менән минә булған мөнәсәбәте әйәмгиәттә лә беҙҙе юғары күтәрҙе, сөнки ул үҙе лә беҙгә бер ауыр, ҡаты, алама һүҙ әйтмәне һәм башҡаларҙан да әйттермәне. Ғүмүмән, ул бер ваҡытта ла йөҙ йыртманы, әрләмәне, тауышын күтәрмәне, әйтер һүҙен уратып, төрттөрөп, кинәйәләп кенә әйтте. Уның юморҙы нескә тойомлауы һәм үҙенең дә юморға бай булыуы тормошобоҙҙо тағы ла йәнлерәк, йәмлерәк итте.

Белем һәм мәғлүмәтлелеге буйынса ғаилә ағзалары, туғандарына ғына түгел, күптәр өсөн "аяҡлы энциклопедия" булды ул. Уның юҡтан бар яһарға, тәбиғәт байлыҡтарын файҙаланырға, үҙендең мөмкинлектәрендә баһаларға, бер ваҡытта ла танау төшөрөп, ҡул һәлендереп ултырмаҫҡа өйрәтеүҙәре аша ысын мәғәнәһендә тереклек мәктәбе үттек.

Халыҡта шундай әйтем бар - үҙен-үҙе яһаған кеше. Быны атайыма ҡарата ла әйтергә була. Хеҙмәт юлын ябай бригадир, электриктан башлап, өс балалы булғас, Башҡорт дәүләт аграр институтының агрономия факультетын ситтән тороп тамамланы ул. Ошо осорҙа управляющий ҙа, ауыл советы хакимиәте башлығы булып та эшләне. Һунынан инде хаҡлы ялға киткәнсе оҙаҡ йылдар хужалыҡтың профком рәйесе вазифаһын биләне. Ауылда ғына түгел, район кимәлендә абруйлы шәхес булды. Әле лә күптәр мине һәм ағайым менән ҡустымды атайыма оҡшатып таныйҙар. Шулай ҙа 35 йәшем тулғанда атайымдың әйткәндәре әле лә ҡолағымда: "Быға тиклем һин минең абруйыма ышыҡланып йәшәгәйнең, хәҙер иһә мин һинең абруйың менән ғорурланып йәшәйем!"

Әммә атайым 70 йәшенә бер ай ҡалғас, беҙҙе ҡалдырып, китеп барҙы. Шулай ҙа уның абруйы һәм рухы һаман да һаҡлап, яҡлап тора, хаталанғанда ҡарашы шелтәләй, ҡыуаныстарға йылмайыуынан алда ҡуҙҙәре көлә башлай кеүек...Мин һәр кемдең тормошонда абруйына ышыҡланып йәшәрлек һәм һинең абруйың менән ғорурланып йәшәгән шундай ир-аты булыуын теләйем.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

---

УҢЫШ ҠАҘАН

# ЕҢЕЛ ЙӘШӘ!

Бик йыш оло йәштәге ир-аттан: "Ғүмерем буйы атайымдың, һинең менән ғорурланам, һине яратам, тигән һүҙен ишетергә хыялландым", - тигәненә шаһит булырға тура килә. Әйҙәгеҙ, үҙ-үҙебеҙ менән ғәҙел булайыҡ: был тормошта нимә менән генә шөғөлләнһәк тә, уны бер маҡсаттан эшләйбеҙ - беҙҙе нығыраҡ яратһындар. Тирә-яҡтағы бөтөн нәмә, осраҡлы кешеләр, коллегалар, килеүселәр - барыһы ла яратыу һәм аңлау теләй. Ҡайһы берҙәре, хатта шуға өлгәшер өсөн ахмаҡлыҡтар эшләргә риза.

Ни өсөн был турала уйланырға кәрәк? Сөнки әгәр тормошобоҙҙоң асылын аңламаһаҡ, уны бер ваҡытта ла яйға һала алмаясаҡбыҙ. Тормошобоҙҙоң төп маҡсаты - бер-беребеҙҙе яратыу икәнenә риза булмаһаҡ, нимә мөһимерәк икәнен асыҡларға һәм ошо йүнәлештә тәүге аҙымды яһарға кәрәк. Әгәр был постулат бер ниндәй ҙә ҡаршылыҡ тыуҙырмай икән, тормошобоҙҙа беҙ эшләй алған бөтөн нәмәне баһалауҙың универсаль критерийы барлыҡҡа килә: "Әгәр уйлағанымса эшләһәм, минен, яҡындарымдың тормошонда мөхәббәт артырмы?" Кешеләрҙе яратыу - һәр осраған кеше менән үбешеү түгел. Кешеләрҙе яратыр өсөн ирекмән булырға йәки асыҡыусы илдәрҙә ризыҡ таратырға кәрәкмәй. Кешеләрҙе яратыу - тимәк, уларҙы әҙерәк тәнҡитләү һәм күберәк баһалау. Тимәк, уларға оҡшағанын кейергә, оҡшағанса йәшәргә, үҙе булып ҡалырға мөмкинлек биреү ул.

### Ғәфү итә белеү

"Ғәфү итеү - миләүшәнең үҙен тапаусыға хуш еҫ бүләк итеүе ул", тигән Марк Твен. Барыһы ла түбәндәгесә тормошҡа аша. Беҙ хыялыбыҙҙа башҡаларҙың тәртибен, үҙ-үҙен тотоуын уйлап сығарабыҙ. Ә инде ул ҡағиҙәләр үтәлмәһә, шул кешене күрә алмай башлайбыҙ. Башҡаларҙы беҙ уйлап сығарған ҡағиҙәләргә күҙ йомғаны өсөн күрә алмау - абсурд.

Күбебеҙгә бала саҡтан уҡ, кешене ғәфү итмәйенсә, уға шулай яза бирәһең кеүек тойола. Йәғни беҙ һәр саҡ: "Бына һине ғәфү итмәйем, һунынан яфаланырһың", - тип уйлайбыҙ. Ғәмәлдә үҙебеҙ ыҙалайбыҙ. Беҙҙең тамаҡта төйөр тора. Беҙҙең йоҡобоҙ ҡаса. Икенсе тапҡыр кемделер күрә алмай башлаһағыҙ, күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ һәм тойғоларығыҙҙы тыңлағыҙ. Тәнегеҙҙә нимә барғанын тойоғоҙ. Кемгәлер ғәйеп тағырға тырышып, бары тик үҙегеҙҙе генә бәхетһеҙ яһайһығыҙ. Кешеләр үҙ белемдәре һәм теләктәре буйынса йәшәй. Һеҙ уны үҙен гәйепле тойорға мәжбүр итәһегеҙме, юҡмы, бер ниндәй айырма юҡ. Нисек бар - шулай була. Әгәр дауыл ҡубып, подвалығыҙҙы һыу баҫһа: "Тәбиғәткә бер ваҡытта ла быны ғәфү итмәйәсәкмен", - тип әйтәһегеҙме?

Ғәфү итә белеү һәләте тураһында һүҙ башлағас, ата-әсәләребеҙҙе ғәфү итеп, нормаль, уңышлы тормошҡа беренсе аҙым яһарға мөмкин. Әлбиттә, улар идеаль түгел. Әммә беҙ бәләкәй булғанда, уларҙың бурысы беҙҙе үҫтереү генә түгел, беҙҙән башҡа ла күп хәстәрҙәре булған. Нимәнелер яңылыш эшләһәләр, улар инде үткәндәрҙә ҡалған. Әсәйегеҙҙе ни тиклем оҙағыраҡ ғәфү итмәһәгеҙ, үҙ тормошоғоҙҙо шул тиклем ағыулайһығыҙ.

**Эндрю МЭТЬЮЗ.**
**(Дауамы бар).**

✓ *Тормошта ике трагедия бар: береһе - үҙеңдең иң изге хыялыңдың тормошҡа ашмауы, икенсеһе - тормошҡа ашыуы.*

*(Бернард Шоу).*



*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# ВАТАНДЫ ҺАҠЛАУСЫЛАР КӨНӨ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**5-се һандағы сканворд яуаптары. Горизонталь буйынса:** Буддизм. Аэроб. Трактор. Кама. Әрҙәнә. Ҡылыҡһыр. Олон. БМВ. Акушер. Архив. Тягач. Брамби. Закирова. Иҙрисова. Азат. Аҡыл. Аҡыҡ. Ижад. Ашуғ. Алыш. **Вертикаль буйынса:** Ҡыуатова. Каланхоэ. Вәзир. Танһыҡ. Имамат. Ток. Драматургия. Ваҡиға. Тромб. Ошаҡ. Мөбәрәкова. Бангладеш. Умарта. Әрнеш. Әйбер. Игәт.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1439 һижри йыл.*

| Февраль - Март (Йомадиәл ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 26 (10) дүшәмбе | 6:45 | 8:15 | 13:30 | 17:13 | 18:43 | 20:13 |
| 27 (11) шишәмбе | 6:43 | 8:13 | 13:30 | 17:15 | 18:45 | 20:15 |
| 28 (12) шаршамбы | 6:40 | 8:10 | 13:30 | 17:17 | 18:47 | 20:17 |
| 1 (13) кесе йома | 6:38 | 8:08 | 13:30 | 17:19 | 18:49 | 20:19 |
| 2 (14) йома | 6:36 | 8:06 | 13:30 | 17:21 | 18:51 | 20:21 |
| 3 (15) шәмбе | 6:33 | 8:03 | 13:30 | 17:23 | 18:53 | 20:23 |
| 4 (16) йәкшәмбе | 6:31 | 8:01 | 13:30 | 17:25 | 18:55 | 20:25 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

# БИҘӘКЛЕ ЙОРТ

Йорт - кеше үҙенең тәбиғи тормошон үткәрә торған урын. Бында ул үҙенең кемлеген, йәмғиәттең ҡайһы бер ҡанундарынан азатлығын тоя, тәненә ял, йәненә тыныслыҡ бирә. Шуға күрә Ҡөрьәндә: "Аллаһ һеҙгә йәшәр өсөн йорттар бирҙе", - тиелә ("Әл-Нәхл" (Бал ҡорто) сүрәһе, 80-се аят). Мөхәммәт бәйғәмбәр: "Бәхеттең дүрт төрө бар: намыҫлы ҡатын, иркен йорт, яҡшы күрше һәм яйы килеп тороу", - тигән. Ул мосолмандарҙан йорттарын таҙа тотоуҙы талап итә, сөнки йорт үҙенең паклығы менән Ислам йорто икәнен күрһәтеп торорға тейеш.

Мосолмандарға үҙ йортон сәскәләр менән биҙәү рөхсәт ителгән, шулай уҡ уны нағыш һәм башҡа биҙәү әйберҙәре менән дә матурларға мөмкин. Ҡөрьәндә: "Әйт, Аллаһы Тәғәлә үҙ ҡолдарына индергән биҙәнеү нәмәләрен кем тыйған?" - тиелә (Әл-Әғрәф" (Кәртәләр) сүрәһе, 32-се аят). Әйе, мосолманға йортондағы гүзәллек, кейеменең матурлығы һәм үҙе ирешкән һәр нәмә менән хозурланыу тыйылмаған. Тик Ислам самаһыҙлыҡты тыя. Мөхәммәт бәйғәмбәр ҙә мосолмандарҙы үҙ йорттарын артыҡ зиннәтле һәм мәжүсилеккә тартым әйберҙәр менән тултырыуҙы, шуның менән маһайыуҙы тыйған.

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*

## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**24 февраль "Итекле бесәй"** (Ш. Перро), әкиәт. Башлана 12.00 12+
**24 февраль "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама 16+
**25 февраль "Мин һинең ҡәйнәң булам"** (С. Белов), комедия 12+
**26 февраль Әнғәм Атнабаевтың** хәтер кисәһе 12+
**27 февраль "Зөләйха күҙҙәрен аса"** (Г. Яхина, Я. Пулинович) 16+
**28 февраль "Мөхәббәт ҡарағы"** (Ф. Бүләков), музыкаль комедия 12+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**25 февраль "Диләфрүзгә дүрт кейәү"** (Т. Миңнуллин), музыкаль комедия 12+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**24 февраль "Три поросенка"** (С. Михалков). Башлана 12.00, 14.00 0+
**25 февраль "Принцесса Крапинка"** (А. Шмидт). Башлана 12.00, 14.00, 16.00 0+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе Өфөлә гастролдә

**26 февраль** М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры сәхнәһендә **"Ҡатын түгел - аждаһа!"** (Д. Сәлихов), комедия 12+
**27 февраль** "Нур" Өфө дәүләт татар театры сәхнәһендә **"Көйһөҙ кейәү"** (Н. Гоголь), комедия 16+
**28 февраль** "Нур" Өфө дәүләт татар театры сәхнәһендә **"Өс таған"** (М. Кәрим) 6+

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Баймаҡ ҡалаһында йәшәүсе һөйөклө әсәйебеҙ, ҡәйнәбеҙ, өләсәйебеҙ **ШАРАПОВА Әлифә Әнүәр** ҡыҙын күркәм юбилейы - 70 йәше менән ҡотлайбыҙ.

Сабыр аҡылы, уңғанлығы менән бар кешене һоҡландырған, тормош ауырлыҡтарынан һис бөгөлөп төшмәгән, оло йөрәкле изге кешебеҙҙе тыуған көнө менән ҡайнар ҡотлап, тик ҡыуаныстар менән тулы оҙон ғүмер, күңел тыныслығы теләйбеҙ. Балаларың, ейән-ейәнсәрҙәреңдең изгелеген күреп, ҡәҙер-хөрмәттә бәхетле ғүмер кисерергә яҙһын һиңә!

*Сал сәстәрең бигерәк күркәм,*
*Күҙҙәреңдә - ғорур сабырлыҡ.*
*Яғымлы һүҙ, тыйнаҡ аҡыл -*
*Барыһы ла үрнәк алырлыҡ.*

*Беҙҙең өсөн ҡәҙерле һин,*
*Хоҙай ҡушһын бергә йәшәргә.*
*Оҙаҡ йылдар яҙһын беҙгә:*
*"Әсәй", - тиеп әйтергә!*

**Йөрәктән сыҡҡан иң изге теләктәр менән ҡыҙҙарың Гөлнира, Альмира, кейәүҙәрең Илфат, Рушан, ейәнсәрҙәрең Наҙгөл һәм Мәликә.**

* * *

Февраль айында тыуған көндәрен билдәләүселәр - **Учалы районы** Бәләкәй Ҡаҙаҡкол ауылынан Илдар Килмөхәмәтов, Уральск ҡасабаһынан Рәзилә Исҡужина, Муса ауылынан Сәлиха Фәхретдинова, **Мәләүез ҡалаһынан** Зөлфәт Ғәлиев, **Өфө ҡалаһынан** Әминә Исмәғилева, **Хәйбулла районы** Яңы Ергән ауылынан Фәниә Шәрипова, **Баймаҡ районы** Мерәҫ ауылынан Нәсилә Дауытбаева, Ҡолсора ауылынан Алмабикә Йомағужина, Ниғәмәт ауылынан Г. Рыҫмөхәмәтова, **Сибай ҡалаһынан** М. Ғәйетбаев, **Ейәнсура районы** Новопавловка ауылынан Зөлиә Әлмөхәмәтова, **Әбйәлил районы** Һәйетҡол ауылынан Вәсилә Ситдыҡова, **Мәләүез районы** Һабаш ауылынан Бәғирә Бикбулатова, **Октябрьский ҡалаһынан** Рәсимә Усманова һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ҡотлайбыҙ!

Яҡты көндөң һәр бер иртәһен шатланып ҡаршы алығыҙ, сәләмәт булығыҙ, бәхеткә төрөнөп кенә йәшәгеҙ!

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

*ҠУШАМАТ*

# МЫЙЫҠҠА БӘЙЛЕ МӘҘӘКТӘР

**Һуңғы йылдарҙа мыйыҡ йә һаҡал ебәреү ҡайтанан модаға инә башланы. Мыйыҡ ир-аттың ғорурлығы ғына түгел, ә уны айырып торған билдә ролен дә үтәй. Мәҫәлән, элегерәк Европа һәм Азия халыҡтарының күбеһендә балиғ булмаған һәр ир-ат заты мыйыҡ йәки һаҡал үҫтерергә тейеш булған. Был үҫмерҙең өлкәнәйеүен, тәүәккәллеген, аҡыллылығын күрһәтеүсе билдә булып һаналған.**



Үткән быуатта мыйыҡ-һаҡалдың төрөн батшаларға, полководецтарға, сәйәсмәндәргә оҡшатып һайлаһалар, бөгөн беҙ уны музыканттар, рәссамдар һәм киноактерҙар кеүек үҫтерергә тырышабыҙ. Кемгәлер ул килешеп, йөҙөнә матурлыҡ килтерһә, ҡай берәүҙә, киреһенсә, йәмһеҙләй кеүек.

Минең мыйыҡ бик иртә, 8-се синыфта уҡыған саҡта, барлыҡҡа килде. Мәктәпте тамамлап, 1989 йылда Стәрлетамаҡ мәҙәниәт-ағартыу училищеһына уҡырға ингәс, минә "Горький" тигән ҡушаматты шап иттереп тағып та ҡуйҙылар. Бер йыл тирәһе шул ҡушамат менән йөрөнөм. Әрме сафынан да буш түгел, ә "Муса, Мостафа, Ибраһим, Абдулла" ҡушаматтары менән ҡайттым. Уларын командирым тағып ҡайтарҙы.

Мыйыҡҡа бәйле киләһе ҡушаматым "Чапаев" булды. Унынһын инде минә "Каруанһарай" фольклор-эстрада төркөмө егеттәре ҡушты. Артабан "Каламбур, Боярский, Ғәбитов" һәм башҡа ҡушаматтар китте.

Риф ағай Ғәбитов менән бәйле ике хәл булды. Сибай филармонияһы асылғас, беҙ йыл һайын Өфө тамашасыһы алдында концерттар ҡуя инек. Шулай, 1999 йылда, "Ритайым" программаһы менән баш ҡалаға барҙыҡ. Башҡорт дәүләт филармонияһының грим бүлмәһенән сығып килһәм, оло ғына бер апай: "Риф ҡустым, маладис. Кире ансамблгә ҡайтыуыңа ҡыуанып бөтә алмайым. Ул банк эше һиңә килешмәй, һинең урының - сәхнә түре", - тип ҡыуанысын белдереп китте.

Ә икенсеһе былайыраҡ булды. 2004 йылдың йәйендә, Учалы филармонияһы составында, мин Францияға Халыҡ-ара фестивалгә барҙым. Сент ҡалаһында туҡталдыҡ. Кисен Бөрйән районы Нәби ауылы егете Айсар Йомағужин менән ҡаланы ҡарап килергә тип сығып киттек. Ҡала урамдары Мадагаскар, Бразилия, Алжир, Ҡытай, Канада һәм Мексиканан килгән артистар менән тулы. Өҫтәл артына ултырып, ярым урыҫ телендә, ярым башҡортса һөйләшергә керештек. Шул ваҡыт беҙҙең ҡаршыла ултырған мөләйем генә ханым янибыҙға килде лә минә вата-емерә урыҫса: "Здравствуй. Ты меня помнишь? 1996 год. Сент-Мало. Меня Мария зовут", - тип өндәште. Башта аптырап ҡалһам да, эштең айышына тиҙ төшөндөм. 1996 йылда Ф.Ғәскәров исемендәге Халыҡ бейеүҙәре ансамбле менән Сибай бейеү ансамбле Францияла фестивалдә булып ҡайтҡан инеләр. Үҙемде Риф ағайҙың бер туған ҡустыһы Рим тип таныштырып, оҙаҡ ҡына һөйләшеп ултырҙыҡ. Ҡайтҡас, Мария апайҙың ҡайнар сәләмдәрен түкмәй-сәсмәй Риф ағайға еткерҙем.

Бына шулай, йәмәғәт, мыйыҡ арҡаһында әллә күпме ҡыҙыҡлы хәлдәргә тарып бөтәлдө.

**Илфат МУСИН,**
**Сибай концерт-театр берләшмәһе артисы.**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# КӨЙӨКЛӨ...

## көйөк ашар

"Табамын" тип ашама, күп ашаһаң ҡоҫорор, "беләмен" тип һөйләмә, күп һөйләһәң, боҫторор.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Теләктәр күберәк йәш йөрәктәргә хас, ул теләктәр ғүмер буйы һинең йөрәкте тулҡынландырасаҡ, тип уйлаусылар ахмаҡ: күп тын йылғалар шаулы шарламалар менән башлана, әммә уларҙың береһе лә диңгеҙгә ҡәҙәре күбекләнеп сапмай.

**(Михаил Лермонтов).**

Тормош бер ваҡытта ла түләүһеҙ бирелмәй һәм яҙмыш бүләк иткәндең һәр береһенең үҙ хаҡы бар.

**(Стефан Цвейг).**

Идеалдарҙың ҡиммәте шунда: уларға яҡынлаған һайын, улар юҡҡа сыға.

**(Махатма Ганди).**

Беҙ шул ҡәҙәре күпте теләйбеҙ: беҙҙең бөтөн теләктәребеҙ тормошҡа ашһа ла беҙ барыбер үҙебеҙҙе бәхетһеҙ тойор инек.

**(Бертольд Ауэрбах).**

Тормошта ике трагедия бар: береһе - үҙеңдең иң изге хыялыңдың тормошҡа ашмауы, икенсеһе - тормошҡа ашыуы.

**(Бернард Шоу).**

Хыял менән уйнау ҡурҡыныс: селпәрәмә килгән хыял кешене ғүмерлеккә бәхетһеҙ итеүе ихтимал; хыял артынан ҡыуып йөрөп, ғүмереңдең үтеп китеүен һиҙмәй ҡалыуың, йә хыялый тойғолар менән янып, уны ҡорбан итеүең бар.

**(Дмитрий Писарев).**

Һәр кемдең башҡа берәүгә лә белдермәй торған, шулай уҡ хатта үҙенә лә белдерергә ҡурҡҡан теләктәре була.

**(Зигмунд Фрейд).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл:**
**"- Хөрмәтле Уҡытыусы, мин нисәмә йылдар үҙ-үҙемде тәрбиәләү, камиллаштырыу, үҙемдең эске проблемаларымдың хәл итеү менән шөғөлләнәм. Ләкин алға китеш һиҙелмәй. Мин нимәне дөрөҫ эшләмәйем икән?" - тип һораған берәү.**

**- Һин урыныңдан алға китмәйһең, сөнки үҙеңде проблемалы бик күп булған шәхес итеп тояһың, - тигән Уҡытыусы.**

**- Ә нисек хәл итергә һуң ул проблемаларҙы, улар бит ысынлап та бик күп, - ти икән теге кеше.**

**- Һин үҙеңде ул проблемаларҙы нисек хәл итергә икәнде белгән шәхес итеп той, - тип аҡыл биргән Уҡытыусы.**

**- Шул ғынамы? - тип аптыраған кеше.**

**- Бары шул ғына, - тигән Уҡытыусы..."**

*ИҒТИБАР: АКЦИЯ!*

# ҺӘР КЕМ УҠЫРҒА ТЕЙЕШЛЕ...

## йөҙ башҡорт китабы

**"Башҡорт китабы топ-100+" акцияһына килгән хаттарҙы барлауҙы дауам итәбеҙ. Һеҙ ҙә башҡорт әҙәбиәтендә һәр быуын кешеһенең иғтибарына лайыҡ әҫәрҙәрҙе/китаптарҙы тәҡдим итеүҙән туҡтамағыҙ, хөрмәтле гәзит уҡыусылар!**

***93. Суфиян Поварисов "Яҙмыш ҡорбандары" роман.*** Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында бөтә ил менән күргән михнәттәрҙе, хәсрәттәрҙе автор ишетеп кенә белмәй, ул үҙе лә ошо ут эсендә ҡоростай сынығып ҡайтҡан кеше. Был романында ул Башҡортостандың Иглин районында ойошторолған 469-сы миномет полкында хеҙмәт иткән яҡташтарҙың яҙмышы тураһында бәйән итә. "Башҡорт полкы" тип йөрөтөлһә лә, егерме ете милләт вәкилен берләштергән был полктың Ватанды азат итеүгә индергән үҙ өлөшө бар. Роман яу ҡырындағы аяуһыҙ һуғыш тураһында ғына булмаҫ, кешеләр яҙмышы, рух көсө, ауырлыҡтарҙы еңер мөхәббәт, өмөт тураһында һөйләр. Тарих төпкөлөндә ҡала барған был ваҡиғаларҙы хәтерҙән сығармау, шундай мәхшәргә ҡабатланырға юл ҡуймау өсөн ошондай әҫәрҙәрҙе уҡырға кәрәк.

***94. Рәшит Солтангәрәев "Оло юлдың туҙаны" китап.*** Был китапта әҙиптең һайланма әҫәрҙәре тупланған. "Осто бөркөт" повесы, "Татар менән башҡорт", "Буш хәбәр", "Ишкәкһеҙ кәмә", "Шкаф" һәм башҡа хикәйәләрен уҡырға мөмкин. Том-том романдар уҡырға ваҡыт таба алмаған, әммә әҙәбиәткә битараф булмаған кешеләр өсөн Рәшит Солтангәрәевтың хикәйәләре менән танышырға тәҡдим итәм. Тормошсан, тәрән мәғәнәле был әҫәрҙәр һәр кемгә үҙенә күрә донъяуи һабаҡ бирерлек.

***95. Әсғәт Мирзаһитов "Ғүмер ике килмәй".*** 1983 йылда баҫылып сыҡҡан был китапта драматургтың "Бәхтегәрәй", "Әсәләр көтәләр улдарын", "Ғүмер ике килмәй" тигән пьесалары тупланған. Йылдар дауамында сәхнәләрҙән төшмәгән, бөтә халыҡ яратып ҡараған спектаклдәрҙе, уларҙы ижад иткән әҙипте һәр башҡорт кешеһе белергә тейеш, тип иҫәпләп, "Башҡорт китабы топ-100+" акцияһы исемлегенә индерергә тәҡдим итәм.

***96. Нәжиб Асанбаев "Һайланма әҫәрҙәр".*** 2011 йылда донъя күргән был йыйынтыҡта Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы, күренекле драматург Нәжиб Асанбаевтың пьесалары, публицистик мәҡәләләре, очерктары, ижади портреттары, иҫтәлектәре тупланған. Уның шәхесе, ижады тураһында ҡараш булдырыу, драма әҫәрҙәрен һәм театр сәнғәтен аңларға өйрәнеү өсөн ошо йыйынтыҡты һәр кем ҡулына алырға тейеш. Башҡорт драматургияһындағы иң сағыу "Ҡыҙыл паша", "Көҙән башҡорто", "Һыу юлы" һәм башҡа пьесалары айырыуса иғтибарға лайыҡ.

**"Башҡорт китабы топ-100+"** акцияһына ҡушылығыҙ, үҙегеҙ уҡыған башҡорт китаптары/әҫәрҙәре араһынан иң-индәрен һайлап, шулар тураһында редакцияғыҙға төбәп хаттар яҙығыҙ. Йәки "Бәйләнештә" социаль селтәрендәге "Киске Өфө" гәзите төркөмөндә махсус булдырылған **"Башҡорт китабы топ-100+"** акцияһы" тип аталған фекер алышыу битендә "#башкитап" хештегы ҡуйып, үҙ фекерегеҙҙе белдерегеҙ!

**Рубриканы Сәриә ҒАРИПОВА алып бара.**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке Федерального агентства по печати и массовым коммуникациям.**

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 22 февраль 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4587
Заказ - 329/02